ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 ноябрь (ҡырпағай)
2022
№45 (1035)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**XIX быуаттағы...**

башҡорт түрәләре кейеме



6

**Адвокатмы?**



Ул ҙур хәреф менән яҙылырлыҡ һөнәр

8-9

**Халыҡ йырҙары...**

боронғоларҙың аманаты булып яңғыраны



11

**Эскелек - хурлыҡ та ул...**



12-13


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Иғтибар! "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә ПР905 индекслы баҫмабыҙға яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы - 798 һум 60 тин.***
***Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ.***
***Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Рәсәй Президенты Владимир Путин мәктәптәрҙә тыуған төбәк тарихын уҡытыуҙың берҙәм ысулдарын әҙерләргә ҡушты. Ошоға бәйле, мәктәптәрҙә Башҡортостан тарихы дәресен индереү тураһында фекерегеҙ нисек?***

***Айбулат АҠМАНОВ, тарих фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһының ағза-мөхбире:*** Тарихын белмәгән халыҡтың киләсәге юҡ, тибеҙ. Бындай хәл менән килешеп йәшәү мөмкин түгел, сөнки бөгөн ил яҙмышы көн тәртибендә торғанда, Рәсәйҙең артабанғы үҫеше, хәүефһеҙлеге һәм именлеге ошо ил граждандарының, айырыуса йәш быуындың илһөйәрлек тойғоларына бәйле. Үкенескә, һуңғы йылдарҙа мәктәптәрҙә тыуған яҡты өйрәнеү предметы программанан төшөрөп ҡалдырылды һәм бының менән белем-тәрбиә биреү эшенең мөһим бер өлөшөнә ғәфү иткеһеҙ битарафлыҡ күрһәтелде. Ә бит Рәсәй үҙенең төбәктәре менән көслө, тибеҙ. Һәм, ысынлап та, Рәсәй илендә элек-электән 200-ҙән ашыу милләт вәкилдәре һыйышып, тыныс йәшәй. Уларҙың һәр береһенә үҙ йола-традициялары, тел һәм рухи-мәҙәни-тарихи хазиналар күп төрлөлөгө хас һәм былар бөтәһе лә ватаныбыҙҙың уртаҡ ҡиммәттәре иҫәпләнә. Шулай булас, һәр милләт халҡы туған телен, тарихын өйрәнергә, рухи-мәҙәни хазиналарын һаҡларға бурыслы. Ә былар бит мәктәптәрҙә өйрәнелергә тейеш. Шуға күрә лә ил Президенты Владимир Путиндың мәктәптәрҙә тыуған яҡ тарихын уҡытыуға берҙәм ҡараш булдырыу мәсьәләһен әҙерләргә ҡушыуы - бөгөнгө талап.

Йырҙа йырланғанса, Тыуған ил кесе ватанға, тыуып-үҫкән ереңә һөйөүҙән, туған тупһанан башлана. Башҡортостан йәмәғәтселеге даирәһендә лә ошо юҫыҡта һуңғы осор айырым бер йәнләнеү һиҙелә: республикабыҙ мәктәптәрендә Башҡортостан тарихын уҡытыу темаһына түңәрәк өҫтәлдәр, фекер алышыуҙар үткәрелә. Мин үҙем дә Башҡортостан тарихы буйынса ике бүлектән торған дәреслектәр (2004, 2006 йылдар) авторы булараҡ, ошо һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашам һәм мәғариф учреждениеларында Башҡортостан, Рәсәй тарихын өйрәнеү сәғәттәрен арттырыу кәрәк, тип иҫәпләйем.

БСТ-ның "Киске телеүҙәк" пограммаһында, мәҫәлән, педагогтар ҡатнашлығында мәктәптәрҙә тарих уҡытыуҙың әһәмиәте хаҡында фәһемле һөйләшеү булды. Белем биреү учреждениеларында уҡыусыларҙа илһөйәрлек тәрбиәләү маҡсатында уларҙа башланғыс кластарҙан алып тарихҡа ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләй башларға кәрәк. Тыуған яҡ тарихын уҡытыуҙы тергеҙеү, шулай итеп, мөһим, төп фәндәрҙең береһенә әйләнергә тейеш. Икенсенән, тарих дәреслектәренә талаптар ҙа ҡәтғи ҡуйыла. "Башҡортостан тарихы" уҡыу ҡулланмаларын да, һуңғы йылдарҙағы мәғлүмәттәрҙе лә өҫтәп, тулыландырып, яңынан баҫтырып сығарырға кәрәк. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында булып үткән һөйләшеүҙә иһә мәктәптәрҙә тарих фәненә сәғәттәрҙе етерлек кимәлдә бүлеү, Башҡортостан Республикаһының һәм тотош илебеҙ тарихын өйрәнеүгә иғтибарҙы арттырыу, Башҡортостан тарихын өйрәнеүҙе юғары уҡыу йорттарында ла индереү кәрәклеге билдәләнде. Мәктәптәрҙә быйылғы уҡыу йылынан башланған "Мөһим нәмә тураһында һөйләшеү" дәресендә лә илебеҙ, республикабыҙ тарихына айырыуса ҙур иғтибар бүлергә кәрәк.

## БАШ ҠАЛАМ

# ХЕҘМӘТ ҠАҺАРМАНЛЫҒЫ...

## ошо һында мәңгеләштерелде



**Баш ҡалабыҙ тағы бер иҫтәлекле урынға байыны - Өфөнөң Киров районында, көньяҡтан инеү урыны эргәһендә 20 метр бейеклектәге "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһы асылды.**

Тантанала сығыш яһап, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был монументтың фронт батырҙары менән бер рәттән Бөйөк Еңеүҙе яҡынайтҡан тыл хеҙмәткәрҙәренә хөрмәт билдәһе булыуын билдәләне. "Һуғыш йылдарында Өфөгә тиҫтәләрсә эре предприятие, дәүләт учреждениелары, фәнни институттар эвакуациялана. Тотош республика фронт ихтыяжы өсөн эшләй. Башҡортостан хеҙмәтсәндәре иген үҫтерә, фронтҡа кейем-һалым тегә, нефть сығара, танкылар һәм самолеттар өсөн яғыулыҡ, хәрби авиация өсөн двигателдәр етештерә. Республика халҡы аҡсаһына бронепоезд, танкылар, тотош авиаэскадрильялар һәм башҡа ҡорал эшләнә. Йөҙҙәрсә эвакуацияланған ғаиләләр ҡабул ителә, яралылар дауалана. Өфө һәм республика халҡының хеҙмәт фиҙаҡәрлеген танып, Рәсәй Президенты баш ҡалабыҙға "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" тигән маҡтаулы исем биреү тураһында указ ҡабул итте. Беҙ бының менән сикһеҙ ғорурланабыҙ һәм Владимир Владимировичҡа был ҡарары өсөн рәхмәтлебеҙ.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ



# ҮҘ МАҠСАТЫНА ӨЛГӘШТЕ

**Гәзит сыға башлағандан алып ун йылдан ашыу ошо гәзит редакцияһында эшләү бәхете йылмайҙы миңә. Тураһын әйтергә кәрәк, гәзит мине үҙ-үҙемде, һәлкәүлегемде еңергә, ваҡ-төйәк эштәрҙән арынып, өҫтәл артына ултырып, ижади эшләргә өйрәтте. Унда эшкә килгәнсе шиғыр ғына яҙа инем, ултырып эшләргә өйрәнгәс, проза әҫәрҙәрем, атап әйткәндә, "Тыштағы зыярат" романым, бик күп повесть-хикәйәләрем, публицистик әҫәрҙәрем ижад ителде.**

Баш мөхәррир гәзиттәге "Диалог", "Монолог" рубрикаларын алып барыуҙы миңә йөкмәткәс, үҙем өсөн өр-яңы донъяны астым. Яҙыусыларҙы, ғалимдарҙы, төрлө өлкәләге белгестәрҙе, дин әһелдәрен ҡара-ҡаршы ултыртып әңгәмәләр ҡорғанда гәзит башҡорт донъяһының, республика йәмәғәтселегенең ысын мәғәнәһендәге "фекер тресына" әүерелде. Академик Ғайса Хөсәйенов менән ойошторған бер әңгәмә ныҡ иҫтә ҡалды. Ғалим алдан әйтелгән тема буйынса күп һандағы әҙер тезистарын тотоп килгәйне. Әммә мин уны фекер ағышының бөтөнләй икенсе юҫығынан алып киттем, ғалимға ул тезистарҙың береһе лә кәрәк булманы. Ғайса Батыргәрәй улы һуңынан әңгәмәгә шундай баһа бирҙе: "Һин, Әхмәр, әңгәмәбеҙҙе шундай юҫыҡҡа төшөрҙөң, мин ғүмерҙә лә башҡа килмәгән фекерҙәрҙе әйтеп, үҙ-үҙемә асыштар яһаным..."

Һөҙөмтәлә гәзит уҡыусылар менән урындарҙа осрашҡан саҡта шуға ла иғтибар иттем: гәзит геройҙарының, авторҙарының фекерләү стиле уҡыусыларыбыҙға ла күсә башлаған икән. Төп күрһәткес: "Киске Өфө"нө уҡыусы негатив фекерләүҙән ҡотола. Ошо факт ҡына ла гәзиттең үҙ маҡсатына өлгәшеүе тураһында һөйләй түгелме?

Гәзит сыға башлағанда сатирик шағир Буранбай Исҡужин "Киске Өфө" нө "ҡуйы гәзит" тип баһалап, бер көлдөрһә, һуңыраҡ күренекле телсе ғалим Вәкил Хажиндың: "Артабан гәзиттең бер һаны сыҡмаған хәлдә лә, халҡыбыҙҙың рухын күтәреү маҡсатын был баҫма үтәне инде", - тигән фекере тәрән уйға һалды. Шул саҡта мин дә гәзиттең башҡорт телендә сыҡҡан башҡа баҫмалар араһындағы ролен шулайыраҡ баһалағайным: "Башҡортостан" - беҙҙең дәүләтселегебеҙҙең рәсми баҫмаһы, "Йәшлек" үткән быуаттың аҙағындағы үҙгәртеп ҡороуҙар осоронда халҡыбыҙҙың рухын уятыусы баҫма булды, ә "Киске Өфө" иһә тәүге һандарынан уҡ үҙенең алдына шундайыраҡ маҡсат ҡуйҙы: дәүләтселегебеҙ, республикабыҙ бар, халҡыбыҙ рухи уяныу кисергән, ә артабан ни эшләргә? Баш ҡалабыҙҙың төп баҫмаһы булған "Киске Өфө" бына егерме йыл буйы шул һорауға яуап бирә, уҡыусыларын шул яуаптар өҫтөндә уйландыра, һығымталар яһата, уйлыларҙа - уй, аңлыларҙа аң уята.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

? ***Рәсәй Президенты Владимир Путин мәктәптәрҙә тыуған төбәк тарихын уҡытыуҙың берҙәм ысулдарын әҙерләргә ҡушты. Ошоға бәйле, мәктәптәрҙә Башҡортостан тарихы дәресен индереү тураһында фекерегеҙ нисек?***

***Ринат ШӘЙБӘКОВ, мәғариф ветераны, Башҡортостандың мәғариф отличнигы, йәмәғәтсе, тыуған яҡты өйрәнеүсе, Белорет районы Йөйәк ауылы:*** Редакцияның ошо юҫыҡтараҡ бер һорауына былтыр мин яуап биргәйнем инде. Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә ил Президенты Владимир Путиндың тарих дәреслектәрен тәнҡитләүе айҡанлы фекер алышыу булғайны ул саҡ. Йәш быуынды ысын илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләүҙә оло һәм кесе ватаныбыҙҙың данлы тарихы бик ҙур әһәмиәткә эйә. Ләкин ошоға тиклем Рәсәй һәм донъя тарихын өйрәнһәк тә, тыуған төбәк тарихы иғтибарҙан ситтә ҡала килде. Дөрөҫ, үҙгәртеп ҡороуҙар осоронда республикабыҙ мәктәптәрендә "Башҡортостан тарихы" төбәк компонентына индерелгәйне, ләкин ҡыуанысыбыҙ оҙаҡҡа булманы, тиҙҙән был предметты программанан алып та ташланылар. Кемгә ниндәй зыяны тейгәндер инде... Бәхеткә күрә, был мәсьәлә хәҙер яңынан ҡуҙғатыла. Яңыраҡ ҡына, 17 октябрҙә билдәле булды: Рәсәй Президенты Владимир Путин мәктәптәрҙә тыуған төбәк тарихын уҡытыуҙың берҙәм ысулдарын әҙерләргә ҡушты. Ниһайәт! "Башланғыс дөйөм, төп дөйөм һәм урта дөйөм белем биреүҙең төп мәғариф программалары сиктәрендә Рәсәй Федерацияһы субъекты (тыуған яҡ) тарихын уҡытыуҙың килешелгән юлдарын әҙерләүҙе тәьмин итергә", - тип әйтелә Мәғариф министрлығы һәм РФ субъекттарының башҡарма властары органдарына төбәп. Был программаларҙы эшләүгә Рәсәй тарих йәмғиәте менән Рәсәй хәрби-тарих йәмғиәте йәлеп ителәсәк. 4 ноябрҙә ошо йәмғиәттәрҙең ойошторолоуына 10 йыл тулыу айҡанлы осрашыуҙа Владимир Путин тарих һабаҡтарын өйрәнеүҙең төп асылын ошо һүҙҙәр менән әйтеп бирҙе: "Ил тарихы кешенең тыуған, үҫкән һәм үҙен тыуған иленең, халҡының бер өлөшө итеп тойған ғаиләһе, ауылы, ҡасабаһы, ҡалаһы, төбәге тарихынан башлана".




Бына нимә өсөн кәрәк беҙгә Башҡортостан тарихын уҡытыу! Илһөйәрлек тойғоһо ла бит баланың ғаиләһе, тыуған ауылынан башлана. Ошо йәһәттән Башҡортостан тарихын уҡытҡанда ырыу-нәҫел шәжәрәләребеҙҙе өйрәнеү үҙе бер ҡулланма, тормош һәм ғаилә дәреслеге булып хеҙмәт итер ине. Үткән быуатта уҡ сыҡҡан "Башҡортостан тарихы" дәреслектәренә, уларҙың авторҙары һәм мөхәрририәт ағзаларына шундай тәҡдимем бар: дәреслектәрҙе яңы шарттарҙан сығып, тағы бер ҡарап сығырға, был эшкә тарихсыларҙы, уҡытыусыларҙы йәлеп итергә, һуңғы йылдарҙағы тарихи асыштар, археологик табыштарҙан сығып, яңы мәғлүмәттәр менән тулыландырырға һәм, иң мөһиме, тарих дәреслеген балалар өсөн ауыр, ҡатмарлы академик телдә түгел, ә ҡыҙыҡлыраҡ, йәнлерәк итеп төҙөргә кәрәктер, тип уйлайым. Күберәк иллюстрациялар, һүрәттәр менән биҙәргә, тарихи документтарҙан өҙөктәр, археологик табыштар, башҡа төр артефакттар күсермәләрен бирергә була.

Тыуған ил тойғоһо тыуған төйәктән, ата-бабаларыбыҙ ғүмер иткән кесе Ватаныбыҙҙан башлана, тиһәк тә, ошоға тиклем Башҡортостан тарихын өйрәнеү мөмкинлеге сикләнде, уны мәктәп программаһына бер индерҙеләр, бер алып ташланылар, ә шул уҡ ваҡытта Рәсәй тарихы буйынса дәреслектәрҙә илебеҙҙәге күп милләтле халыҡ хаҡында бөтөнләй тиерлек иҫкә алынмай. Мәҫәлән, А.Данилов мөхәррирлегендә авторҙар коллективының 10-сы кластар өсөн сығарған дәреслегендә Емельян Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр ихтилалында башҡорт халҡының роле, милли батырыбыҙ, полководец Салауат Юлаев хаҡында - ләм-мим! Ә бит 18-се быуаттың икенсе яртыһында Рәсәй империяһын дер һелкеткән был халыҡ күтәрелешенең икенсе осорон, ғөмүмән, башҡорт ихтилалы тип атарға ла булыр ине. Ҡыҙғанысҡа, Рәсәй дәреслегендә был хаҡта бер генә һөйләм дә юҡ. Илебеҙ тарихының башҡа осорҙарын яҡтыртыу ҙа ошо кимәлдә. Мәҫәлән, 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында рус халҡы менән бергә иңгә-иң терәп фашистарға ҡаршы күп милләтле бөтөн СССР халыҡтары ла көрәшкән, уртаҡ Еңеү яулаған, ләкин был турала шулай уҡ бер генә һүҙ ҙә юҡ. Ә бит федераль дәреслектәргә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы, уның командиры Миңлеғәли Шайморатов, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев, Советтар Союзы Геройҙары, Александр Матросовтың батырлығын ҡабатлаған Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин, Зөбәй Үтәғолов һәм башҡалар, интернациональ партизандар бригадаһы командиры - "Ҡара генерал" Даян Мурзин кеүек легендар батырҙарыбыҙҙың ҡаһарманлыҡтары хаҡында ла яҙылырға тейештәр бит!

Илһөйәрлек тойғоһо бит тап ана шундай тыуған төбәк шәхестәре менән ғорурланыуҙан, улар хаҡында белеүҙән башлана ла инде. Был күп йәһәттән федераль кимәлдәге тарих китаптарын, шулай уҡ Башҡортостан тарихы дәреслектәрен яҙыусыларға һәм мәктәптәрҙә ошо предметтарҙы уҡытыусыларға ла ныҡ бәйле икәнде онотоорға ярамаҫ ине.

Тағы бер фекерем: Башҡортостан тарихы дәресен уҡытыуҙы осраҡлы кешеләргә йәки башҡа фәндәрҙән белем биргән уҡытыусыларҙың кемеһенәлер сәғәт етмәгәнлектән өҫтәп биреү тигән нәмә булырға тейеш түгел! Әйткәндәй, Башҡортостан тарихынан уҡытыусыларға аттестация үткәреп торғанда ла зыян булмаҫ ине, тип уйлайым.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров алғы һыҙыҡҡа бер кемде лә ебәрмәҫкә кәрәклеген белдерҙе. Республика етәксеһе Премьер-министр Андрей Назаровҡа ошо йәһәттән тәртип булдырырға ҡушты. Бында яҡташтарыбыҙҙың - махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яугирҙарыбыҙға гуманитар ярҙам күрһәткән меценаттарҙың үҙ белдеге менән сәфәргә сығыуы хаҡында һүҙ бара.

✓Социаль селтәрҙәрҙә Башҡортостандан 25 меңгә яҡын кеше мобилизацияланған, ә республика халҡынан ысын һандарҙы йәшерәләр тигән мәғлүмәт таралды. Республиканың хәрби комиссариатында белдереүҙәренсә, социаль селтәрҙәрҙә таратылған был хәбәрҙәр ялған, дөрөҫлөккә тап килмәй. "Республикабыҙҙан мобилизацияланған яҡташтарыбыҙ тәғәйен хәрби частарға ебәрелә. Мобилизация мәсьәләләре эш хаҡы түләү, кейемһалым менән тәьмин итеү, мобилизацияланғандарҙы ҡарау менән бәйле. Шуға техник яҡтан ғына ла планды арттырып үтәү мөмкин түгел", - тип билдәләнеләр республиканың хәрби комиссариатында.

✓Рәсәй Президенты граждандар менән мобилизацияланған хәрбиҙәргә ярҙам мәсьәләләрен тикшерәсәк. Ошо темаға арналған махсус сара тураһында Президенттың матбуғат секретары Дмитрий Песков белдерҙе. Бынан алда ил Президенты мобилизацияланғандарға 195 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү тураһындағы указға ҡул ҡуйыуын хәбәр иткәйне.

✓2023 йылдың 1 сентябренән илебеҙ мәктәптәрендә башланғыс хәрби әҙерлек курсы индерелә, тип хәбәр итә ТАСС мәғариф министры Сергей Кравцовҡа һылтанма менән. "Мәктәптәрҙә ул киләһе йылдан башлана, 1 ғинуарға тиклем курсты әҙерләүҙе тамамларға тейештәр, һуңынан уға һынау үткәреләсәк", - тип министрҙың һүҙҙәрен еткерҙе ТАСС. Башланғыс хәрби әҙерлек курсын урта дөйөм белем биреүҙең мотлаҡ программаһына индерергә тигән тәҡдим менән "Ғәҙел Рәсәй - дөрөҫлөк өсөн" партияһы лидеры Сергей Миронов сығыш яһаған.

✓Башҡортостан Башлығы Указы менән республиканың Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы етәксеһе вазифаһын башҡарыусы итеп быға тиклем ведомство начальнигы урынбаҫары булып эшләгән Салауат Ҡолбахтин тәғәйенләнде. Ул был идаралыҡта 2019 йылдан алып эшләй, әйҙәүсе белгес-эксперт, баш белгес-эксперт, археологик мираҫ бүлеге етәксеһе вазифаларын биләгән.

БАШ ҠАЛАМ



# ХЕҘМӘТ ҠАҺАРМАНЛЫҒЫ...

## ошо һында мәңгеләштерелде

(Башы 1-се биттә).

Ололар менән бер рәттән, станоктар артына баҫып, ошо йылдарҙың тере шаһиты булған "һуғыш балалары"ның ҡаһарманлығы ла баһалап бөткөһөҙ. Бында ейәндәрен алып килеп, улар үҙҙәренең ҡаһарман бала сағы һәм ғүмер йылдары тураһында бәйән итер. Беҙ оло быуындың лайыҡлы вариҫтары булырға ынтылырға тейеш. Беҙгә лә Тыуған илде һаҡларға әҙерлегебеҙҙе, илһөйәрлегебеҙҙе эштә раҫлау ваҡыты етте. Әлеге ваҡытта алғы һыҙыҡта булған егеттәребеҙгә терәк булайыҡ. Уларға нацизмды еңергә фиҙаҡәр хеҙмәтебеҙ менән ярҙам итәйек", - тине Радий Фәрит улы.

Шулай уҡ иҫтәлекле ваҡиға менән республика халҡын Рәсәй Президенты ярҙамсыһы Владимир Мединский, Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев, "Гидравлика" предприятиеһында 50 йылдан ашыу эшләгән Ждановтарҙың хеҙмәт династияһы вәкиле Алексей Портянко тәбрикләне. Республика Башлығы белдереүенсә, киләсәктә бында асыҡ һауалағы музей ҙа буласаҡ һәм унда Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында сығарылған продукция күрһәтеләсәк.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Рәсәй Президенты Владимир Путин мәктәптәрҙә тыуған төбәк тарихын уҡытыуҙың берҙәм ысулдарын әҙерләргә ҡушты. Ошоға бәйле, мәктәптәрҙә Башҡортостан тарихы дәресен индереү тураһында фекерегеҙ нисек?***

***Нурислам ҠАЛМАНТАЕВ, тарих фәндәре кандидаты:*** Бөгөн белем биреү учреждениеларында йәш быуынды илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләү иң көнүҙәк һәм кисҡен мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Гәзит уҡыусы яҡшы хәтерләйҙер: элек СССР заманында ла, аҙаҡ Рәсәй Федерацияһында ла мәктәптәрҙә республикалар, Рәсәй субъекттары, шул иҫәптән Башҡортостан тарихы оҙаҡ йылдар буйы өйрәнелеп килде. Һуңғы йылдарҙа белем биреү системаһында күҙәтелгән туҡтауһыҙ реформалар арҡаһында төбәк компоненттары юҡҡа сығарылды, тиергә лә була. Дөрөҫ, уҡыу программалары Рәсәй тарихы предметы сиктәрендә төбәк компонентын да "ҡыҫтырып ебәреү"ҙе рөхсәт итә ине ул итеүгә, ләкин быныҡ өсөн урындарҙағы мәктәптәрҙә эшләүсе директорҙарҙың, шулай уҡ шул предмет уҡытыусыларының энтузиаст, хатта көрәшсе булыуы талап ителә ине. Хәйер, мәктәп дирекцияһы Башҡортостан тарихын уҡытыуға сәғәттәр ҙә бүлмәй, уны дәрес теҙмәһенә лә индермәй икән, күпселек тарих уҡытыусыларына ла был кәрәкмәй ине, сөнки был курс "өҫтәмә йөк" итеп ҡаралды. Әйткәндәй, Башҡортостан тарихына сәғәттәр бүленмәгән хәлдә лә, ҡайһы бер мәктәптәрҙә әлеге мин әйтеп киткән энтузиастар осраштырғылай ине. Мәҫәлән, Мәғариф социаль селтәрендә Краснокама районы Шушнур дөйөм урта белем биреү мәктәбе уҡытыусыһы Лилиә Әхмәтхан ҡыҙы Александрованың Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте программаһы нигеҙендә 5-9-сы кластар өсөн ҡыҫҡа, ләкин тос йөкмәткеле итеп төҙөлгән крайҙы өйрәнеү буйынса уҡыу-методик материалына юлыҡҡайным. Был уҡытыусы милләте менән мари ҡыҙы булһа ла, үҙенең тыуған ере - Башҡортостаны тарихын балаларға өйрәтеүҙе мотлаҡ тип иҫәпләй һәм быныҡ өсөн нимәләр эшләргә тырышҡан энтузиастарҙың береһе тип ҡабул иттем мин. Уның: "Төбәк компонентын һаҡлап алып ҡалыу кәрәк, сөнки ул беҙгә тыуған төбәге тарихын, мәҙәниәтен белгән заман шәхестәре - илһөйәрҙәр тәрбиәләргә булышлыҡ итәсәк", - тигән фекере бөгөнгә көн талабына раҫ килеп тора.

Бөгөн Рәсәй йәмғиәтенә тыуып-үҫкән илен һөйгән, уның тарихын яҡшы белгән һәм шуға күрә лә теләһә ниндәй ялған-яла, зарарлы идеологиянан азат булған объектив фекерле заман шәхестәре кәрәк. Әгәр йәш кеше үҙе тыуып-үҫкән ерен, тыуған йортон, ғаиләһен ҡәҙерләп, ҡиммәтен белеп үҫә икән, ул Тыуған илен дә ярата, баһаһын белә һәм уны һаҡларға ла әҙер була. Бөгөн мәктәптәрҙә, махсус урта һәм юғары уҡыу йорттарында тарихты өйрәнеүгә ниндәй юғары талаптар ҡуйылыуы һәр кемгә яҡшы аңлашылалыр. Шуға күрә тарих дәрестәре балалар күңелен йәлеп итерек кимәлдә йәнле, ҡыҙыҡлы, шул уҡ ваҡытта фәһемле лә булырға тейеш. Был күп йәһәттән уҡытыусының үҙенең белем кимәленә, педагогик оҫталығына бәйле. Әйткәндәй, былтыр тарих уҡытыусыларының 1-се Бөтөн донъя конгресында сығыш яһап, РФ Президенты Владимир Путин, тарихты дәреслектәрҙән генә өйрәнеү дөрөҫ түгел, тигән фекер әйткәйне. Ысынлап та, бында үҙ эшен, предметын яратҡан, йыбанмаған, ялҡының энтузиастар кәрәк, тип иҫәпләйем, сөнки тарих - ул дәреслек программаһы ғына түгел. Тыуған ауыл, ғаилә тарихтарын өйрәнеү, шәжәрәләр төҙөү, походтарға йөрөү, музейҙарға барыу, тәрбиәүи йүнәлешле, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы тураһында фильмдар ҡарау, Советтар Союзы һәм Рәсәй Геройҙарын белеү, мемуарҙар, әҙәби әҫәрҙәр менән танышыу, патриотик йырҙар өйрәнеү - бик күп бит ул тарихыбыҙ сығанаҡтары һәм илһөйәрлек тәрбиәләү юлдары!

Шул ыңғайҙан тағы ла әлеге конгреста яңғыраған бер фекер иҫкә төштө: тарих дәресендә даталар-йылдарҙы, тарихи шәхестәрҙең исем-шәрифтәрен ятлап алыуҙан бигерәк, фекерләргә, һығымталар яһарға өйрәнеү мөһим. Башҡортостан тарихы дәреслектәренә килгәндә, беҙҙең тарихсы ғалимдар тарафынан төҙөлгән һуңғы йылдарҙағы дәреслектәр тап бөгөнгө талаптарҙан сығып эшләнде, тип әйтә алам, ҡалғаны методистар һәм тарих уҡытыусыларына, уларҙың илһөйәрлегенә һәм энтузиазмына бәйле.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР



# ӘКИӘТ ГЕРОЙҘАРЫ...

## балалар майҙансығында ла һынланһын

**Республикабыҙҙың баш ҡалаһы миңә үҙенең матурлығы, йәшеллеге, үҙенә генә хас булған ығы-зығыһы, мәшәҡәттәре һәм йәшәйеше менән оҡшай. Көн һайын иртән эшкә ашыҡҡан һәм кисен өйҙәренә табан юлланған кешеләр ағымы күңелемә яҡын. Уҡыу мәле етеп, балалар мәктәпкә, студенттар уҡыу йорттарына йөрөй башлағас, Өфөнөң ҙур икәнлеге айырыуса күҙгә салынды.**

Көҙгө Өфө айырыуса күңелемә яҡын, сөнки тәбиғәт тә үҙгәрә, ҡала урамдарын тағы ла йәнлерәк итеп ауыл хужалығы баҙарҙары эшләй башлай. Был йылда Киров районында үткән ошондай йәрминкәгә барып, уңыштың мул булыуына ҡыуанып ҡайттым. Рабкоров урамында уҙған был баҙарға республиканың 14 районы үҙенең ауыл хужалығы продукцияһын алып килгән икән. Мин Архангел, Белорет, Бөрө райондары аграрийҙарынан картуф, кишер һәм бал һатып алып ҡайттым. Хаҡтары ла тешләшмәй, сифаты ла яҡшы.

Күп фатирлы йортта йәшәүсе кеше булараҡ, миңә үҙ фатиремдың ғына түгел, ә тотош подъездың, ихатаның төҙөк, йыйнаҡ һәм матур булыуы шарт. Быйыл беҙ йәшәгән йорт подъезын ипкә килтереп, бик ҡыуандырҙылар. Беҙҙең подъезд менән бер рәттән, Өфөнөң Октябрь районында тағы ла 23 подъезда баҫҡыстар йүнәтелгән, тәҙрә һәм яҡтыртҡыстар алмаштырылған, диуарҙар һәм түбә буялған, шулай уҡ подъезға ингән ишектәр тирәһе лә рәтләнгән.

1 сентябрь Телеүҙәк яғына барғанда Пушкин урамындағы өр-яңы балалар майҙансығын асыу тантанаһын күрергә насип булды. Майҙансыҡ әкиәт мотивтары буйынса эшләнгән һәм бик күркәм урын балаларҙың шат тауыштарынан гөрләп тора ине. Ошондай уҡ әкиәт мотивтары менән эшләнгән балалар майҙансыҡтары күберәк булһын ине баш ҡалала, тигән теләктә ҡалабыҙ һәм улар араһында башҡорт халыҡ әкиәттәре нигеҙендә эшләнгәндәре лә булыр, тип өмөтләнәбеҙ. Шулай уҡ халыҡ эпостары, легендалары мотивтары буйынса барлыҡҡа килгән урындар барлыҡҡа килһә, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине.

**Гөлсәсәк АҠБУЛАТОВА.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә 2022 йылда иң яҡшы журналист эштәре өсөн Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия тапшырыу тантанаһы үтте. Быйыл премияға 13 авторҙың һәм 1 ижади коллективтың эштәре тәҡдим ителгәйне. Уларҙың өсәүһе - Тәлғәт Сәғитов, Фәнзил Санъяров, Айгөл Усманова лауреат исеменә һәм Башҡортостан Хөкүмәтенең 100 мең һумлыҡ премияһына лайыҡ булды.

✓2023 йылда Рәсәйҙә Әсәлек капиталы күләме беренсе балаға - 590 мең һумға, икенсеһенә иһә 790 мең һумға тиклем арта. Был хаҡта балалы ғаиләләргә ярҙам итеүгә арналған кәңәшмәлә Рәсәй Президенты Владимир Путин белдерҙе. Бынан тыш, Президент балалы ғаиләләргә әһәмиәтлерәк ярҙам күрһәтеү кәрәклеген дә әйтте. Шуға бәйле Әсәлек капиталы программаһы 2026 йылға тиклем оҙайтыла. Президент һүҙҙәренсә, 1 февралдән инфляция кимәле буйынса инвалидтарға һәм ветерандарға айлыҡ аҡсалата түләүҙәр индексацияланаса.

✓Президент Владимир Путин "Артек" халыҡ-ара балалар үҙәгененң 100 йыллығын байрам итеү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Хөкүмәткә ярты йыл эсендә байрамдың ойоштороу комитетын төҙөү, байрам саралары планын әҙерләү һәм раҫлау бурысы йөкмәтелгән. Легендар "Артек" лагеры 1925 йылда балалар өсөн палаткалы лагерь-шифахана булараҡ ойошторолған. 2014 йылда "Артек" Халыҡ-ара балалар үҙәге тип үҙгәртелде.

✓Башҡортостанда 2022 йылдың өсөнсө кварталында икенсел торлаҡ баҙарында бер квадрат метрҙың уртаса хаҡы 84,5 мең һумға еткән. 2021 йылдың аҙағы менән сағыштырғанда, хаҡтар 13,2 процентҡа артҡан, тип белдерҙе республика статистиктары. Әле республикала беренсел баҙарҙағы торлаҡтың "бер квадраты" - 110,8 мең һум. Уҙған йылдың дүртенсе квартала менән сағыштырғанда, беренсел торлаҡҡа хаҡтар 30,8 процентҡа артҡан.

✓Район-ҡалалар өҫтәмә рәүештә 56 берәмек коммуналь махсус техника һатып аласаҡ. Был хаҡта республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә төбәк торлаҡ-коммуналь хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Ирина Голованова белдерҙе. Был маҡсатта урындағы бюджеттар иҫәбенән 363 млн һумдан ашыу аҡса бүленәсәк. Шулай уҡ һыу менән тәьмин итеү селтәрҙәрендә булыуы ихтимал аварияларҙың эҙемтәләрен бөтөрөү өсөн төбәк ДУП-тарына 51 млн һумға 7 берәмек махсус техника кәрәк.

ҠЫҪҠАСА

# АСЫҠ ҺАУАЛА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 3 ноябрҙә асылған "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһы янында асыҡ һауалағы музей булдырырға ҡушты.** Хөкүмәттең Республикаға идара итеү үҙәгендә үткән оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров республиканың баш ҡалаһында тағы бер яҡшы туристик урын барлыҡҡа килеүен билдәләне. "Минеңсә, матур килеп сыҡты. Был тыл эшсәндәренә, һуғыш балаларына ихтирам билдәһе булып тора, - тине Радий Хәбиров. - Хакимиәтебеҙҙән һуғыш ваҡытында эшләнгән әйберҙәрҙән асыҡ һауалағы музей ойоштороуҙы һорайым. Ғөмүмән, туристар өсөн тағы бер күркәм урын барлыҡҡа килде. Халыҡ йөрөй, ҡарай, уларға оҡшай". Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тыл эшсәндәренең батырлығын символлаштырған егерме метрлыҡ объект баш ҡалаға ингән ерҙә автомобиль күперҙәренән уң яҡта, Ағиҙел йылғаһы буйында урынлашҡан.

✓ **Армияла хеҙмәт итеү ваҡытын бер йылдан ике йылға тиклем оҙайтыу тураһында закон проекты Дәүләт Думаһына ҡарауға индерелмәй, сөнки депутаттарҙың идеяһы Рәсәй Федерацияһы Президенты хакимиәтендә һәм илдең Оборона министрлығында хуплау тапманы.** Федерация Советының конституция ҡануниәте буйынса комитеты етәксеһе Андрей Клишас һүҙҙәренсә, хеҙмәт итеү ваҡытын оҙайтыу Рәсәй армияһының һуғышҡа һәләтлелеген арттырмай. Дәүләт Думаһының оборона буйынса комитеты рәйесе Андрей Картаполов та шундай фекерҙә: "Бөгөнгө көндә армияла ике йыл хеҙмәт итеүҙең кәрәге юҡ. Федерация Советында ла бындай идеялар бар икән, был уларҙың хоҡуғы. Беҙ ундай закон сығарыу башланғыстарын ҡарамайбыҙ һәм әлеге көндә ундай ихтыяж юҡ тип иҫәпләйбеҙ".

✓ **Башҡортостанда махсус хәрби операция зонаһына мобилизацияланған яҡташтарыбыҙҙың балалары йәмәғәт транспортында бушлай йөрөргә мөмкин.** Республика Хөкүмәтенең тейешле ҡарары рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Хәҙер 1-11-се класс уҡыусылары, 23 йәшкә тиклемге урта махсус һәм юғары уҡыу йорттары студенттары йәмәғәт транспортында бушлай йөрөргә хоҡуҡлы. Транспорт ойошмаларының киткән сығымдарын республика бюджеты үҙ өҫтөнә ала. 1 ноябрҙән көсөнә ингән ҡарар ағымдағы йылдың аҙағына тиклем ғәмәлдә ҡала. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда мобилизацияланғандарға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам сараларын тормошҡа ашырыу өсөн норматив-хоҡуҡи акттар - өс закон һәм 22 акт әҙерләнә. Был хаҡта Башҡортостан вице-премьеры - финанс министры Лира Иғтисамова хәбәр иткәйне.

✓ **Махсус хәрби операция зонаһында яугир данлы яҡташыбыҙ Ғәни Ғәлимовтың Хәсән күлендәге ҡаһарманлығын ҡабатлаған.** Селтәрҙә таралған видеояҙмала күренеүенсә, махсус хәрби операция зонаһында Рәсәй һалдаты ҡауышап ҡалмаған, ә дошман дронынан ырғытылған ике гранатаны ситкә алып ташлаған. "Томан" ҡушаматлы хәрби әйтеүенсә, "Яугир иҫән-һау, барыһы ла яҡшы". Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2020 йылда Туймазы районы Япрыҡ ауылында Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, полковник Ғәни Ғәлим улы Ғәлимов иҫтәлегенә таҡтаташ асылғайны. Яҡташыбыҙ Бөйөк Ватан һуғышын 130-сы Латыш уҡсылар корпусы штабының оператив бүлеге начальнигы вазифаһында тамамлаған. Әммә Ғәни Ғәлимов 1938 йылда Хәсән күле буйында күрһәткән батырлығы менән билдәле. Ул саҡта лейтенант Ғәни Ғәлимов яуҙа япондарҙың утлы нөктәләрен юҡ иткән, үҙенә осҡан гранаталарҙы тотоп алып, дошман яғына ташлаған. Ошо ҡаһарманлығы өсөн Ғәни Ғәлимов Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ булған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# МАШИНАЛЫ БУЛДЫЛАР




**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2022 йылғы уңышты йыйыуҙа иң яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән 10 комбайнсыға "Лада Гранта" автомобиле асҡыстары тапшырҙы. Республиканың иң яҡшы игенселәрен бүләкләү тантанаһы Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында уҙҙы.**

Күгәрсен районының "Толмачев" крәҫтиән-фермер хужалығы механизаторы Павел Толмачев, Борай районының фермер хужалығы етәксеһе Динәрик Шакиров, Мәләүездең "Ашҡаҙар" ауыл хужалығы предприятиеһы механизаторы Артур Абдуллин, шулай уҡ Хәйбулла районының СССР-ҙың III дәрәжә хеҙмәт даны орденына лайыҡ булған "Закиров" крәҫтиән-фермер хужалығы механизаторы Сәхиулла Билалов, Дыуан районының "Ярославка" ауыл хужалығы предприятиеһы" йәмғиәте механизаторы Константин Гладких "Лада Гранта" автомобилдәре менән бүләкләнде.

"Намыҫлы хеҙмәтегеҙ өсөн рәхмәт, - тип рәхмәт белдерҙе тармаҡ вәкилдәренә Радий Хәбиров. - Бөгөнгө ҡатмарлы шарттарҙа һеҙ дәүләт кимәлендәге мөһим бурысты башҡараһығыҙ - илебеҙҙең аҙыҡ-түлек именлеген тәьмин итәһегеҙ. Һуңғы 30 йылда тәүге тапҡыр республикала игендән 5,2 миллион тоннанан ашыу уңыш алынды. 1,2 миллион тоннанан ашыу шәкәр сөгөлдөрө, 320 мең тонна көнбағыш майы орлоғо йыйып алынған. Был - рекордлы күрһәткес".

Республика етәксеһе хәбәр итеүенсә, уңыш йыйыуҙа Стәрлетамаҡ районы аграрийҙары алдынғылыҡты бирмәне, улар 300 мең тоннанан ашыу ашлыҡ һуҡҡан. Республиканың тағы алты районы тәүгә 200 мең тонналыҡ сикте үткән.

# БҮЛӘКЛӘНЕҮГӘ ЛАЙЫҠТАР

**Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының Колонналы залында республиканың агросәнәғәт комплексы һәм аҙыҡ-түлек индустрияһының иң яҡшы хеҙмәткәрҙәренә дәүләт наградалары тапшырылды.**

Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте хеҙмәткәрҙәре көнө уңайынан тиҫтә йылдан ашыу ауыл хужалығы продукцияһын етештереү өлкәһендә эшләгән тракторсылар, агрономдар, малсылар, крәҫтиән хужалыҡтары етәкселәре, йөмғеһе 50 кеше наградалар менән билдәләнде. Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы квалификациялы кадрҙар, ошо тармаҡҡа тоғро булған хеҙмәткәрҙәр ярҙамында ҡуйылған бурыстарҙы һәр ваҡыт теүәл үтәне һәм үҙ маҡсатына табан барҙы, тип билдәләнеләр тантанала. "Республикабыҙҙың ауыл хужалығы инвесторҙарҙы йәлеп иткән тармаҡҡа әүерелде. Хәҙерге ваҡытта төбәктә дөйөм суммаһы 110 миллиард һумлыҡ 60-тан ашыу инвестиция проекты уңышлы тормошҡа ашырыла, - тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Максим Забелин. - Әйткәндәй, Башҡортостанда ауыл хужалығы техникаһын яңыртыуға баҫым яһала. Быйыл ғына аграрийҙарыбыҙ 2 меңдән ашыу берәмек ошондай техника һатып алған".

# СТУДЕНТТАР ӨСӨН...

**Өфөлә донъя кимәлендәге Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусының беренсе сиратын 2023 йылға тапшырырға тейештәр. Был хаҡта кусмә кәңәшмәлә республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров белдерҙе.**

Вуз-ара студенттар кампусын булдырыу буйынса саралар планының беренсе сираты элекке IQ -парк бинаһын реконструкциялауҙы күҙ уңында тота. Әле объектта инженер системаларының бер өлөшө ремонтланған, яңы йылытыу, елләтеү, төтөндән таҙартыу системалары эшләнгән. Яңы стеналарҙы бууу һәм тәҙәү буйынса эштәр башҡарылған, фасадтар алмаштырылған. Бина йылытыу миҙгеленә әҙер. Етмәгән инженер системаларын, электр утын йүнәтеү һәм биҙәү эштәре ҡалған.

"Киләһе йылдың аҙағына тиклем бинаны реконструкциялауҙың беренсе этабын тамамлап, файҙаланыуға тапшырырға кәрәк. Был мөһим проект, ул хәҙер беҙҙең өсөн оло әһәмиәткә эйә. Уның барлыҡҡа килеүе Башҡортостанда белем биреүҙә яңы кимәлгә күтәрергә мөмкинлек бирергә тейеш", - тине Андрей Назаров.

# ХӘЙБУЛЛАНЫ СҮП БАҪА

**Россельхознадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы белгестәре Хәйбулла районының өс баҫыуында хәүефле сүп үләне - үрмәле әсе үлән (горчак ползучий) тапҡан.**

Шуға бәйле ауыл биләмәләренә мотлаҡ үтәлергә тейешле талаптарҙы боҙмаҫҡа ҡушылған иҫкәрмәләр таратылған. Надзор ведомствоһында аңлатыуҙарынса, сүп үләне тамырҙары аша ағыулы матдәләр бүлеп сығара һәм башҡа үҫемлектәргә, шул иҫәптән культуралы үҫемлектәргә зыян килтерә, уларҙы йәйләп юҡҡа сығара. Бынан тыш, өлгөргән үҫемлектә әсе һәм ағыулы матдәләр бар, уны хайуандар ашаһа ауырый, һыйыр һөтөнөң сифаты төшә. "Әсе үлән менән зарарланған территория асыҡланғанда ауыл хужалығы предприятиеһы иген һәм башҡа ауыл хужалығы продукцияһы менән сүп үләне сығанаҡтары бөтөрөлгәнгә һәм карантин йәбылғанға тиклем иркеле алыш-биреш итә алмай", - тип аңлата белгестәр. Үрмәле әсе үлән менән көрәшеү бер нисә сәбәп буйынса бик ҡатмарлы. Мәҫәлән, зарарлы баҫыуҙарҙы культивациялап булмай, сөнки сүп үләненең тамырҙары ҡыҙҡыла һәм уның артабан үрсеүенә, сығанаҡтан ситкә сығыуына килтерә. Һөҙөмтәлә бер сығанаҡ урынына бер нисә хәүефле урын барлыҡҡа килә. Бары тик йыл һайын алып барылған көрәш кенә уның киң территорияға таралыуына юл ҡуймаясаҡ. Россельхознадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы Хәйбулла районында фитосанитар зона карантинын һәм карантин режимын индерҙе.

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Ноябрҙә "Беҙ - Рәсәй" федераль программаһы сиктәрендә Башҡортостандың һәм Ҡалмыҡстандың танылған милли коллективтарының гастролдәре ойоштороласаҡ. Был хаҡта республика Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. 9-26 ноябрҙә Башҡортостан Республикаһының Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле - Сарапул, Можга, Воткинск, Әшә, Ҡытаутамаҡ, Йүрүҙән, Һатҡы, Эҫем ҡалаларында; 4-5 декабрҙә Пензала һәм Саранскиҙа сығыш яһай. Коллектив "Рәсәй халыҡтары бейеүҙәре" концерт программаһын тәҡдим итә. Директоры - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Нәзир Байегетов.

✓Ноябрҙең өсөнсө декадаһында Башҡортостандың барлыҡ райондарында ҡар ятыуы көтөлә. Үтеп барған аҙнала республикаға йылы фронт килде. 9-14 ноябрҙә көндөҙ +3 градус була. 15-енән һалҡынайта башлай, әммә 20 ноябргә тиклем көндәрҙең яуым-төшөмһеҙ, башлыса ҡояшлы тороуы көтөлә. Айҙың өсөнсө аҙнаһында - 21-25 ноябрҙә күп итеп ҡар яуыуы ихтимал. Көндөҙ иһә -3, -7 градус.

✓Айҙар Рафаил улы Бәҙретдинов Өфө ҡалаһы хакимиәтенең эштәр идарасыһы итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем, 2019 йылдың октябренән ул Дим районы хакимиәте башлығы вазифаһында эшләгән. Элекке йылдарҙа Айҙар Бәҙретдинов ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм төҙөлөш идаралығына етәкселек итте.

✓Өфөлә "Башавтотранс" хеҙмәтләндергән популяр ҡала яңы маршруттарының теҙмәһе үҙгәрә. Дәүләт предприятиеһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 7 ноябрҙән 108-се "Үҙәк" сауҙа комплексы - Ушаков" маршрутында автобус хәрәкәтенең теҙмәһе үҙгәрә, ә 8 ноябрҙән 112-се "Үҙәк" сауҙа комплексы - Миловка" һәм 126к-сы "Ҡала мәҙәниәт һарайы - Зубов Life-2" маршруттары икенсе эш графигына күсә. Автобустар хәрәкәтенең яңыртылған теҙмәһе менән "Башавтотранс" сайтында танышырға мөмкин.

✓Рәсәйҙең "ИрАэро" авиакомпанияһы Өфөнән Төркиәнең ҙур иҡтисади, тарихи һәм мәҙәни үҙәге булған Истанбул ҡалаһына тура даими рейстар асты. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, осоштар 6 ноябрҙән аҙна һайын йәкшәмбе көндәрендә Sukhoi Superjet 100 самолеттарында башҡарыла. Осошҡа 4 сәғәт 35 минут ваҡыт китә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ Ғәҙәттәгесә, техниканың ҡышҡы шарттарҙа эшләүгә әҙерлеге тикшерелгән. Уның барышында асыҡланған етешһеҙлектәр ваҡытында бөтөрөлгән. Техника урамдарға тәүлек режимына һәм эш графигына ярашлы сығарыла.



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАШ ҠАЛАНЫҢ...

## матур биҙәктәре

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев БР Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә сығыш яһап, быйыл Өфөлә 12 йәмәғәт киңлеге төҙөкләндерелеүе тураһында белдерҙе.**

Аныҡлап әйткәндә, Ҡала көнөндә йырлы-төҫлө фонтанлы "Ҡашҡаҙан" паркы асылды. Совет майҙаны һәм уның тирә-яғы төҙөкләндерелеп, унда генерал-майор Миңлеғәли Шайморатовҡа һәйкәл урын алды. Октябрь проспектын урман зонаһы менән тоташтырған Дан бульвары аллеяһы тулыһынса төҙөкләндерелгән. Уның үҙәк өлөшөндә юл ҡатламы алмаштырылған, яҡтылыҡ сығанаҡтары ҡоролған, уйын майҙандары йыһазландырылған, территория йәшелләндерелгән. Мушников урамына һәм Теплое күленә тоташҡан биләмәлә төҙөкләндереүҙең беренсе этабы тамамлана. Икенсе этап киләһе йылға планлаштырылған.

Ә 3 ноябрҙә реконструкциянан һуң Дим паркы асылған. Бында яңы балалар майҙансыҡтары, физкультура-һауыҡтырыу зонаһы, скейт-парк, урам китапханалары, өҫтәл уйындары урындары һәм арт-күргәҙмәләр киңлеге барлыҡҡа килгән. Парктың үҙәк өлөшө лә яңыртылған, унда төрлө саралар уҙғарыу майҙаны һәм сәхнә урын алған. Үҙгәртеп төҙөүҙең дөйөм хаҡы 200 миллион һумға барып баҫа. Яңыртылған паркта шулай уҡ сауҙа павильондары, кафе һәм аттракциондар өсөн урындар әҙерләнгән. Әйткәндәй, асылғандан һуң Республика Башлығы Радий Хәбиров парк менән танышып, халыҡ менән аралашты. Граждандар Дим районына яңы поликлиника кәрәклеген дә белдерҙе. Радий Фәрит улы хәбәр итеүенсә, медучреждение төҙөлөшө 2025 йылға планлаштырылған.

"Нефтехимиктар" паркын төҙөкләндереү дауам итә: бында велосипед юлы, спорт һәм балалар майҙансыҡтары, эттәрҙе йөрөтөү урыны бар ҙа инде. Әлеге ваҡытта тротуар плиткаһы һалына, инженер селтәрҙәре монтажлана, бәләкәй архитектура формалары урынлаштырыла.

Затонда бәләкәй күле таҙартылған "Тулҡын" паркы икенсе һулышын ала. Шулай уҡ бында периметр буйынса таҡта түшәлә. Достоевский урамы яғынан Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы корпустары урынлашҡан "Медицина аллеяһы" булдырыуҙың беренсе этабы тамамланған. "Мөғин Нагаев исемендәге гвардиялы" скверын эшләгәндә, Амантай урамы буйынса яҡын урынлашҡан йорттар яғында балалар майҙансығы барлыҡҡа килгән. Даян Мурзин исемендәге сквер төҙөкләндерелеп, "Ҡара генерал"ға һәйкәл ҡуйылған.

Орджоникидзе һәм Октябрь райондарында баш ҡаланы урап сыҡҡан "Өфө муйынсағы"нда велосипедсылар, йәйәүлеләр өсөн маршрут участкалары эшләнгән. 3 ноябрҙә иһә "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" монументаль комплексы асылды.

# ДИМ РАЙОНЫНЫҢ...

## йөрәге был парк

**Республика Башлығы Радий Хәбиров, Өфө ҡала Советы рәйесе Марат Вәсимов, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Дим районындағы яңыртылған парк менән танышып, халыҡ менән аралашты. Был объект Өфө ҡалғаһе төҙөлөүҙең 450 йыллығына бағышлана.**

- Бынан бер йыл элек социаль селтәрҙәрҙә баш ҡалала ниндәй парктарҙы тәү сиратта төҙөкләндереү кәрәклеген асыҡлау өсөн тауыш биреү башлағайным, унда Дим районының үҙәк паркы тауыштар буйынса лидерҙарҙың береһе булды. Вәғәҙә - иман. Бөгөн бында эштәр тамамланды. Һеҙҙе ял өсөн уңайлы, заманса һәм матур урынға эйә булыуығыҙ менән ҡотлайым, - тине Радий Хәбиров.

Башҡортостан Республикаһының Ҡала һәм ауылдарҙы үҫтереү институтының Проект офисы белгестәре, халыҡ фекерен иҫәпкә алып, паркты реконструкциялау проектын эшләгән. Кәрәкле процедуралар үткәреп, подрядсы асыҡланғас, быйыл яҙғыһын эш башланған.

Хәҙер паркты танырлыҡ түгел, ул заман талаптарына яуап бирә. Тигеҙ, тротуар плиткаһы һалынған уңайлы юлдар барлыҡҡа килгән. Фонарҙар һәм гирляндалар кис етеү менән паркты яҡтылыҡҡа күмә. Ял итеү һәм йәйәү йөрөү өсөн эскәмйәләр һәм һуҡмаҡтар артҡан. Балалар өсөн махсус ҡатлам түшәлгән заманса сағыу уйын майҙансыҡтары йыһазландырылған. Паркта һәр кем үҙен иркен тойһон өсөн ҡаршылыҡһыҙ мөхит булдырылған. Видеокүҙәтеү ҡуйылған.



Парктың үҙәк өлөшөн яңы сәхнә биҙәй. Киң күләмле мәҙәни саралар ойоштороуҙы күҙаллап, майҙансыҡ йыһазландырылған. Үҫмерҙәр өсөн скейт-парк бар һәм төрлө заманса бәләкәй архитектура формалары урынлаштырылған. Бындағы йәшел зона һаҡланған, шул уҡ ваҡытта ағастарға етди санитар тикшереү үткәрелгән, ҡарт ағастар ҡырҡылған. Был саралар парк биләмәһен һөҙөмтәле файҙаланыу мөмкинлеге бирә, ә ҡырҡылған ағастар урынына яңылары, ҡыуаҡтар һәм күп йыллыҡ сәскәләр ултыртылған. Яңыртылған паркта шулай уҡ сауҙа павильондары, прокат һәм башҡа хеҙмәттәр өсөн урындар әҙерләнгән, аттракциондар өсөн айырым зона бар. Ҡышын бында боҙ ҡаласығы урын аласаҡ, ә яҙғы-йәйге осорҙа мәҙәни сараларға күберәк иғтибар биреләсәк. Киң ҡоласлы яңыртыу эштәренән һуң Дим паркын райондың йөрәге тиергә мөмкин һәм уның ошо хәҙерге матурлығында һаҡлау зарур.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЯТЫП ҠАЛҒАНСЫ...

## атып ҡал!

**Баш ҡалала әлегә ҡар ятмаһа ла, республиканың ҡайһы бер райондарында ҡапыл көслө ҡар яуып, тиҙҙән ҡарлы-буранлы ҡыш яҡынлашыуын иҫкәртте. Тәбиғәттең ҡылығын белеп булмай, шуға махсус техниканың һәр саҡ алғы сафта тороуы мөһим. Ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә лә төп темаларҙың береһе булараҡ, коммуналь техниканың ҡышҡы миҙгелгә әҙерлеге буйынса отчет тыңланды.**

Баш ҡаланың Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, бөгөн барлығы 574 берәмек коммуналь техника иҫәпләнә, шуларҙың 461-е көҙгө-ҡышҡы осорҙа файҙаланыла. Быйыл республика һәм ҡала бюджеты иҫәбенә 88 берәмек техника алынған. 24-26 октябрҙә, ғәҙәттәгесә, техниканың ҡышҡы шарттарҙа эшләүгә әҙерлеге тикшерелгән. Уның барышында асыҡланған етешһеҙлектәр ваҡытында бөтөрөлгән. Техника урамдарға тәүлек режимына һәм эш графигына ярашлы сығарыла. Ҡар күп яуғанда график үҙгәртелә һәм өҫтәмә бригадалар йәлеп ителә, ремонт төркөмө тәүлек әйләнәһенә эшләүгә күсә. Ҡала территорияһында 12 ҡар полигоны бар һәм улар ҡар ҡабул итеүгә әҙер. Өҫтәмә рәүештә тағы ла 10 полигон ойоштороу мәсьәләһе ҡарала. Бынан тыш, Калинин районы территорияһында ҡар иретеү пункты эшләй. Ул тәүлегенә 1500 кубометр ҡар иретеүгә һәләтле. Тағы бер пунктты Совет районында төҙөү күҙаллана. Ҡар күп булғанда транспорт туҡталыштары ла даими таҙартып тороуға мохтаж. Сығыш яһаусы һүҙҙәренә ҡарағанда, бөгөн көҙгө-ҡышҡы миҙгелгә әҙерлек эштәре тулыһынса тамамланған. Ә уның сифатын инде тәбиғәт үҙе баһалар...

Көнкүреш хәстәрҙәре кеүек үк, быйыл сығарылыш синыфтарында уҡыусыларҙың киләсәген хәстәрләү ҙә мөһим бурыс. Хәҙерге йәштәрҙең ҡайһы берҙәре күптән инде буласаҡ һөнәрен һайлаһа ла, бәғзеләр бер нисә һөнәр араһынан тап үҙенеке булғанын ғына нисек һайлап алырға белмәй. Серго Орджоникидзе исемендәге Мәҙәниәт һарайында үткән асыҡ ишектәр көнө уларҙың икеләнеүҙәрен юҡҡа сығарғандыр, моғайын, сөнки бында баш ҡаланың барлыҡ вуздары ҡатнашып, презентацион майҙандарҙа үҙенсәлектәре һәм белем биреү йүнәлештәре менән таныштырҙы. Ул ғына ла түгел, һуңынан вуз вәкилдәре менән күҙгә-күҙ ҡарап аралашыу булды. Үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙар биреүсе уҡыусыларға бүләктәр ҙә тапшырылды. Әйткәндәй, "Бәйләнештә" социаль селтәрендә абитуриенттар өсөн #внашВузАйдаУфа хештегы менән берҙәм платформа асылған. Унда ла республика вуздары аҙнаһына бер тапҡыр төркөм ҡатнашыусыларын үҙҙәренең уҡыу йорттары менән таныштыра, төрлө конкурстар уҙғара, һорауҙарға яуап бирә. Бары тик төркөмгә инеп, ҡатнашыу ғына кәрәк, ятып ҡалғансы, атып ҡалыу хәйерле.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Быуындар һыҙлаһа

❖ 10 бөртөк анальгин төймәһен ыуаларға, 1 һауыт йод, 1 һауыт кастор майы, 300-400 мл араҡыны бергә ҡушып бутарға. 14 көндән ашыу ваҡытҡа төнәтергә ҡуйырға, шул арала болғатып торорға. Әҙер сараны һыҙлаған быуындарға ыуып, төрөнөргә.

❖ 300 мл араҡы, 1 һауыт (10 мл) камфара спирты, 10 төймә ваҡланған анальгин, 1 һауыт (10 мл) йодты бергә ҡушырға. Ҡараңғы урында 21 көн төнәтергә. Һирәк-һаяҡ болғатып торорға. Был дауаны һыҙлаған быуындарға һөртмәйбеҙ һәм ыуаламайбыҙ. Ә аҙ ғына итеп уҫка тамыҙып, быға тиклем массаж яһалған аяҡтарҙы табандан алып сылатып сығырға. Был рәүешле 2-3 көн дауаланғас, туҡтап торорға. Шулай хәл яҡшырғансы эшләргә.

### Иммунитет

❖ 150-200 грамм тирәһе имбир тамыры, 4-5 лимон, 0,5 стакан бал (бал әҙерәк булһа ла ярай) кәрәк. Имбир тамырын ваҡ ҡырғыстан үткәрергә, лимонды әрсергә һәм ит турағыста ваҡларға йәки ҙур булмаған киҫәктәргә ҡырҡырға. Лимон һәм имбирҙе ҡушырға, бал өҫтәргә. Әҙерләмәне һыуытҡыста һаҡларға. Көнөнә 1 балғалаҡ үҙен генә ашарға йәки сәйгә ҡушып эсергә.

❖ Стаканға 50 мл ҡыҙыл көртмәле һутын ҡойорға һәм тултырғансы йылы һыу өҫтәргә. Теләһәгеҙ, шәкәр йәки бал ҡушырға мөмкин. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашағандан һуң яртышар стакан эсергә. Шулай уҡ ҡыҙыл көртмәленең киптерелгән йәки яңы йыйылған 1 балғалаҡ емешен сәйгә һалып та эсергә була.

### Эсәктәр

❖ Эсәктәр елһенеүен (воспаление кишечника) ябай, әммә файҙалы ысул менән дауаларға мөмкин. Өс көн дауамында тик яңы ҡыярҙар менән туҡланырға. Йәки 1 стакан ҡыяр һуты әҙерләп, иртәнсәк (сәғәт 8 тирәһендә) эсергә. Шунан көн дауамында ике сәғәт һайын 1-әр стакан алма һуты эсергә. Был дауа эсәктәр шешенеүен дауалауға ла, үт ҡыуығындағы таштарҙы сығарыуға ла булышлыҡ итә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

***✓ "Ҡаһым түрә" операһында башҡорт сардары Ҡаһым түрә рус армияһы офицеры кейемендә йөрөй. Был тарихи дөрөҫлөккә тап килеп етмәй. Сөнки элек башҡорт етәкселәренең үҙенсәлекле кейеме, униформаһы булған.***

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Ҡайһы бер төбәктәрҙә, бигерәк тә таулы Башҡортостанда, ҡашыҡтар эшләү килемле генә түгел, юғары художестволы кәсепкә әүерелгән. Ҡашыҡтар башы һәм дөйөм формаһы буйынса айырылған. Тура тотҡаһына тура мөйөш яһап урынлаштырылған осло мөйөшлө япраҡҡа оҡшаш башы бер яҡ ситкә ҡойорға уңайлы итеп яһалған ҡашыҡ үҙенсәлекле. Бөтә өлөштәре лә бер-береһенә перпендикуляр урынлашҡан икенсе төрлө бер ҡалаҡтың башы оҙонса түңәрәк рәүешендә (12,5x7,5 см) булып, тотҡаһынан ике яҡҡа һуҙыбыраҡ эшләнгән. Шулай уҡ йомро (диаметры 20 сантиметрға еткән) йәки тамсы рәүешендәге ҡашыҡтар ҙа булған. Һаптары төрлөсә һырланған: сығынтылы, ырғаҡлы, бөгөлөп киткән һ.б. Урындағы ғәҙәттәр генә түгел, оҫтаның үҙенсәлекле ҡарашы ла сағылған был эштәрҙә.



*Ағас ҡашыҡтар.*
*БР ММ фондынан.*
*Рәссамы И.Ф. Кибальник*

Ҡайһы бер хужалыҡ кәрәк-яраҡтары ағас материалдарҙың ҡалдыҡтарынан - нәҙек ботаҡтар, ҡабыҡ, ҡайырынан эшләнгән.

Башҡортостандың көньяҡ районларында һурпанан ит һәм һалма һөҙөп алыу өсөн үреп яһалған ҡалаҡтар киң таралған. Ғәҙәттә, уларҙы ҡабыҡтарынан таҙартылған ике йәки дүрт балан, йә муйыл сыбыҡтарын ярым түңәрәк рәүешендә бөгөп, үргәндәр һәм остарын бергә ҡушып тотҡа хасил итеп эшләгәндәр. "Сулпы", "һалмағыс" тип йөрөтөлгән бындай әйберҙәрҙе Хәйбулла, Йылайыр, Ейәнсура, Күгәрсен районларында осраттыҡ. 1906 йылда С.И. Руденко Бөрйән районы Мәндәғол ауылында ике муйыл һөҙгөсө һатып алған.



*Муйылдан үрелгән һөҙгөстәр. РЭМ фондынан. XX быуат башы*

Шул яҡтарҙа ҡыл иләк - ат ҡылынан эшләнгән иләктәр ҡулланғандар. Ат ҡылын тирәскә ҙур булмаған өсмөйөш тештәрҙән торған орнаментты хасил итерлек итеп төрлө кимәлдә нығытҡандар. Һалабаш селтәрле ҡабыҡ иләктәрҙе биҙәгәндә лә ҡайһы саҡта шул ысулды ҡулланғандар. Талсыбыҡтан эшләнгән ҡайһы бер әйберҙәр күҙҙең яуын алып торған: төрлө формалағы кәрзиндәр, бәләкәй һандыҡтар, кәшүлдәр һ.б.

Ҡайһы бер боронғо әйберҙәр бөгөн дә ауыл көнкүрешен йәмләндереп, һаҡланып килә. Хужалыҡта ағас тәпәндәр, ялғаштар һәм башҡа һауыт-һаба ҡулланыла.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**
**(Аҙағы).**

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

**Борон төрлө һуғыштарҙа, алыҫ походтар ваҡытында башҡорт ғәскәрҙәре менән абруйлы ил азаматтары - тархан, старшиналар, кантон башлыҡтары етәкселек итер булған. Мәҫәлән, 1756-1763 йылдарҙағы Ете йыллыҡ (Рәсәй менән Пруссия араһында) һуғыш ваҡытында башҡорт ғәскәре менән атаҡлы башҡорт тарханы, баш старшина Ҡыҙрас Муллаҡаев командалыҡ итә. 1772 йылда Польшаға походҡа барған өс меңлек башҡорт ғәскәренең башында Ҡыр-Танып улысы башҡорт старшинаһы Ҡолой Балтасов була. Уны һуңынан оҙаҡ ҡына ваҡыт "главный начальник", тип йөрөткәндәр. Әйткәндәй, башҡорттар үҙҙәренең абруйлы етәкселәрен, сардарҙарҙы түрә тип йөрөтөр булған. Мәҫәлән, 1812 йылғы Ватан һуғышында йөҙбашы булған Ҡасим Мырҙашев бөтәбеҙгә лә Ҡаһым түрә буларак билдәле.**

# XIX БЫУАТТАҒЫ...

## башҡорт түрәләре кейеме

Бына ошо башҡорт түрәләре (сардарҙары) ниндәй кейем кейгән һуң? Беҙ уларҙы бөгөн ниндәй ҡиәфәттә күҙ алдына баҫтырабыҙ? Мәҫәлән, "Ҡаһым түрә" операһында башҡорт сардары Ҡаһым түрә рус армияһы офицеры кейемендә йөрөй. Был тарихи дөрөҫлөккә тап килеп етмәй. Сөнки элек башҡорт етәкселәренең үҙенсәлекле кейеме, хәҙергесә әйткәндә, униформаһы булған. Бына ошо хаҡта XIX быуаттағы картина, һүрәттәр асыҡ һөйләй. Мәҫәлән, XIX быуатта төшөрөлгән һүрәттәге кантон башлығының кейгән кейеменә иғтибар итегеҙ **(1-се һүрәтте ҡарағыҙ)**. Был һүрәттә, тәү сиратта, башҡорт түрәһе кейгән осло башлы, ситтәре ике яҡҡа айырылып торған ҡыҙыл төҫтәге баш кейеме иғтибарҙы йәлеп итә. Уның исеме ҡалпаҡ тип атала. Беҙ ҡалпаҡты, ғәҙәттә, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙҙарҙың милли баш кейеме тип атап өйрәнгәнбеҙ. Шуға күрә, тәү ҡараште, башҡорт милли кейеме өсөн ҡалпаҡ сәйер күренә. Әммә ҡалпаҡ ул башҡорт халҡының боронғо баш кейемдәренең береһе. Башҡорт милли кейемен өйрәнеүсе ғалимә С.Н. Шитова яҙыуынса, башҡорттарҙа ҡалпаҡтың төрлө варианттары булған. Уны туланан (йөндән һуғып, кейеҙләп баҫҡан туҡыма) эшләгәндәр, түрәләр кейгәне ҡыҙыл йәки йәшел бәрхәттән тегелгән[1].



1

Башҡорт түрәләре кейгән кейемдең тағы бер айырмалы билдәһе - ул күк төҫтәге сәкмән. Шулай уҡ XIX быуатта эшләнгән статуэткала башҡорт түрәһен күк сәкмәндә күрәбеҙ **(2-се һүрәтте ҡарағыҙ)**. Күк төҫтө башҡорттар боронборондан үҙҙәренең кейемендә ҡулланған. Ул төрки халыҡтарының төҫө һанала. XIX быуаттың икенсе яртыһында эшләнгән статуэткалағы башҡортто ҡыҙыл ҡалпаҡ менән күк сәкмәндә күрәбеҙ.

XIX быуаттың башында төшөрөлгән рәсемдә лә **(3-сө һүрәтте ҡарағыҙ)** башҡорт түрәһе стандарт кейемдә, йәғни осло ҡалпаҡ менән сәкмән кейгән. Билдәле рәссам Ф.Рубоның "Башҡорттарҙың император Александр II алдында ыласындар менән һунар итеүе" тип исемләнгән картинаһында **(4-се һүрәт)** шулай уҡ ҡалпаҡ менән сәкмән кейгән башҡортто күрәбеҙ. Өҫтәп тағы шуны әйтергә була: 1829 йылда Башҡорт ғәскәре өсөн индергән берҙәм униформала ла ҡалпаҡты күрәбеҙ **(5-се һүрәтте ҡарағыҙ)**. Тимәк, ҡалпаҡ башҡорт хәрби кейеменең бер элементы булған[2].

Шулай итеп, борон башҡорт етәкселәре - кантон башлыҡтары, старшиналар, сардарҙар йәй көндәрендә төлкө бүрек түгел, ә ҡыҙыл йәки йәшел ҡалпаҡ менән күк сәкмән кейгән булып сыға. Ошоноң менән улар ябай халыҡтан айырылып торған. Ошоно иҫбатлаусы тағы бер һүрәт, дөрөҫөрәге, XIX быуаттың икенсе яртыһында төшөрөлгән фотола **(6-сы һүрәт)** арҙаҡлы башҡорт мәғрифәтсеһе, ғалимы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың бер туған ағаһы, 27-се башҡорт кантонының башлығы Фәхретдин Өмөтбаев һүрәтләнгән. Күреүебеҙсә, ул да башҡорт түрәһенә хас кейемдә.

Әйткәндәй, борон башҡорт түрәләре кейгән үҙенсәлекле баш кейеме - осло башлы ҡыҙыл ҡалпаҡтарҙың ҡайһы берҙәре бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланған. Мәҫәлән, уларҙың береһе Башҡортостан Республикаһы Милли музейы фондында һаҡлана **(7-се фотоны ҡарағыҙ).** "Они зарегистрированы как шапки башкирских старшин (**дөрөҫөрәге кантон башлыҡтары - А.Я.**), стоявших в XVIII - первой трети XIX в. во главе небольшой административной единицы - кантона; позже они утвердились в костюме волостных правителей", - тип яҙа С.Н. Шитова.

1912 йылда Ватан һуғышының 100 йыллығын билдәләү айҡанлы Ырымбур ҡалаһында Ырымбур губернаһы губернаторы тантана үткәрә. Бында Ырымбур өйәҙенән башҡорт халҡы вәкилдәре ҡатнаша. Улар тарихи байрамға боронғо ата-балалары кейгән елән һәм ҡалпаҡтар кейеп бара. Башҡорт ир-уҙамандары Ырымбур ҡалаһында ошо бик тә ҡиммәтле ҡомартҡылар менән фотоға төшә **(8-се фотоһүрәт)**.

Һүҙҙе йомғаҡлап, шуны әйтергә була: башҡорт хәрби кейеменең тарихы тейешенсә өйрәнелмәү сәбәпле, сәхнәлә һәм дә һынлы сәнғәттә башҡорт яугирҙарының, сардарҙарының бер яҡлы, тарихи дөрөҫлөккә бигүк тап килеп етмәгән образы тыуҙырыла. Ҡалпаҡ төлкө бүрек менән бер рәттән сәхнәлә, милли бейеүҙәрҙә йышыраҡ ҡулланылһа ине. Башҡорт халҡының тарихы кеүек үк, уның милли кейеме лә төрлө һәм бай. Боронғо һүрәттәр тап ошо хаҡта һөйләй.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһы Милли архивының бүлек етәксеһе.**

**РЕДАКЦИЯНАН: Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Башҡорт халыҡ кейеме" каталогын әҙерләү" проекты мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә дөйөм милли әһәмиәткә эйә ижади проекттар өсөн Рәсәй Федерацияһы Президенты грантын отто. Проекттың төп маҡсаты - башҡорт халҡының үҙенсәлекле байрам, көндәлек һәм башҡа тәғәйенләнештәге кейем өлгөләре каталогын әҙерләү. Был мәҡәлә "Башҡорт халыҡ кейеме" милли кейемдәре каталогын әҙерләү" проектын ғәмәлгә ашырыу сиктәрендә баҫыла.**



2



3



4



5



6



7



8

[1] *Шитова С.Н. Башкирская народная одежда. - Уфа: Китап, 1995. - 201-се бит.*

[2] *Воинская слава башкирского народа. Автор-составитель Ярмуллин А.Ш. - Уфа: ДизайнПолиграфСервис, 2007. - С. 27.*

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Икенсе бүлек. Бронза быуаты.



Икенсе бер факт та шулай уҡ бик ҡыҙыҡлы. Һынташты ҡәберлеген ҡаҙыған саҡта кәбергә үлгән кешенең мәйете түгел, ә йомшаҡ матдәләренән, кимерсәктәре һәм тарамыштарынан таҙартылған һөйәктәре һалыныуы теркәлгән, һәм был бәхәсһеҙ факт. Ҡайһы берҙә һөйәктәрҙән, ыҡсым ғына итеп, оҙонсараҡ формалағы өйөм яһалған, баш һөйәге айырым ҡуйылған. Был ер шарында мәйеттәрҙе урынлаштырыуҙың иң боронғо, универсаль формаһы булып тора: мәйеттәр юғарыраҡ урындарға (махсус эшләнгән баҫма-һәндерәләр, ағастар, тау түбәләре) илтеп һалынған, уларҙы ҡоштар, йәнлектәр йә иһә сысҡандар соҡоп-кимереп, йомшаҡ иттәренән таҙартып бөткәс, һөйәктәре генә ерләнгән. Андроновсыларҙан һуң мең йыл ваҡыт үтеп киткәс тә Иран, Урта Азия халыҡтары ла ошондай йоланы ҡулланған. Ошондай ерләү йолаһы, бер ниндәй үҙгәрешһеҙ тип әйтерлек, XX быуат башына тиклем тываларҙа, Себер тайғаһы зонаһында йәшәгән халыҡтарҙа һаҡланып ҡала.

Фольклор материалдарына ҡарағанда, был йола башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларына ла билдәле булған. Мәсәләп, башҡорт риүәйәттәрендә үлгән кешене ер өҫтөндә ҡалдырыу менән бәйле сюжеттар йыш осрай: мәйеттең баш һөйәге ерҙә ҡалдырылыу йә иһә уның һөлдәһен (һөйәктәрен) йыуыу күренештәре; мәйетте йә иһә уның һөлдәһен ағастарға, бағаналарға элеп ҡуйыу һ.б. Башҡорттарҙың иң боронғо бабаларының йыш ҡына мәйеттәрҙе түгел, ә уның һөйәктәрен генә ерләүе хаҡындағы халыҡ хәтере ерләү йолаһында ҡатнашыусыларҙы "һөйәккә килеүселәр", тип нарыҡлау аша әлеге көнгә тиклем һаҡланып ҡалған (Мәйетте кәфенләр алдынан уны йыуыу йолаһын үтәүселәрҙе "һөйәгенә инеүселәр", тип тә атайҙар. - **Тәрж. иҫк.**)

Әле күптән түгел генә ҡаҙаҡтарҙа һәм, билдәле булыуынса, башҡа байтаҡ халыҡтарҙа ошо ритуалды үтәүселәр ошолай аталып йөрөтөлгән. Ҡомарткылар материалдарынан күренеүенсә, был ҡатмарлы йола андронов ҡәбиләләренә лә билдәле булған. Мәйеттәрҙе ер өҫтөндә ҡалдырыу йолаһы нигеҙендә боронғоларҙың йәндең үлемһеҙ булыуы һәм, кеше үлгәс, уның игелекле йә иһә яуыз батшалыҡтар биләмәләренә эләгеү мөмкинлеге хаҡындағы дини инаныстары ята. Күк йөҙөндәге Ҡояш аллаһы иң изге һәм баш илаһ, тип һаналғанлыҡтан, барыһы ла үлгән кеше йәненең тап шул батшалыҡҡа эләгеүен теләй, һәм быға ҡоштар ярҙамында өлгәшеп булыуына ышана. Улар шулай уҡ үлгәндәрҙең йәндәре ямғыр тамсылары булып, йә иһә ел менән ергә кире ҡайта, төрлө тереклек формаһына инә (үҫемлек, йәнлек һ.б.), әсә ҡарынына эләгеп, яңынан тормош башлай ала, тип уйлай. Боронғо халыҡтар ерҙә тормоштоң барлыҡҡа килеүен һәм үҫеүен ошо рәүешле күҙ алдына килтергән, һәм ошо тормош әйләнешендә кеше йәндәрен күсереүсе ҡоштарҙың үҙҙәре өсөн үтә мөһим булыуына ышанған. Шуға күрә, сығанаҡтарға ярашлы, улар мәйеткә иң тәүҙә ҡош осоп килеп, соҡой башлауын күреү менән бик шатланғандар, әгәр башҡа бер йәнлек килһә, артыҡ ҡыуаныс булмаған; ҡош та осоп килмәйенсә, бер йәнлек тә яҡынлашмайынса, сысҡан-фәлән йөрөй башлаһа, был кимереүсенең мәйеткә тейеүе менән үлгән кешенең йәне яман ен-бәрейҙәр төйәге булған ер аҫты донъяһына алып кителеүен белдергән. Мәйет ҡуйылған урынға ҡоштар осоп килеүен көҫәүсе боронғо ата-бабаларыбыҙ, фольклор сюжеттарына ярашлы, уларҙы ошонда ылыҡтырыр өсөн ашлыҡ ҡалдырған. Күрәһең, байтаҡ ҡына башҡорт риүәйәттәрендәге үлгән кешенең мәйете янына тоҡҡа тултырылған ашлыҡ ҡуйыу менән бәйле сюжеттар ошондай уҡ мәғәнәгә эйә булған (Архаик замандарҙан хәҙергәсә һаҡланып ҡалған боронғо йола - "Ҡарға бутҡаһы" байрамы ла, күрәһең, ҡышын үлеп ҡалған кешеләрҙең мәйеттәре ҡуйылған һәндерәләргә ҡарғаларҙы, башҡа бер ҡоштарҙы ылыҡтырыу маҡсатында барлыҡҡа килгәндер. Йорт тирәһендә ҡапылдан ҡоҙғон-фәлән ҡысҡырһа, башҡорттар уны кемдендер үлемен теләй, тип хәүефләнә башлай. - **Тәрж. иҫк.**) Башҡортостан территорияһында йәшәүсе мариҙарҙың үлгән кешенең башы яғына осона ҡош фигураһы тағылған (ул башҡа ҡоштарҙы ылыҡтырыу ролен үтәгән) оҙон ҡолғалар ҡуйыуы ошо уҡ күренештең үҙенсәлекле ҡайтауаҙы булып тора.



*Ун беренсе һүрәт. Һуғыш арбаһы (колесница) һәм уның ҡәберҙәге торошо реконструкцияһы. Һынташты ҡәберлеге*

**Нияз МӘЖИТОВ. Әлфиә СОЛТАНОВА. Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ

# ҺӘР МИЛЛӘТТӘШ УҠЫҺЫН!



**Ошо көндәрҙә үҙенең 20 йыллыҡ юбилейын билдәләгән "Киске Өфө" гәзитен йыл һайын алдырабыҙ. Уның һәр һанын түҙемһеҙлек менән көтөп алабыҙ, тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Ул күптән инде беҙҙең ғаилә гәзитенә әйләнгән.**

Баҫма нимәһе менән күңелгә яҡын? Иң беренсе, уның биҙәлеше күҙгә салына. Һәр рубриканың үҙ урыны, үҙ майҙаны бар. Мин үҙем гәзитте ҡулға алғас та, тәү сиратта, республика яңылыҡтары менән танышып сығам. Яңы ҡанундар, закон проекттары тураһында гәзит һәр кем аңларлыҡ итеп яҙа. Мин педагогия хеҙмәте ветераны булараҡ, билдәле тарихсылар, фекер эйәләре, философик ҡарашлы шәхестәр менән диалогтарҙы, башҡорт теле, мәҙәниәте, тарихына ҡағылышлы материалдарҙы яратып уҡыйым. Халыҡ медицинаһы буйынса мәғлүмәт күп. Милли кейемебеҙгә ҡағылышлы материалдар бик ҡыҙыҡлы. Боронғо Башҡортостан тураһындағы мәҡәләләрҙе лә ҡалдырмай уҡып барам. Ғөмүмән, рубрикалар төрлө йәштәгеләр өсөн ҡыҙыҡлы һәм фәһемле. Йәштәр ҙә уҡыһын ине, милләттәштәребеҙ күпләп алдырһын ине был баҫманы, тигән теләктәмен. "Киске Өфө" үҙ уҡыусыларына мәғлүмәт биреүҙе генә маҡсат итеп ҡуймай. Ул кешене тәрбиәләй, үҫтерә, нисек уңыш ҡаҙанырға юл күрһәтә. Һәр материалдың тәрбиәүи әһәмиәте көслө.

Егерме йыл кеше ғүмере өсөн бик аҙ. Әммә гәзит өсөн ул байтаҡ ваҡыт. Ике тиҫтә йыл эсендә республикала төрлө үҙгәрештәр булды, етәкселәр үҙгәрҙе. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, "Киске Өфө" үҙенең башланғыс идеяһына - милли рух тәрбиәләүгә тоғро ҡалды.

Гәзит юбилейы журналистарҙың ғына байрамы түгел. Был иҫтәлекле дата шулай уҡ уның уҡыусылары өсөн дә ҙур әһәмиәткә эйә. Беҙ, "Киске Өфө" гәзитен уҡыусылар ҙа, баҫма коллективы менән бергә ҡыуанабыҙ һәм киләсәктә лә халҡыбыҙ мәнфәғәтенә тырышып эшләүен теләйбеҙ! Уңыштар юлдаш булһын!

**Рәйфә КАМАЛЕТДИНОВА, педагогия хеҙмәте ветераны. Мәләүез районы Арыҫлан ауылы.**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

Гв. өлкән сержанты, снайпер Арсенюк Александр Николаевич, Днепрҙың уң яҡ ярына беренселәр рәтендә сыға, дошман траншеяһында немец офицерын хәнйәргә ала, ошонда уҡ обер-ефрейтор званиеһындағы һалдатты әсиргә алып, тиҙ арала яңынан йылға аша сыға, әсирҙе полк штабына алып килә. Обер-ефрейтор һорау алғанда уң ярҙағы немецтарҙың көстәре, нығытмалары хаҡында ҡиммәтле мәғлүмәттәр бирә. Ә Арсенюк, ҡабаттан Днепр аша сығып, дошман тылына разведкаға йөрөй, уның оборонаһы хаҡында үтә мөһим мәғлүмәттәр таба. Әммә ул Нивки ауылы янындағы алышта ҡаты яралана. Украина егетенең (ул Одесса өлкәһенең Ананьев районында тыуып үҫкән) батырлығы юғары баһаға лайыҡ була - уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

Гв. лейтенанты Е.Ф. Манаховтың сабельниктар взводы дошман траншеяларына бәреп инә, штыктары һәм хәнйәрҙәре менән немецтарҙың боевой һаҡ подразделениеһын юҡ итә. Днепр ярындағы траншеяла утыҙҙан ашыу дошман һалдаты үҙ үлемен таба, уларҙың бер нисәһе генә ҡасып ҡотола. Беҙҙең яугирҙар яулап алынған плацдармда дошман атакаһына ҡаршы торорға әҙерләнә. Дошмандың ошо тәңгәлдә йылға өҫтөн туранан-тура утҡа тота алмауы беҙҙең ҡалған подразделениеларға Днепр аша сығыу өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра.

Эскадрон командиры А.М. Рудой яр буйына һибелгән десантсыларҙы бергә туплап, уларҙы тейешле позицияларға йүнәлтеү өсөн арткараҡ китә, лейтенант Манаховҡа траншеяла ҡалғандар менән командалыҡ итергә бойора. Полк штабына дошман траншеяларының беҙҙекеләр ҡулына күсеүе хаҡында хәбәр ебәрелә.

Әммә немецтар ҡалдырып киткән позицияларын кире ҡайтарырға тырыша. Траншеялар яр буйындағы ҡалҡыулыҡтан пулемет утына тотола, ә Иҫке Иолча утарынан немецтарҙың артиллерияһы һәм минометтары ла ут аса. Уның артынса дошмандың бер рота һалдаты, совет һалдаттарын ҡайтанан Днепрға табан ҡыҫырыҡлап сығарыу маҡсатында, контратакаға ташлана. Шул арала гв. лейтенанты Манахов дошман ротаһының флангыһына гв. лейтенанты Әбдерәүф Дәүләтов командалығында ике станковый пулемет расчетын сығара, уларҙың мәргән утына ҡушылып, атакаға барыусы дошман рәттәренә фронттан да пулялар яуа башлай. Бындай ҡаршылыҡты көтмәгән немецтар сигенергә мәжбүр була. Шул саҡта дошман хәйләле пландарын ғәмәлгә ашырырға ниәт итә: беҙҙең һалдаттар биләгән позицияларҙан өҫтәрәк, кәмәләргә ултырып, йөҙләгән немец һалдаты йылға буйлап эскадрондың тылына сығырға була. Дошман, берҙән, йылға аша сыға башлаған яугирҙарыбыҙҙы туранан-тура утҡа тотоу мөмкинлеген алыр ине, икенсенән, ҡамауҙа ҡалған 4-се эскадрон һәләкәткә дусар булыр ине. Әммә эскадрон командиры яр буйында пулемет расчетын ҡалдырған була. Уның наводчигы, ҡаҙаҡ егете Искәндәр Садыҡ улы Дауытов, дошман кәмәләре ярға яҡынлашыу менән, уларҙы көслө пулемет уты менән ҡаршылай. Быны һис көтмәгән дошмандың тиҫтәләрсә һалдаты ҡырып һалына, бер нисә кәмәләре, ярға сыға алмайынса, түбәнгәрәк ағып китә. Әммә немецтар ҙа ут аса, атыш барышында беҙҙең расчеттың икенсе номеры һәләк була, Дауытов та ҡаты яралана. Шулай ҙа ул, аҡтыҡ көсөн йыйып, пулеметынан атыуын дауам итә. Уға ярҙамға автоматсылар төркөмө килеп еткәндә инде пулемет тынып ҡала. Ошо мәлдә лә пулемет гашеткаһынан ҡулын ысҡындырмаған Искәндәр Дауытов күҙҙәрен мәңгегә йомған була. Батыр ҡаҙаҡ егете тотош эскадронды һәләкәттән ҡотҡара. Уға үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

**✓ *Адвокат - психолог та. Шунһыҙ бер нисек тә мөмкин түгел. Табиптар - ауырыу-сирҙәрҙе, беҙ күңелдәрҙе, йәндәрҙе дауалайбыҙ. Адвокат - ҙур хәреф менән яҙылырлыҡ, ихтирамға лайыҡлы һөнәр.***

# АДВОКАТМЫ?

## Ул ҙур хәреф менән яҙылырлыҡ һөнәр

**Бер кеше үҙен судта яҡларлыҡ яҡшы адвокат эҙләгәс, уға кандидатура тәҡдим итеүсе: "Мин һиңә бер адвокатты тәҡдим итәм, ул аяғын эт тешләүсе кешенең үҙе этте нисек итеп тешләүен иҫбат итте", - тигән. Тағы ла бер адвокат судта юлда кешене бәрҙереп китеүсе водителдең ғәйепһеҙ булыуын иҫбат итә алған. Йәнәһе, уның дәлиле шулай яңғыраған: "Сәғәтенә 240 километр тиҙлектә барғанда водитель 40 километрлыҡ тиҙлек сикләүе билдәһен бер нисек тә аңғара алмай..." Әлбиттә, миҫал итеп килтерелгән был хәлдәр бер ҡасан да булмаған, улар адвокаттар тураһындағы киң билдәле лаҡап-көләмәстәр генә. Шуға күрә ошо ике лаҡапты уҡып, йылмайып-көлөп алығыҙ ҙа, артабан етди һөйләшеүгә күсәйек. Икенсенән, көлөп-йылмайырға ла сәбәп бар: быйыл сентябрь айында Башҡортостан Адвокатураһы үҙенең 100 йыллыҡ юбилейын билдәләп үтте.**
**Шулай итеп, беҙҙә ҡунаҡта: Башҡортостан Республикаһы Адвокаттар коллегияһының Октябрь районы филиалы етәксеһе Салауат Фазыл улы АБЫҘГИЛДИН һәм Калинин районы филиалы етәксеһе урынбаҫары Эльмира Валерий ҡыҙы БАЯЗИТОВА.**

**Салауат Фазыл улы, Эльмира Валерий ҡыҙы, нисек уйлайһығыҙ, әгәр ҙә закондар камил булһа, адвокат хеҙмәте кәрәгер инеме? Ни өсөн тигәндә, законда барлыҡ шарттар ҡаралһа, кеше адвокат тарафынан яҡланыуға мохтаж булмаҫ ине бит. Шулаймы?**

**Салауат Абыҙгилдин:** Бында мәсьәлә закондарҙың камил булыуы-булмауында тормай, күптәр бит закондарҙы теүәл үтәмәй. Икенсенән, күп кешеләр ул закондарҙы бөтөнләй белмәй һәм шул арҡала ауыр хәлгә ҡала. Кемдер тап шул сәбәпле судта яңылыш дәлилдәр килтереп, ғәйепһеҙгә хөкөм ителеүе бар. Адвокат хеҙмәте тап ошо урында талап ителә лә инде.

**Эльмира Баязитова:** Адвокатты күптәр енәйәт эштәрен тикшергәндә генә ҡатнашыусы хеҙмәткәр тип аңлап яңылыша. Был хеҙмәт киңерәк мәғәнәгә эйә. Адвокат енәйәт эштәренән тыш, граждандар, административ, арбитраж, хеҙмәткә бәйле эштәрҙе лә алып бара. Адвокатҡа ауыр проблема килеп тыуғас ҡына түгел, башта уҡ кәңәш һорап мөрәжәғәт итеү отошло. Уның кәңәше хата ебәрмәҫ өсөн дә талап ителә. Адвокаттар енәйәт эштәрендә ике яҡты ла яҡлай. Зыян күргән яҡты дәүләт ғәйепләүсеһе генә яҡлай, тип беҙ яңылышабыҙ. Беҙҙе вузда уҡыған саҡта тормоштоң барлыҡ проблемалы өлкәләре буйынса әҙерләйҙәр, кәрәкһә, нотариус булып та эшләй алабыҙ.

**Салауат Абыҙгилдин:** Адвокат - психолог та. Шунһыҙ бер нисек тә мөмкин түгел. Табиптар - ауырыу-сирҙәрҙе, беҙ күңелдәрҙе, йәндәрҙе дауалайбыҙ. Ситуациялар төрлөсә була, шуға күрә беҙ үҙебеҙгә яҙмышын ышанып тапшырыусыларҙы тынысландырырға бурыслыбыҙ. Адвокат - ҙур хәреф менән яҙылырлыҡ, ихтирамға лайыҡлы һөнәр.

**Шундай бер риүәйәт бар. Бер малай тыумыштан бөкөрө була. Күршеһендә йәшәгән икенсе бер малай уның кәмселегенән көлөп, туҡтауһыҙ "Бөкөрө, бөкөрө!" тип үсекләй. Бер мәл йәне көйгән бөкөрө малай үсекләүсегә бысаҡ менән сәнсә һәм уны яралай. Бөкөрөнө суд алдына баҫтыралар. Бер мәл адвокатҡа һүҙ бирәләр. Ул: "Хөрмәтле судья, хөрмәтле присяжный заседателдәр!"- тип 24 тапҡыр ҡабатлай һәм уны суд залынан ҡыуып сығаралар. Һөҙөмтәлә бөкөрөнө аҡлайҙар. Адвокат булараҡ, ошо хәлде нисек баһалайһығыҙ?**

**Салауат Абыҙгилдин:** Бында зыян күреүсене ошо хәлгә еткереүсе сәбәп асыҡлана: уға күп тапҡырҙар ошо мыҫҡыллы үсекләүҙәрҙе өнһөҙ күтәрергә тура килгән бит. Бөкөрө үсекләүсеһе тарафынан аффект хәленә еткерелгән һәм енәйәт ҡылған... Адвокат ошо хәлде үҙенсә һүрәтләп, хәҡиҡәтте асып бирергә ниәтләгән...

**Эльмира Баязитова:** Эйе, адвокат бында судьяға һәм заседателдәргә бөкөрө малайҙың бысаҡҡа тотоноу сәбәбен аңлатыу ниәтенән был хәлде закон күҙлегенән түгел, ә ситуация күҙлегенән сығып һынландырған.

**Салауат Абыҙгилдин:** Эйе, бөкөрө малай ҙа суд залында ултырыусылар һымаҡ, туҡтауһыҙ бер үк һүҙҙе ҡабатлауҙан, үсекләүҙән ялҡҡан.

**Тап шулай, адвокат үҙенең был ҡылығы менән судьяны һәм заседателдәрҙе бөкөрө малайҙың урынына ҡуйған, шулай бит?**

**Эльмира Баязитова:** Тап шулай, адвокаттар был риүәйәтте яҡшы белә.

**Салауат Абыҙгилдин:** Был атаҡлы адвокат Плеваконың стиленә оҡшаған. Тарихи яҙмаларҙа революцияға тиклем йәшәгән был адвокаттың суд алдына баҫҡан дин әһелен яҡлап һөйләгән сығышы һаҡлана. "Ул һеҙҙең күпме гонаһығыҙҙы ярлыҡаған, уны хөкөм итмәгеҙ", тип заседателдәргә мөрәжәғәт итә ул. Был һүҙҙәрҙән һуң дин әһеле аҡлана.

**Эльмира Баязитова:** Һис һүҙһеҙ, Плевако мәшһүр психолог булған.

**Әгәр ҙә присяжный заседателдәр күпселек тауыш менән ҡарар ҡабул итһә, судья йә прокурор был ҡарарҙы юҡҡа сығара аламы?**



**Эльмира Баязитова:** Присяжныйҙар ҡарары үтәлеүе мотлаҡ. Әгәр ҙә улар кешене ғәйепһеҙ тип таба икән, судья артабан эште дауам итә алмай.

**Ни өсөн енәйәтсенең яҡланырға хоҡуғы бар?**

**Эльмира Баязитова:** Уның был хоҡуғы РФ Конституцияһында сағылыш тапҡан. Был - беренсенән, икенсенән, Төп закондағы был статья ғәйепһеҙ кешене төрмәнән һаҡлау өсөн дә кәрәк.

**Салауат Абыҙгилдин:** Әгәр ҙә адвокат енәйәтсенең хоҡуҡтарын яҡлауҙан баш тартһа, был хәл һөнәр деградацияһы тип аталыр ине. Беҙҙең баш тартырға хоҡуғыбыҙ юҡ.

**Үлем язаһына мөнәсәбәтегеҙ нисек? Уны ғәмәлдән сығарыу менән килешәһегеҙме?**

**Эльмира Баязитова:** Мин үлем язаһына ҡаршы.

**Салауат Абыҙгилдин:** Мин дә ҡаршы. "Советтар Союзы маньягы" тип танылған Андрей Чикатилоға үлем язаһы сығарылып, 1994 йылда ҡарар тормошҡа ашырылғас, был йәһәттән бәхәстәр тыуҙы. Сөңки үлем язаһы 1993 йылда ғәмәлдән сығарылғайны.

**Хәҙерге заманда ниндәй характерҙағы закон боҙоуҙар, енәйәт ҡылыуҙар өҫтөнлөк итә? Уларға ниндәйерәк анализдар бирергә мөмкин?**

**Салауат Абыҙгилдин:** Уҙған быуаттың 90-сы йылдарын үҙегеҙ иҫләйһегеҙ, енәйәт урамға сыҡты. Бөгөн йәштәр наркотикты интернет аша һата.

**Эльмира Баязитова:** Интернетта төрлө юлдар менән граждандарҙы, бигерәк тә пенсионерҙарҙы алдап, аҡсаларын талаусылар барлыҡҡа килде. Дәүләт был йәһәттән халыҡ араһында иҫкәртеү эше алып бара, барыбер ҙә ғаризалар күпләп килә.

**Салауат Абыҙгилдин:** Хәҙерге бурҙар социаль селтәрҙәр технологияларын ҡулланып эш итә. Ғаризалар күп булһа ла, тотолған бурҙар әҙерәк. Гоголдең "Ревизор"ындағы Хлестаковса килеп сыға: "Беҙ ришүәт алмайбыҙ, ә бына үтескә өс йөҙ һум бирһәгеҙ..." - тигән кеүек. Яҙыусының әҫәрендәге ваҡиғалар ун туғыҙынсы быуатта бара, әле урамда егерме беренсе быуат - барыһы ла элеккесә, тик технологиялар ғына үҙгәргән.

***Уҙған быуаттың 90-сы йылдарын үҙегеҙ иҫләйһегеҙ, енәйәт урамға сыҡты. Бөгөн йәштәр наркотикты интернет аша һата. Хәҙерге бурҙар социаль селтәрҙәр технологияларын ҡулланып эш итә. Ғаризалар күп булһа ла, тотолған бурҙар әҙерәк. Гоголдең "Ревизор"ындағы Хлестаковса килеп сыға: "Беҙ ришүәт алмайбыҙ, ә бына үтескә өс йөҙ һум бирһәгеҙ..." - тигән кеүек. Яҙыусының әҫәрендәге ваҡиғалар ун туғыҙынсы быуатта бара, әле урамда егерме беренсе быуат - барыһы ла элеккесә, тик технологиялар ғына үҙгәргән.***

**Уҙған быуаттың 80-се йылдарында Өфөләге бер уҡыу йорто студенттары сит илгә төҙөлөш отрядына барып, джинсылар алып ҡайтып һатҡанда эләгеп, уҡыуҙан ҡыуылдылар. Был хәлгә хәҙерге көн күҙлегенән сығып ҡарағанда көлкө күренә. Быны нисек аңларға була тип уйлайһығыҙ?**

**Эльмира Баязитова:** Хәҙер бындай алыпһатарлыҡҡа, эшлекле кеше сифаты, тигән мөнәсәбәт тәрбиәләнә, уға өйрәтәләр, уҡыталар. Закондар ҙа бындай эшмәкәрлекте тыймай, тик һалым ғына түлә.

**Салауат Абыҙгилдин:** Баҙар иҡтисады, үкенескә күрә, беҙҙең илгә ҡырағай рәүештә килеп инде. Хәҙер совет осорондағы төшөнсәләр генә үҙгәрҙе: ул саҡтағы спекулянт алыпһатарҙар хәҙер эшҡыуар тип атала.

**Бер ағай: "Мин ғәҙеллек яратҡан өсөн адвокат булып киттем", - тигәйне. Һеҙ үҙегеҙ адвокат һөнәренә ниндәй уҡыу йорттары, ниндәй һөнәрҙәр аша килдегеҙ?**

**Салауат Абыҙгилдин:** Минең биографиямдың география өлөшө бик киң. Учалы районының Мулдаш ауылында тыуҙым, артабан атай-әсәйем Ҡаҙағстанға йәшәргә күсте. Ундағы Арҡалыҡ ҡалаһында урта мәктәпте тамамланым. Шунан Екатеринбург ҡалаһының урман-техник университетында уҡыным. Унда алған һөнәрем буйынса теүәл бер йыл эшләнем. Артабан тәртип һаҡлау органдарында тәфтишсе булып һигеҙ йыл хеҙмәт иттем. Унда эшләү осоронда Силәбе дәүләт университетында юрист һөнәренә уҡыным. Шунан һуң адвокат булып эшләй башланым.

**Ниңә фәҡәт адвокат һөнәрен һайланығыҙ?**

**Салауат Абыҙгилдин:** Был өлкәлә үҙаллылыҡ күберәк. Әле бына егерме йыл адвокатурала хеҙмәт итәм. Кешене яҡлағас, сауаплы, рәхмәтле булыуы менән дә был һөнәр үҙенә тартҡандыр.

**Эльмира Баязитова:** Мин Нуриман районында тыуып үҫтем. Юрислыҡҡа уҡыған ваҡытта нотариус булырмын тип уйлағайным. Һуңғы курста кейәүгә сыҡтым, балам тыуҙы, шул уҡ ваҡытта диплом да алдым. Баламдың атаһы менән уртаҡ тормош килеп сыҡманы, миңә баламды ҡарар өсөн иркенерәк графиклы эш кәрәк булғаны өсөн адвокат булып киттем. Шулай итеп, ирем менән айырылышыуға бәйле суд ҡарары эҙләп барған көндә үк адвокат-стажер булып эш башланым.

**Һөнәрегеҙ нимәһе менән оҡшай?**

**Эльмира Баязитова:** Граждандар эштәре буйынса адвокат булып эшләү бала ҡарауға нығыраҡ бәйле булған ҡатын-ҡыҙҙарға уңайлы.

**Салауат Абыҙгилдин:** Был йәһәттән адвокат һөнәренең эш графигы ҡатын-ҡыҙҙарға ғына түгел, беҙгә, атайҙарға ла уңайлы. Балаларҙы балалар баҡсаһына, мәктәпкә алып барырға, алып ҡайтырға ла өлгөрәбеҙ.

**Ғәйепһеҙлек презумпцияһы тигән киң билдәле төшөнсә бар. Уның буйынса кешенең ғәйебе суд тарафынан раҫланмайынса тороп, ул кешене енәйәтсе тип атап булмай. Шул уҡ ваҡытта ул енәйәтен күп кешеләр шаһитлығында ҡылған. Ни өсөн шулай?**

**Эльмира Баязитова:** Кешене енәйәтсе тип бары суд ҡына раҫлай ала.

**Салауат Абыҙгилдин:** Хөкөм ҡарары булмайынса, ул кеше ғәйепле түгел. Закон шулай ти.

**Ниңәлер беҙҙең халыҡ өсөн суд тупһаһы аша атлау ниндәйҙер тыйылған ғәмәл башҡарған һымаҡ тойола. "Фәлән кеше фәлән кешене судҡа биргән", тигән һүҙбәйләнеш тә яҙыҡ эш ҡылыу һымаҡ ҡабул ителә. Ни өсөн шулай икән, был хаҡта уйланғанығыҙ юҡмы?**

**Эльмира Баязитова:** Был бер беҙҙең халыҡҡа ғына ҡағылмайҙыр ул. Бәлки, закондарҙы белмәүҙән килəлер был хәл. Әгәр ҙә суд процесында үҙегеҙгә күңел йәрәхәте алырға теләмәһәгеҙ, адвокатҡа, йәғни беҙгә мөрәжәғәт итәһегеҙ инде.

**Нәфис фильмдарҙа бер фраза йыш яңғырай: "Һеҙҙең судҡа тиклем әйтелгән һүҙегеҙ судта һеҙгә ҡаршы ҡулланыласаҡ..." Ни өсөн шулай?**

**Салауат Абыҙгилдин:** Был фразаны шулай тип аңларға ла була: "Адвокатығыҙға, йәғни беҙгә мөрәжәғәт итегеҙ!"

**Һуңғы арала һеҙ ҡатнашҡан суд процестарында ниндәйерәк эштәр күберәк ҡарала?**

**Эльмира Баязитова:** 2006-2008 йылдарҙа мөлкәтте законлаштырыу буйынса эштәр үтә күп булды. "Дача амнистияһы"на тиклем хәл үтә ҡыҙғаныс ине. Оло йәштәге пенсионерҙар үҙ ҡулдары менән төҙөгән йорттарҙы пошлиналарын түләп, ул йорттарҙың үҙенеке итеп иҫбат итеп, суд тупһаларын күп тапаны. Дәүләт уларға 2010 йылға тиклем йорттарын законлаштырып өлгөрөргә ҡушты. Кадастр хаҡ менән баҙар хаҡы араһында оло айырма килеп сыҡҡас, улар был йәһәттән ауыр хәлгә ҡуйылды. Әйтәйек, йорттоң ғәмәлдәге хаҡы 50 мең һум булһа, кадастр хаҡы 300 мең һум. Уларҙың күбеһе иск ҡағыҙҙарын тултыра алмағас, арзан ғына хаҡҡа был эште беҙгә атҡарырға, том-том документтар әҙерләргә тура килде. "Дача амнистияһы" барлыҡҡа килгәс, эштәр күпкә еңеләйҙе. Хәҙер мөлкәтте законлаштырыуға бәйле эштәр юҡ кимәлендә, күберәк күршеләрҙең ергә бәйле бәхәсле мәсьәләләрен ҡарайбыҙ.

Мираҫ бүлешеүҙәге проблемалар элек нисек булһа, хәҙер ҙә шул килеш ҡалды.

Күберәген яңы закондарға бәйле эштәр ҙә барлыҡҡа килә. Беҙгә "Һеҙ ошо мәсьәлә буйынса шөғөлләнгән яҡшы адвокатты беләһегеҙме?" тип йыш мөрәжәғәт итәләр.

**Салауат Абыҙгилдин:** 90-сы йылдарҙа урамдарҙа машиналарҙы яндырыу, ватыу киң таралғайны, хәҙер ундай күренеш юҡ тиерлек. Ул ваҡытта, унан да һуңыраҡ ҡала ихатаһынан машиналарҙы күп урлайҙар ине. Хәҙер инде бер нисә миллион һумлыҡ машиналар ҡала ихаталарында хәүеф күрмәй ултыра. Юл-транспорт ваҡиғаларынан һуң ОСАГО буйынса зыян күреүсегә страховка юллау буйынса эштәрҙең иҫәбеһаны юҡ.

**Эльмира Баязитова:** 2015 йылда банкротлыҡ буйынса яңы закон ҡабул ителде. Был закон йылдан-йыл камиллаша бара. Элек юридик ойошмаларҙың банкротлығы буйынса эштәр күберәк булһа, хәҙер физик шәхестәр банкротлығы проблемаһы өҫтөнлөк итә. Кешеләр кредитҡа, займға аҡса алып, түләй алмаған осраҡта ошо юлға бара. Үҙ тормошонда енеләйтеүҙең законлы юлы был, һәм унан ҡурҡырға кәрәкмәй. Ә тормош үҙ ҡағиҙәләрен ҡуя, бөтә кешеләр ҙә яҡшы йәшәгеһе килә.

**Адвокатҡа адвокат кәрәкме?**

**Эльмира Баязитова:** Тормош булғас, төрлө хәлдәр була. Мин, мәҫәлән, проблемаларымды килеп тыуһа, уларға бәйле эштәр менән шөғөлләнгән коллегаларымдан кәңәш һорайым. Ҡайһы бер мәсьәләләр буйынса кәңәш һорап, үҙемә лә мөрәжәғәт итәләр.

**Эскән килеш руль артына ултырыусылар проблемаһы һәр ваҡыт актуаль булып ҡала килә, ни өсөн тип уйлайһығыҙ?**

**Салауат Абыҙгилдин:** Закон ҡәтғиләнә барған һайын, иҫерек водителдәр һаны арта ғына бара. Уларҙы штраф суммаһы ла, төрмәгә ултыртыу ҙа, машинаһын тартып алыу ҙа туҡтатмай.

**Эльмира Баязитова:** Бындай саралар ғына ярҙам итмәгәс, иҫерек водителдәр проблемаһын башҡаса хәл итеү юлдарын эҙләргә кәрәктер инде.

**Күренекле дәүләт эшмәкәре, яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаев төрмәлә ултырған башҡорттарҙың ни сәбәптән унда барып эләгеүҙәрен өйрәнеп, ҡыҙыҡлы ғына һығымталар яһағайны: "Кемеһеләр эсеп иҫереп һуғышҡан, ҡатынын туҡмаған, нарыҡ урлаған һ.б. Исмаһам, береһе лә машина урламаған, банк таламаған", тигәйне ул шаяртыу ҡатыш, уйынлы-ысынлы итеп.**

**Салауат Абыҙгилдин:** Төрмәгә ултырырлыҡ булғас, ҡатынын ныҡ туҡмағандыр инде. Был, күрәһең, совет осорона ҡағылалыр. Хәҙер иһә мәғлүмәт технологиялары заманында, ғөмүмән, закон боҙоуҙарҙың характеры үҙгәрҙе. Шул фонда иҫереп ҡатын туҡмау, нарыҡ урлау көлкө генә булып тойолалыр.

**Эльмира Баязитова:** Граждандар эштәре буйынса адвокат булғас, мин бында бер ниндәй ҙә факт килтерә алмайым. Шулай ҙа енәйәт ҡылып төрмәгә барып эләгеү бер халыҡты ла биҙәмәгәнен яҡшы беләм.



***Суицид заманға бәйле көтөлмәгән йүнәлеш алды. Интернетта бигерәк тә үҫмерҙәрҙе ошо аҙымға этәреүсе төркөмдәр, чаттар барлыҡҡа килде. Тап шуның өсөн хәҙер суицид күберәк мәктәп балалары, үҫмерҙәр араһында күҙәтелә. Суицидҡа барыусыны бер нисек тә аҡлап булмай, ғәйепләргә лә ярамай. Әммә беҙ йәш быуынды был афәттән аралар өсөн йәшәүҙең, ғүмерҙең ҡиммәттәре тураһында туҡтауһыҙ һүҙ алып барырға бурыслыбыҙ...***

**Торлаҡ-коммуналь хужалығы тармағындағы үҙгәрештәргә нисек ҡарайһығыҙ?**

**Эльмира Баязитова:** Ундағы хәлдәрҙең аҙағы нимә менән барып бөтөрөн дә ҡуҙаллап булмай. Хәҙерге яңы ҡағиҙәләр буйынса, йортта бурыстары булғандарҙың бурыстарын башҡалар түләргә тейеш. Миненсә, был закон оҙаҡҡа бармаясаҡ, уға үҙгәрештәр индереләсәк.

**Салауат Абыҙгилдин:** Был хәлдең һуңғы сиктә түләй алмаусылар менән улар өсөн түләүселәр араһын ҡырҡыулаштырыуға алып килеүе көн кеүек асыҡ. 1 сентябрҙән ғәмәлгә ингән был закон күп проблемалар тыуҙырасаҡ.

**Адвокат булараҡ, суицид юлына баҫыусыны аҡлай һәм яҡлай алаһығыҙмы?**

**Эльмира Баязитова:** Суицид заманға бәйле көтөлмәгән йүнәлеш алды. Интернетта бигерәк тә үҫмерҙәрҙе ошо аҙымға этәреүсе төркөмдәр, чаттар барлыҡҡа килде. Тап шуның өсөн хәҙер суицид күберәк мәктәп балалары, үҫмерҙәр араһында күҙәтелә. Суицидҡа барыусыны бер нисек тә аҡлап булмай, ғәйепләргә лә ярамай. Әммә беҙ йәш быуынды был афәттән аралар өсөн йәшәүҙең, ғүмерҙең ҡиммәттәре тураһында туҡтауһыҙ һүҙ алып барырға бурыслыбыҙ...

**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# ШУЛАЙ ҺӨЙЛӘШӘЛӘР ИНЕ...

**Халҡым борон-борондан сәсән, тапҡыр, шаян, йомарт телле булған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, өлкән быуын баҡыйлыҡҡа күсә барған һайын, телебеҙ ҙә ярлылана. Мин ололарҙан ауылыбыҙҙа йыш ҡулланылған ҡайһы бер һүҙҙәрҙе, фразеологик берәмектәрҙе аңлатмалары менән бергә яҙып алдым. Әлбиттә, әбейҙәр, бабайҙар ҡулланып һөйләгән бындай һүҙҙәр ҡыҙыҡ та, тыңлаусыға ла нығыраҡ аңлашыла, хәтерҙә лә ҡала. Тәрбиәүи яғы ла барҙыр, тип уйлайым. Был һүҙлекте һеҙгә лә тәҡдим итергә булдым.**

**Бит йыумаған** - оятһыҙ.
**Ҡышын ҡар алалмаҫһың** - ныҡ һаран кеше.
**Аҡылға бер төрлө** - иҫәр.
**Күҙе бетләгән** - оҙаҡ йоҡлаған кеше.
**Түн аяҡ** - саҡырылмаған ҡунаҡ.
**Йоҡо сүлмәге** - оҙаҡ йоҡлаған кеше.
**Урам хәйерсеһе** - урамда күп йөрөүсе.
**Арты һике күрмәй** - эшсән кеше.
**Ҡаты ҡолаҡ** - тыңлауһыҙ.
**Түң ҡолаҡ** - тыңлауһыҙ.
**Таҡразлап** - янында ҡат-ҡат әйтеү.
**Эт эскеһеҙ итеп туҡмаған** - ныҡ итеп туҡмаған.
**Дусай сумаҫы** - бер юлы күп итеп.
**Ҡәкел** - ҡыҫҡа киҫелгән маңлай сәсе.
**Йығылып киттеләр** - ныҡ оҡшаттылар, яраттылар.
**Эт сыҡмаҫ көн** - насар һауа торошо.
**Ас кернә** - ашамһаҡ.
**Инабатаһы юҡ** - йүне юҡ.
**Асыҡ ауыҙ** - һүҙсән.
**Ҡаты морон** - тыңлауһыҙ.
**Ғуз тамаҡ** - ашамһаҡ.
**Апагауыҙ** - йүнһеҙ.
**Арманһыҙ** - арып.
**Төн убыры** - төндә йоҡламай йөрөгән кеше.
**Урыҫ бейәләйе** - бәләкәй буйлы кеше.
**Быйма башы хәтлек** - бәләкәй.
**Ата ҡуян сапмалы** - ныҡ һыуыҡ (өй).
**Ярыҡ барабан** - сер тотмай торған кеше.
**Аҡса ҡоло** - һаран.
**Артына ултыртты** - алданы.
**Юҡтан ҡоҙағый** - булмағандан булған.
**Еп һыуы** - һыйыҡ аш.
**Ҡоро һыуҙа тороу** - ас тороу.
**Итәгенде йыйып йөрө** - алдыңды-артыңды ҡарап йөрө.
**Сыбар йөрәк** - түҙемһеҙ.
**Бармаҡтары үҙенә ҡәкре** - үҙ файҙаһына.
**Болғау тағы** - һүҙ ҡуйыртыусы.
**Эшен килтергәндәр** - кәрәген биргәндәр.
**Теше аралы** - һүҙсән.
**Аҡыл тоҡсайы** - аҡыллы һөйләгән кешене яратмау.
**Кукәй күҙ** - кәрәкле нәмәне тиҙ генә күрмәүсе.
**Тишек кеҫә** - аҡса тота белмәгән кеше.
**Сәскә утлап йөрөй** - иҫе китмәй, вайымһыҙ.
**Кирегә бөткән** - тиҫкәре.
**Күҙе бөтәшкән** - һимергән.
**Илле алла, илле мулла менән** - көскә.
**Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ** - көтөлмәгән хәбәр.
**Нәзберек** - булдыҡһыҙ.
**Ит сүмәләһе** - йыуан кеше.
**Һеркәһе һыу күтәрмәй** - үпкәсел.
**Ҫ(һ)ыйыҡ** - ялҡау.
**Ыштанһыҙ** - күңеле киң.
**Йоҡа елкә** - ялҡау.
**Ҡомалаҡ** - маҡтансыҡ.
**Күҙгә кергән асы төтөн кеүек** - ялҡытҡыс кеше.

**Әйтемдәр:**
Өйһәң күп, таратһаң аҙ.
Аяғың лапылдамаһа, ауыҙың шапылдамаҫ.
Һыуҙан алда быуа быума - алдан һөйләмә мәғәнәһендә.
Үҙенә ыумас ыумағанды, кешегә туҡмас киҫмәҫ.
Ыштанһыҙ билгә киң ҡайыш.
Ишәк ише менән, һарыҡ дуҫы менән.
Ил-көн ебәрһә, барырмын.
Бер аяғын алғансы, икенсеһен эт ашай.
Береһен алып, икенсеһен ҡуйып булмай.

**Фәйрүзә АБДУЛОВА.**
**Миәкә районы Сәфәр ауылы.**

✓ Әҙ ине шул улар, Мир ише ҡул көсө менән иген иккән, илде туйындырған ябай эшсе халыҡ юҡ иҫәбендә, күбеһе өҫтәл артында ыштан туҙҙырған, бойороҡ биреп кенә эшләтеп, олоғара йорттарҙа маҙырап йәшәгән түрә-ғара ине.






Мир бабай йомшаҡ көрән тышлы ҡалын фотоальбомды ҡарап бөткәс тә, оҙаҡ ҡына һыйпап, ҡулында тотоп ултырҙы. "Бар ғүмерем бер альбомға ғына һыйған да ҡуйған икән", - тип көрһөндө ул ғүмеренең иң иҫтә ҡалған, хәтер сөңгөлдәрендә ваҡыты-ваҡыты менән үҙенең барлығын иҫкә төшөрөп торған ҡыуаныслы ла, һағышлы ла мәлдәрен күҙ алдынан үткәреп. Унан альбом эсенән төрлө төҫтәге бик күп маркалар йәбештерелгән, немец телендә яҙылған бер хат алды ла, ҡытыршы устары менән, иркәләгәндәй итеп, ипләп кенә һыйпап-һыпырып ҡуйҙы...

### Сәйәхәткә юллама

Болгарияға путевка менән бүләкләнеүсе хеҙмәт алдынғылары араһында Мирҙың да исеме бар ине.

- Үкенескә күрә, бара алмайым. Бынауындай ҡыҙыу ураҡ мәлендә кем буҡ тибеп анауынсама ергә сәйәхәткә сығып китһен! Кем ебәрһен! Игенсе өсөн һәр көнө генә түгел, һәр сәғәте ҡиммәт! - тип яуап бирҙе ул районның ауыл хужалығы буйынса етәксеһенә.

- Зиннәтуллин! - тине хужа тауышын баҫып. - Ауыҙыңды үлсәп ас! Кем һине буҡ тибергә ебәрә! Культурно ял итергә! Ил күрергә! Иген үҫтерергә өйрәнергә, нәкәнис!

-Игенде үҫтерә белмәйбеҙме ни? Улайһа, ни бысағыма "Хеҙмәт алдынғыһы" тип путевка биреп тораһығыҙ? Ана, иген үҫтерә белгәндәргә бирегеҙ!

Хужа тағы тауышын баҫып, йылан ыҫылдағанға оҡшатып, теш араһынан һығып сығарҙы:

- Зиннәтуллин! Шашма!

Һәр ваҡыттағыса тураһын әйтеп өйрәнгән Мир үҙенең кем алдында торғанын онотоп, ҡапыл ҡыҙып киткәнен аңлап, иңбашын йыйырҙы:

- Ғәфү итегеҙ! Әммә ысынлап та бара алмайым... Минең комбайнға кем ултыра? Былай ҙа ҡырҡҡа ярылырҙай булып йөрөлә...

Колхоздың иң шәп механизаторы, ун биш йыллап районда урып-йыйыуҙа беренселекте бирмәгән Мир Зиннәтуллинды етәкселек яҡшы белә. Ҡулынан да, теленән дә килә торған ир уҙаманды улар хөрмәтләй ҙә, унан бер аҙ ҡурҡыңҡырай ҙа шикелле. Сөнки алдындағы кешенең кем икәненә ҡарамай, гел генә дөрөҫөн һөйләй торған, аҡты һис ҡасан ҡара тип әйтмәҫ бер үҙһүҙле кеше ул. Колхоздағы дөйөм йыйылыш булһынмы, һабантуймы, ниндәйҙер районара йә республика күләмендәге кәңәшмәме - Мир булһа, түрәләр һәр саҡ уяу ғына тора: етешһеҙлекте йәшереп, эште ал да гөл итеп күрһәтергә форсат бирмәйәсәк. Бер йылы ағыуланып үлгән малдарҙы, унан ҡалһа, киләһе йылынамы икән, нисәнсе йылыналыр, йыйылған игенде асыҡ һауала ятҡырып, киптерттермәй сереттергәнен йәшереп маташҡаны өсөн колхоз рәйесенә район хужалары алдында яуап тоторға тура килде шул. Ошо Мирҙың зәһәр теле арҡаһында район хужалары ла йөҙҙәрен ҡыҙартты өлкә комитеты етәкселеге алдында. "Һәр ваҡыт дөрөҫөн генә һөйләп булмай, кәмселектәрҙе әҙерәк йәшереп өйрәнергә лә кәрәк! Тыйһаңсы шул телеңде, Зиннәтуллин!"- тип йыш ҡына тиргәлде хужаларҙан. "Һеҙ йәшергән дә еткән! Ә минә намыҫым ҡушмай!"- тип шарт боролоп киткән саҡтары ла булды ирҙең. Әрләнеләр, һүктеләр, ләкин эштә алдынғы механизаторҙы ихтирам иттеләр барыбер ҙә. Башҡалар ыңғайына орден-миҙал таҡманылар тағыуын, юрый исемлектән төшөрөп ҡалдырҙылар, әлбиттә, Маҡтау ҡағыҙҙарын, ударник билдәләрен биреп торҙолар. Эткә итен бирмәй, һөйәк ташлағандай ғына итеп. Ә Мирҙың быға бер ҙә иҫе китмәне, аптыраманы ла, һоранып та йөрөмәне. Иҫенә төшөрөп, хужаларға ҡаршы һөсләтеп маташҡандарҙың да ауыҙын тиҙ яптырҙы:

- Булғаны еткән: иген үҫтерелгән, бураларға һалынған. Мин һиңә Брежневмы орден-миҙалдан түшелдерек тағып йөрөргә! - тип кенә ебәрҙе.

Әле килеп нисәмә йыл һуҙғандан һуң, "Ярай, еберәйек инде шул эт арҡырыһын бер тапҡыр ял итергә, кеше Зиннәтуллинды ситнәтәһегеҙ, тип һөйләмәй ҡалыр, исмаһам, бәлки, аныһының үҙенең дә ауыҙы ябылыр", - тип Болгарияға ебәрмәксе инеләр, ҡалайтып тора һөмһөҙ:

- Ғәфү итегеҙ! Әммә ысынлап та бара алмайым... Минең комбайнға кем ултыра? Былай ҙа ҡырҡҡа ярылырҙай булып йөрөлә! - Бер аҙ шымып торғас, өҫтәп ҡуйҙы, - Германияға булһа, бәлки, барыр ҙа инем. Ә бында, юҡ, булмай...

Барманы Мир, урынына икенсе кешене табыу ауыр булманы. "Уйламай һөйләгән - ауырымай үлгән" - ошо әйтем килде Мирҙың башына. Шулай булмайса һуң! Уйламай ғына әйткән "Германияға булһа, бәлки, барыр ҙа инем", - тигән һүҙ әллә Аллаһы Тәғәләнең "Амин" тигән сағына тура килдеме? Ул саҡта түрә бер нәмә лә өндәшмәй ҡайтарып ебәргәйне, бына дүрт йыл үткәс, Мирҙы йәнә юллама менән бүләкләп ҡуйҙылар. Ҡайҙа бит әле, ул осраҡлы ғына әйткән Германияға!

Был юлы баш тартманы Мир: беренсенән, ураҡ тамамланған, ҡулдан эш төшкән, икенсенән, Германияға барыу... Юҡ, бер ҡасан да был хаҡта хыялланманы ла, уйланманы ла ул. Әммә йәшлегенең өс йылға яҡын ваҡыты үткән, үҙе хеҙмәт иткән ерҙәрҙе бер барып күреп ҡайтһаң ине, тигән теләге күңел төбөндә йәшеренеп-боҫороноп ятҡандыр, күрәһең. Башҡа хеҙмәт алдынғылары менән бергә алыҫ Германияға бына шулай юлы төштө Мир Зиннәтуллиндың 1984 йылдағы көҙҙөң ҡышҡа ауышҡан бер мәлендә...

Тәүҙә район үҙәгендә, унан Өфөлә Ауыл хужалығы министрлығында сәйәхәткә юлланыусыларҙы байтаҡ тикшерҙеләр, инструктаж үткәрҙеләр. Өс кейеменән башлап, үҙеңде нисек тоторға, нисек һөйләшергә, өҫтәл артында нисек ашарыңа тиклем тәфсирләп аңлаттылар. Матур итеп сервировкаланған бай өҫтәл тирәләй уратып ҡуйып, ҡайһы ҡалаҡ менән нимә ашарға, нәҙек сәнске менән нимәне ҡаҙарға, яҫыраҡ сәнске менән нимәне ҡабырға, бокалдарҙың ҙуры, бәләкәйе, нескә биллеһе ниндәй эсемлеккә тәғәйенләнгән - ашау этикетын тулыһынса мейеләренә һеңдерҙеләр. Шулай булмайса: үҙебеҙҙең ҡаһарман атай-ағайҙарыбыҙ еңгән фашистар ояһына барабыҙ ҙа һуң! Улар алдында сер биреп тормаҫтар инде! Өйҙә умыра тешләп икмәк ашаһаҡ та, быларҙың нәҙек кенә, үтә күренмәле итеп теленгән "икмәксегенән" матур ғына ҡабымлап ашарға икән дә! Үҙебеҙҙә майын ағыҙа-ағыҙа ҡалъя һоғонһаҡ та, немецтарҙың кескәй генә теленгән итен семетеп кенә ашарға кәрәк, имеш! Быларҙы тыңлаған бер нисә һауынсы, тракторсы, завод эшсеһе, урман ҡырҡыусы - ябай хеҙмәтсәндәр аптырап ҡалды. Тыштан ризалыҡ белдереп, баш ҡағып торһалар ҙа, эстән генә: "Барып алайыҡ әле Герман еренә, нисек ашарға үҙебеҙ белербеҙ!"- тип уйланылар, ахырыһы. Әҙ ине шул улар, Мир ише ҡул көсө менән иген иккән, илде туйындырған ябай эшсе халыҡ юҡ иҫәбендә, күбеһе өҫтәл артында ыштан туҙҙырған, бойороҡ биреп, төртөп күрһәтеп кенә эшләтеп, олоғара йорттарҙа маҙырап йәшәгән түрә-ғара ине. Йә килбәтһеҙ йыуан, йә ҡарт, йә иҫ китмәле гүзәл йәш бисәләре менән. Улар инде сит илдең төрлөһөндә булған, мәрмәр баҫҡыстарҙан йөрөгән, диңгеҙ буйҙарында ҡомда ҡыҙынған, һөт өҫтөндәге ҡаймаҡтай йәшәгәндәр инструкцияны эшселәр кеүек ауыҙ асып тыңламаны, ирен сите менән йылмайып, ситтән күҙәтте. Улар өсөн былар барыһы ла таныш, көндәлек йәшәү рәүеше, күнегелгән сәйәхәт ине. Диңгеҙ буйҙарында түләп ял итһәләр, бында иһә аҡса сығармай, бушҡа ғына йөрөп ҡайтыу форсаты тейә. Айырма бары шунда ғына, буғай...

Өфөнән Мәскәүгә, Мәскәүҙән Брест аша Германияның баш ҡалаһы Берлинға тиклем поезда барҙылар. Юл оҙон, ваҡыт күп: юлдаштары менән таныштылар, кемдәрҙер дуҫлашты, айырыуса хәбәргә әүәҫ ҡатын-ҡыҙ серләшеп, оҙон-оҙаҡ, яп-яҫы ваҡытты ҡыҫҡартты. Ир-ат йә домино уйнаны, йә кәрт һуҡты, йә тамбурға сығып тәмәке көйрәтте. Яға аҫтына һалырға яратыңҡырағандар, сәй өсөн тәғәйен стакандарына йәшереп кенә градуслы эсемлектәрен ҡойоп, күңел асты. Унан инде кәйефтәре күтәрелеп, гәп һатырға кереште. Мир Зиннәтуллин иҫерткес эсемлектәрҙе бик ҙур ҡунаҡтарҙа ғына тәмләгән кеше булараҡ, ундайҙарға ҡатышманы, әммә һырт биреп, өндәшмәй ултырғандарҙан да түгел ине. Яҡшы кешеләр менән һөйләшеү, уларҙан ҡыҙыҡлы яңылыҡтар ишетеү, үҙе белмәгән әйберҙәр тураһында белешеү Мирҙы гел үҙенә тартып тора, шуға ла уҡымышлы, үҙ фекерҙәре булған, ғәйбәт-мәйбәткә төшмәй, үҙ кимәлен белеп аралашҡан кешеләр менән һүҙе бекте. Бигерәк тә Өфө менән Күмертауҙан килгән ике ир-ат менән ныҡ дуҫлашып китте ул, сөнки уларҙан үҙе белмәгәнде һорашты, аңлап етмәгән сәйәсәттең нескәлектәренә төшөнөргә тырышты. Улары ла төпсөр аҡыллы, һүҙҙәрен уйлап һөйләгән, ваҡлыҡтарҙы урап үткән, бисә-сәсә темаһына ҡағылмаған ирҙе ихтирам итте, тиңдәштәре күреп, үҙ төркөмөнә алды. Барғанда ла, ҡайтҡанда ла өс ир башҡаларҙан айырымыраҡ йөрөнө, уларҙың өсәүһенә бергә күңелһеҙ булманы.

Германияға барыуы беренсегә түгел Мир Зиннәтуллиндың. Тәүге тапҡыр бынан утыҙ йылдар самаһы элек, дөрөҫөрәге, егерме ете йыл элек барып, өс йыл хеҙмәт итеп, егерме дүрт йыл элек ҡайтҡайны ул немец еренән. Уның Германияла хеҙмәт итеүен белгәс, юлдаштары бараһы ил тураһында күберәк белергә теләп, унан төпсөнөп һорашырға кереште. Мир иңәлтеп торманы, белгәнен һөйләне. Ә күҙ алдына алыҫ йәшлеге килеп баҫты...

* * *

Армияға бер йыл алданыраҡ алынды Мир: ул донъяға ауаз һалған 1939 йылдың августында балаларға тыуыу тураһында таныҡлыҡ биреү тигән нәмә лә булмаған. Уҡытыусы булып эшләп йөрөгән атаһы Ғилман, көҙгө баҫыу эштәре бөткәс кенә улын силсәүиттә яҙҙырып ҡайтҡан. Атайлы булыу, атай ҡосағында үҫеү нисек була - бер мәлгә генә ошоно тойғоһо, атаһын бер ҡыҫып ҡосаҡлағыһы, "Атай!" тигән изге һүҙҙе әйткеһе килеү - үҫеп бауыр нығытҡансы йәшенеп кенә күҙ йәштәрен аҙ йотманы Мир. Еңеү көнөндә, унан аҙаҡ атайҙары һуғыштан ҡайтҡан малайҙарҙың шатланып һикерәндәүен, әсәйҙәренең балҡыған йөҙҙәрен күреү - уғата ауыр булды 6 йәшлек малайға. Һуғыш ваҡытында бөтәһе лә бер тигеҙ ине, бөтәһе лә атайһыҙ, бөтәһе лә ярым-ярты ғаилә. Еңеү килде, иҫән ирҙәр ҡайтты, кемеһе аҡһаҡ, кемеһе сулаҡ булһа ла, атай - атай инде. Ләкин Зиннәтуллиндарҙың ишеген асып инеүсе булманы: 1943 йылда Ҡырымда ятып ҡалды атаҡайының ғәзиз һөйәктәре... Әсәһе ике улын ике яҡтан ҡосоп, уларҙы йыуатты, әммә үҙенең күҙҙәренән туҡтауһыҙ ҡойолған йәште генә һөртөүсе кеше булманы...

Кесе улы мәктәпкә уҡырға барыр йәше еткәс кенә уларға метрика юлларға кәрәклеге мәғлүм булды. Ағаһы Римдән өс йәшкә кесе Мирға ни өсөндөр бер йыл өҫтәлеп, ике йәшкә генә "кесе" булып сыҡты. Шулай итеп алты йәштән уҡырға барҙы, буйға ла ҙур булғанғамы, бер кем дә уның ысын йәшен белешеп тә, һорашып та торманы. 17 йәшендә әрме сафына алынғанда ла зәп-зәңгәр күҙле, сөм-ҡара сәсле, киң яурынлы, оҙон буйлы егет башҡаларҙан һис тә кәм түгел, киреһенсә, буйсанлығы, ныҡлы кәүҙәһе, үткер ҡарашы менән айырылып тора ине. Әллә атайлы-арҡалы балаларҙан кәм булмаһындар типме, әсәһе ике улын да тәүәккәл, кәрәк ерендә әйтер һүҙен әйтеп, бер кемдән дә ҡурҡып тормаҫлыҡ ҡыйыу итеп үҫтерҙе. Үҙе лә батыр ҡатын ине шул, батыр булмаһа, ирле бисәләр араһында үҙен типә-тиң итеп тотор, үҙенә түшәк итеп ҡараған аҙғын ирҙәргә ҡаршы торор көс ҡайҙан алһын ул! Бер кемгә лә баш бирмәне, башын эйеп барманы, ас ултырһа ултырҙы, намыҫын тапламаны ғорур әсәкәйе. "Бейбаштаҡ! Ир-бисә һин!"- тигән, властың ҡулында тотҡан түрә-ғара ла яҡынлай, уны һындыра алманы. Төндәрен яҫтыҡ мөйөшөн тешләп, илап сыҡһа сыҡты, ике улына күҙ йәшен күрһәтмәне, мыжыманы, бахырланманы. Бәлки, шуға ла улары ла үҙ һүҙле, намыҫсан, әйткән һүҙенә тоғро булып буй еткергәндер? Былай булһа, ниңә бер ябай механизаторҙан - Мир Зиннәтуллиндан - ҡурҡып торһон маҙырап йәшәгән, донъяны дер һелкетеп тотҡан түрә-ғара?..

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

**"Ашҡаҙар" радиоһы республиканың Халыҡ ижады үҙәге менән берлектә "Ашҡаҙар моңдары" башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусы үҙешмәкәр йырсыларҙың I Республика конкурсын үткәрәсәктәре тураһында иғлан биргән саҡта, әлбиттә, уның күпселек тарафынан хуплап ҡаршы алынырына шик юҡ ине. Башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусы яңы талантлы йырсыларҙы табыу һәм асыу, билдәле һәм һирәк башҡарылған халыҡ йырҙарын һаҡлап алып ҡалыу һәр саҡ көнүҙәк булып ҡала килә.**

# ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ...

## боронғоларҙың аманаты булып яңғыраны

Шулай ҙа алда торған бурыстарҙың ябай түгеллеге лә асыҡ ине - Гәүһәр Батталова етәкләгән "Ашҡаҙар" радиоһы бындай ҙур конкурсты беренсе тапҡыр ойоштороҙо. Уны нисек ҡабул итерҙәр, ҡатнашырға теләүселәр күп булырмы, йыр маһирҙары ҡайһы яҡтарҙан һәм нисә йәштәгеләр булыр, тигәнерәк һорауҙар тыуып торҙо. Тәүәккәлләгән - таш ярған, һәр яңы эш асыштар һәм табыштар менән ҡиммәт. Ысынлап та, шулай килеп сыҡты ла. Иғлан бирелеү менән бер-бер артлы ғаризалар килә башланы. Төрлө тарафтарҙан 120-нән ашыу ғариза алынды.

Абруйлы баһалама ағзалары, республиканың билдәле шәхестәре Юлай Ғәйнетдинов, Тәнзилә Үҙәнбаева, Нәфисә Тулыбаева, Миләүшә Иҙрисоваға үҙешмәкәр йырсылар араһынан иң-индәрен һайлап алыуы еңел булманы. Шуны ла өҫтәргә кәрәк, улар финалға 21 башҡарыусыны "күрмәйенсә тыңлап" һайлап алдылар. Халыҡ йырҙарын башҡарыусылар Башҡортостандан ғына түгел, Силәбе, Ырымбур, Һарытау өлкәһенән дә килделәр. Финалға килеп еткән һәр йырсының йомғаҡлау концертында ҡатнашырға теләге шул тиклем көслө ине, уларҙың үҙҙәренә был ваҡытта ауырып китергә лә "рөхсәт итмәнеләр" һәм бөтөн башҡа мәшәҡәттәрен дә артҡа ҡуйҙылар.

"Ашҡаҙар моңдары" башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусы үҙешмәкәр йырсыларҙың I Республика конкурсы финалистарының концерты Башҡорт дәүләт филармонияһының ҙур залында гөрләп үтте. Концерт беҙ күнегелгән тәртиптән бер аҙ айырылып, йыйын рәүешендә барҙы, оҫталар сәхнәлә теҙелешеп ултырҙы. Шул яғы менән ул бик отошло ла килеп сыҡты: йырсы һәм тамашасы бер тулҡында булды. Моң, күңел нурҙары менән бергә тоташты улар. Финалистар барыһы ла "тере тауыш" менән йырланы.

Концерт залында башҡорт йырына ғашиҡ тамашасы йыйылғайны. Олоһон да, кесеһен дә халыҡ моңо берләштерҙе, рухландырҙы.

Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмзиә Хисамова үҙенең сәхифәһендә ошолай тип яҙып ҡуйҙы. Хәйер, ул күптәрҙең фекеренә ауаздаш: "Илаһи концерт! Моңға тулышҡан башҡорт ирҙәрен, башҡорт бикәстәрен күрҙем, бирелеп тыңланым уларҙы! Күҙ йәштәрем аша оло шатлыҡ кисерҙем. Ниндәй Илаһи моң, Илаһи кәүәт, көс Башҡорт йырҙарында! Рухланып ҡайттым! Ейәнем Асҡарҙы ла бергә алып килгәнемә нык ҡыуандым. Ҙур рәхмәт моңло радиобыҙ "Ашҡаҙар"ға, уның барлыҡ унған хеҙмәткәрҙәренә!"

"Каруанһарай" йырын башҡарып, Күмертау ҡалаһынан табип Ришат Вахитов беренсе урын яуланы. Халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусы булараҡ, йәмәғәтселек был уҙаманды яҡшы белә. Сираттағы еңеүе ошо хәҡиҡәтте тағы ла бер тапҡыр раҫланы ғына. Хәйер, финалға сыҡҡан һәр бер үҙешмәкәр йырсы - еңеүсе. Улар халыҡ йырҙарын үҙҙәре йәшәгән төбәктә пропагандалай, милләткә сәнғәт аша һөйөү тәрбиәләй. Башҡорт халыҡ йыры көслө идеология ҡоралы ла. Бөгөнгө еңел булмаған заманда ул боронғоларҙың беҙгә аманаты, тормошто раҫлау ауазы булып яңғыраны. Үлемһеҙ йырҙарыбыҙ халыҡты берҙәмлеккә, яуыҙлыҡҡа саҡырҙы.

"Ашҡаҙар моңдары" башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусы үҙешмәкәр йырсыларҙың I Республика конкурсы финалистарының концерты башҡорт халыҡ йыры "Урал" менән тамамланды. Сәхнә ҡурай моңона күмелде. Финалистар һәм тамашасылар аяғүрә баҫып, халҡыбыҙҙың мәшһүр гимнын башҡарҙы. Күптәрҙең күҙҙәрендә йәштәр емелдәне, күңелдәр ғорурлыҡ менән тулышты. Тарих менән бөгөнгө осрашҡанда, халыҡ йыры киләсәккә оран булып яңғырағанда тап шулай булалыр ул. "Ашҡаҙар" радиоһы етәксеһе Гәүһәр Батталоваға, уның хеҙмәткәрҙәренә ошондай матур сара ойоштора алғандары өсөн рәхмәт әйтергә генә ҡала. Әлеге проекттың дауамы, һис шикһеҙ, булыр тип ышанабыҙ.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

### Шағир ҡатыны булыу...

Бер саҡ шағирҙарҙың ҡатындары йыйылышып, бер-береһенә үҙҙәренең аһ-зарын еткереп ултырған икән. Был йәшерен йыйылышта шағирҙарға ҡатындары тарафынан шундайыраҡ дәғүәләр ҡуйылған:

- Беҙгә шағир ҡатыны булған өсөн "за вредность" түләүҙе юлларға кәрәк, әхирәткәйҙәрем, мәсьәләне Дәүләт Думаһына сығарырға кәрәк, - тигән бер өлкән шағир бисәһе.

- Уларҙан беҙҙең күргәнде дошманыбыҙға күрергә яҙмаһын. "Ите - һиңә, һөйәге - миңә" тигән һымаҡ, беҙ бит уларҙың халыҡ күрмәгән насар яҡтарын ғына күрәбеҙ. Ана, минеке, яңы шиғыр яҙһа, һиңә, тип алдаша, ә үҙенең итенә һөйәркәләре, шиғриәтен яратыусылары хужа. Миңә ҡаҡ һөйәккә ҡалғас ҡына ҡайтып йығыла, - тигән урта йәштәрҙәге шағир бисәһе.

- Минеке лә, ана, "халҡым ҡосағында йәшәйем", тип алдашып яҙа. Кем ҡосағында йәшәгәнен бик яҡшы беләм. Төнөгөн иртәнсәк кенә ҡайтып инде лә, үҙенең төндә йоҡларға ҡайтмағанын нисек аңлата, байғош: "Һуңғы ваҡыт ижад итергә илһам килмәй башланы, шуға күрә һине һағынып өсөн ҡайтманым", - ти. Үҙен әрләргә иткәйнем, бер һүҙ ҙә әйттермәй, үбергә тотонмаһынмы, - тип уларға ҡушылған йәш шағир бисәһе.

- Эй, әхирәткәйҙәрем, нисек кенә булһа ла, түҙәбеҙ инде, яҙмышыбыҙ шулай булғас, ҡайҙа барабыҙ. Әммә шуны ла онотмайыҡ: бар ҡатындар ҙа шағир ҡатыны була алмай, шағир ҡатыны булыу - ул профессия, - тип әхирәттәренең ауыҙын шапылдатып япҡан шағир Рәмил Йәнбәктең һөйөклө ҡатыны Зилә ханым...

### Һөйләшеп туймағандар

"Ағиҙел" журналының баш мөхәррир урынбаҫары Рәмил Йәнбәк менән яуаплы сәркәтип Гөлназ Ҡотоева редакцияла икеһе бер бүлмәлә ултыра. Бер мәл бухгалтерия ҡыҙҙары уларҙы эҙләп таба алмаған. Баҡтиһәң, "Ашҡаҙар" радиоһында тура эфирҙа үҙенең программаһын алып барыусы Гөлназ бүлмәләш коллегаһын тапшырыуға ҡунаҡҡа саҡырған икән. Радионы асып ебәрһәләр, улар тура эфирҙа әҙәбиәт һәм журнал хаҡында әңгәмәләшеп ултыра, имеш. Ошо саҡ журналдың баш мөхәррире Әмир Әминев тарихҡа инеп ҡалырлыҡ һүҙ әйткән:

- Һуң, уларҙың бер бүлмәлә йылдар буйы ултырып та һөйләшер һүҙҙәре бөтмәнеме икән ни?

### Иғлан

Башҡорт әҙәбиәтендәге иң ҡыҫҡа "Башкирский девственник" романы авторы Айҙар Хөсәйенов ошо әҫәрен башҡортсаға ауҙарыр өсөн махсус тәржемәсе эҙләй. Тағы ла шуныһы: тәржемәсенең нескә заттан кейәүҙә булмағаны мотлаҡ шарт. Ә ни өсөн романының шулай ҡыҫҡа икәнен Айҙар шулай аңлатыр, моғайын: "Хәҙер тиҙлек, мәғлүмәт заманы, дуҫтар. Кешенең хәҙер оҙон роман уҡып ултырырға ваҡыты юҡ. Икенсенән, ул ҡыҙҙың ҡасан оҙон романымды тәржемә итеп бөткәнен көтөп ултырырға минең дә ваҡытым юҡ. Ҡартайып бара...".

Тик был иғланды уҡыусылар бер нәмәне генә аңлай алманы: Айҙарға тәржемәсе кәрәкме, әллә кәләшме?

БАШҠОРТСА АТАМАЛАР



## ҠОШСОҠ, ИСЕМЕҢ НИСЕК?

***Ала ҡаҙ, ҡыр ҡаҙы -*** русса "серый гусь". Тәү ҡарашҡа йорт ҡаҙҙарынан айырылмай тиерлек - бары еңелерәк, шулай булғас, шәп йүгерә һәм бик шәп оса. Ауырлығы 2,1-4,5 кг, көҙгөһөн ҡайһылары 6 килограмғаса етә. Һуңғы йылдарҙа Башҡортостандың күпселек төбәктәрендә кәмеүе арҡаһында, 2004 йылда был ҡоштар "Ҡыҙыл китап"ҡа индерелгән. Ҡыр ҡаҙҙарының бүтән төрҙәре һәм уларҙың русса атамалары: сыбар ҡаҙ - гуменник; ҡашҡа ҡаҙ - белолобый гусь; сәңкелдәк ҡаҙ йәки ваҡ ҡашҡа ҡаҙ - пискулька; аҡ ҡаҙ - белый гусь.

***Һуна өйрәк -*** русса "кряква". Ҡыр өйрәгенең бер төрө, ҡыр өйрәктәре тибындағы ҡоштарҙан иң ҙуры һанала. Төҫө миҙгелгә ҡарап үҙгәрә: яҙғыһын ата һуна өйрәктең башы муйынға тиклем йылтылдап торған ҡуйы йәшел төҫтә була. Түше, арҡаһы - көрән, эсе аҡ төҫтә. Был ҡоштар әле республикала ярайһы уҡ киң таралған, ә бына ҡалған ҡыр өйрәктәре аҙайыуға табан бара. Әйҙәгеҙ, уларҙың башҡортса атамаларын һәм русса тәржемәләрен белеп, хәтерҙә ҡалдырайыҡ: ҡылғойроҡ - шилохвост; ҡашҡалаҡ, ҡашҡа өйрәк - свиязь; һоро өйрәк - серая утка; ҡашыҡморон - широконожка; һыҙғыраҡ сөрәгәй - чирок свистунок; кереләк сөрәгәй - чирок трескунок; ерәнсә сумғыс - красноносый нырок; сумғалаҡ өйрәк - красноголовый нырок; ала сумғыс өйрәк - хохлатая чернеть; ҡарабаш өйрәк - морская чернеть; мәрйенгүҙ - белоглазый нырок; эяла - морянка; боған, буған - гоголь; ҡарасабан - обыкновенный турпан; аҡсабан, аҡ өйрәк - луток; ҡушы, беле - длинноносый крохаль; ҡушбаш өйрәк, балыҡсы өйрәк - большая крохаль; аҡбаш өйрәк, ҡыҡ томшоҡ - савка.

***Сел, божор -*** русса "рябчик". Күгәрсендән күпкә ҙурыраҡ, ерән төҫтә, арҡаһынан сыбар тимгелдәр төшкән ҡош. Түшендә һәм эсендә ҡанаттары - ҡара, осо - аҡ төҫтә, ата селдәрҙең муйынында ҡара табы була. Ерҙән осоп киткән сағында бик ныҡ тауышлаһалар, уның ҡарауы, һауанан тауышыҙ ғына осоп төшөләр. Парлы йәшәйҙәр, йәй аҙаҡтары - көҙ башында ҙурайған себештәре менән бергә булалар. Ҡыш етһә, сатлама һыуыҡтар ваҡытында ҡарҙы "өңөп" ултыралар. Тауыш биреүенә килгәндә, ата ҡоштоң тауышы нескә генә һыҙғырыуҙы хәтерләтә. Башҡортостандың бөтөн урманлы райондарында ла йыш осрай.

***Һуйыр -*** русса "глухарь". Был ҡоштарҙың көҙгә ауырлығы ҡаҙҙыҡына тартым. Урман-тау зонаһында ярайһы уҡ йыш осрай.

***Бытбылдыҡ, бүҙәнә -*** русса "перепел". Бәләкәй (сыйырсыҡтан бер аҙ ҙурыраҡ) ҡош. Төҫөнә килгәндә, башлыса һоро төҫ өҫтөнлөк итә.

***Ҡыр тауығы -*** русса "серая куропатка". Ер өҫтөнән йүгереп йөрөүе, йәғни башлыса ерҙә - оҙон үлән йәки ҡыуаҡтар араһында көн итеүе билдәле.

***Тартай, тарттарт -*** русса "коростель". Беҙҙең халыҡта "Тартай теленән таба" тигән әйтем дә бар. Шулай итеп, был ҡоштоң үҙенсәлектәре шуларҙан ғибәрәт: уны ябай күҙ менән күреп булмай, тауышынан ғына танып, табырға була, тип яҙа белгестәр. Башҡортостандың йылға-күлгә, бейек үләнле сабынлыҡтарға бай райондарында йыш осрай.

***Аҡсарлаҡ, күл сарлағы -*** русса "озерная чайка". Билдәле бер йырҙа йырланғанса, "Ел бауырлап осҡан ҡоштар аҡсарлаҡ түгелме икән?" Был - ғәҙәти аҡсарлаҡ, ил буйынса бөтөн йылғалар буйында ла тиерлек осрай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рубриканың бөгөнгө яҙмаһына нөктә ҡуйыр алдынан гәзит уҡыусыларға бер һорау, үтенес менән мөрәжәғәт итке килә. Әйҙәгеҙ, ололар ауыҙынан ишетелгән, онотолоп барған һүҙҙәрҙе бергәләп тергеҙәйек. Мәҫәлән, өләсәйҙәр тел күберсегәндә тел аҫтына һалып торорға ҡушҡан әсе таш (әсеү таш) тураһында кем нимә белә, яҙып ебәреүегеҙҙе һорайбыҙ. Бәлки, ул таштың русса атамаһын белеүселәр барҙыр. Юғиһә, һуңғы бер нисә ай ҡыҙыҡһынып, ҡайһы бер ғилемле ағай-апайҙарҙан һораштырып йөрөлә, яуап табылмай.**

**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабын файҙаланып, Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 38, 39, 41-се һандарҙа).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ОЯЛСАН БУЛМА - ғүмерең ҡыҫҡарыр

■ Чикагоның (АҠШ) Төньяҡ-Көнбайыш университеты белгестәре әйтеүенсә, оялсан булыу йөрәк ауырыуҙарына килтереүе ихтимал. 30 йыл дауамында барған был һынауҙарҙа 2 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан. Ғалимдар яҙыуынса, әгәр кеше артыҡ оялсан икән, йөрәк өйәнәгенән үлеү хәүефе бермә-бер арта. Гел генә уңайһыҙлыҡ кисереүселәрҙең инфаркт ҡорбанына әйләнеүе 50 процентҡа юғарыраҡ була. Ғалимдар фаразлауынса, кешенең характеры баш мейеһенең йөрәк функцияларын үтәү өсөн яуап биргән өлөшөнә тәьҫир итә.

■ Йоҙоу менән шөғөлләнеү балаларҙы аҡыллыраҡ итә, тип белдерә The Epoch Times баҫмаһы Австралияның Гриффит мәғариф тикшеренеүҙәре институты хеҙмәткәрҙәре үткәргән тәжрибәгә таянып. Белгестәр өс йыл дауамында өс йәштән биш йәшкә тиклемге 180 баланы күҙәткән. Иртә йоҙорға өйрәнгән балалар башҡа һөнәрҙәрҙе, мәҫәләне, математиканы, телмәрҙе, һүрәт төшөрөүҙе, фигуралар ҡырҡыуҙы яҡшыраҡ һәм тиҙерәк үҙләштергән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың һәләттәре иртәрәк асылыуына уларҙың ҡайһы енестән булыуы ла, уларҙың ата-әсәләренең социаль хәле лә түгел, ә тап бассейндағы дәрестәр йоғонто яһаған.

■ Бонн университеты (Германия) ғалимдары асыҡлауынса, окситоцин гормоны ғаиләле ирҙәргә ҡатындарына тоғролоҡ һаҡларға ярҙам итә. Был гормон тәбиғи рәүештә гипоталамуста бүленеп сыға һәм партнерҙар араһындағы ныҡлы мөнәсәбәт өсөн яуап бирә. Был гормон кимәле төрлө кешелә төрлөсә. Эксперимент барышында тикшереүселәр ир-егеттәргә (никахта тороусыларына ла, тормағандарына ла) составында был гормон булған препарат тәҡдим иткән. Һөҙөмтәләр бик ҡыҙыҡлы ғына килеп сыҡҡан. Ғаиләһе булған ир-егеттәр сит ҡатын-ҡыҙҙарҙы урап тигәндәй үтә башлаған, ә ғаиләһеҙҙәр үҙҙәренең ҡылыҡтарын үҙгәртмәгән.

■ Немец ғалимдары тест ярҙамында тағы бер ҡыҙыҡлы асыш яһаған. Германияның Магдебург университетының бер төркөм тикшеренеүселәре 65 йәштән 75 йәшкә тиклемге ололар араһында тест һорауҙарына яуап алыу ойошторған. Был ҡарттарҙың яртыһына составында дофамин гормоны булған таблеткалар, яртыһына ошондай уҡ таблетка формаһында яһалған яҡай конфиттәр тараҡҡандар. Икенсе төркөмдөң күрһәткестәре таблетка ҡабул иткәнгә тиклем алынған һөҙөмтәләрҙән айырылмаған. Ә беренсе төркөм 20-30 процентҡа яҡшыраҡ һөҙөмтә күрһәткән. Ғалимдар әйтеүенсә, дофамин гормоны хәтерҙе яҡшырта. Шулай итеп, "бәхет гормоны" психикаға ғына түгел, тән өсөн дә файҙалы: хәтер, шулай уҡ баш мейеһенең когнитив функциялары яҡшырыуы кешене дегенератив ауырыуҙарҙан, мәҫәлән, Паркинсон, Альцгеймер ауырыуҙарынан да һаҡлай.

■ Огайо университеты (АҠШ) менән Мадрид автономлы университеты (Испания) насар уйҙар менән көрәшеүҙең тағы бер ысулын уйлап тапҡан. Улар әйтеүенсә, ҡайһы берҙә был кире уйҙарҙы ҡағыҙға яҙып, һуңынан ваҡ ҡына киҫәктәргә йыртып ташлау яҡшы һөҙөмтә бирә. Тәжрибә күрһәтеүенсә, кешеләр насар уйҙарын ҡағыҙға яҙып, сүп кәрзиненә ташлаһа, улар менән тиҙерәк хушлаша.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ЭСКЕЛЕК - ХУРЛЫҠ ТА УЛ...



### Аллаһыҙ-муллаһыҙ заманда үҫкәндәр...

Һуңғы ваҡытта эскелек тураһында яҙмаған матбуғат баҫмаһы, уның насар эҙемтәләре хаҡында һөйләмәгән радио-телевидениеның бер генә көнө һәм тапшырыуы ла ҡалмағандыр. Һөйләйбеҙ, яҙабыҙ, дәүләт төрлө-төрлө ҡарарҙар ҡабул итә, тыя, "Айыҡ ауыл" конкурстары үткәрә, штрафтар һала - әммә был афәтте туҡтата алмайбыҙ. Кем эскән - һаман эсә бирә, кем иҫерткес һатып аҡса эшләй - әле лә кеҫәһен ҡалынайта, кем эскелеккә ҡаршы көрәшә - көрәшеп маташа. Ел тирмәне менән алышҡан Дон Кихот кеүек булһалар ҙа, эҙмә-эҙлекле айыҡ тормошто пропагандалаған, һүҙе менән, үҙ үрнәге менән сәләмәт йәшәү рәүешен күрһәткән кешеләр барлығы ғына күңелде йылыта йылытыуын...

Кемдәр "Киске Өфө" гәзитен йә "Ағиҙел" журналын яҙҙыра, улар танылған яҙыусы һәм журналист Әхмәр Үтәбайҙың нисек итеп эскелек һаҙлығынан ҡотолоуы тураһында яҙған "Ялған ғорурлыҡты, шул хурлыҡты яра һуҡтым Урал ҡаяһына" тип аталған мәҡәләһен, моғайын, иғтибарҙан ситтә ҡалдырмағандыр ("Ағиҙел", 2018 йыл, № 6 - 7). Унда Әхмәр Үтәбай менән уның дуҫы Исмәғзәм Исмәғилев оҙаҡ йылдар дауам иткән эскелек сиренән арыныу тарихтарын, нимәләр кисереүҙәрен, нисек көрәшеүҙәрен тәфсирләп - көнләп, сәғәтләп һүрәтләгән. Ауыр, сиктән тыш ауыр был сирҙән арыныу. Ҡайһы берәүҙәр, бигерәк тә ихтыярһыҙҙар өсөн, бәлки, ҡулынан килерлек тә эш түгелдер. Ләкин ике автор үҙ миҫалында был "заман ауырыуы"нан ҡотолорға мөмкин икәнлеген күрһәтте. Иҫбатланы. Кем был мәҡәләләрҙе күрмәгән, зинһар өсөн, табып алып уҡығыҙ. Уйланығыҙ. Йәштәргә, балаларға уҡытығыҙ. Бер билдәле генә шәхес: "Кемдәр эскелек һаҙлығына батҡан, улар менән көрәшеп ваҡытығыҙҙы, һаулығығыҙҙы бөтөрмәгеҙ, уларҙы тәҙәтеү мөмкин түгел. Эскеселәр эсеп үлеп бөтөр ул бер заман, ә киләсәк быуынды, балаларҙы, йәштәрҙе был зәхмәттән аралайыҡ!" - тип әйткәйне бит әле. Ваҡытында был һүҙ нисектер үтә тура, үтә тупаҫ яңғыраған кеүек ине, күңелде телеп үткәндәй булғайны. Әммә... ысынлап та эсеп үлеүселәр күбәйгән һайын, ошо һүҙҙең дөрөҫлөккә бик яҡын икәне күҙгә ташлана башланы...

"Аллаға шөкөр, эскелек кәмене", - тип шатландырҙы ауылда йәшәгән бер дуҫым. Кеше тырышып донъя көтә башланы, бер-берәһен уҙҙырырға тырышып йорт һала, сиркә эшкә йөрөй, балалар үҫтерә..."

"Башҡорт ауылдарында, бигерәк тә бәләкәй ауылдарҙа эскелек көслө, - тине икенсе бер танышым. - Ҙур ауылдарҙа әллә кеше күп булғанғамы, ул хәтлем беленмәй. Бәләкәй ауылға барһаң - урам тулы иҫерек..."

Ике төрлө ҡараш, ике фекер. Улар менән байтаҡ һөйләштем, бәхәсләштем, һүҙҙәренең дөрөҫлөгөн иҫбатларлыҡ дәлилдәр килтереүҙәрен һораным. Икеһе лә килтерҙе. Тәүге дуҫымдың раҫлауҙары барыбыҙ өсөн дә һөйөнөслө булғас, ул темаға ҡалдырып торайыҡ. Икенсе танышым Ф. иһә ҡыҙыҡ ҡына тәҡдим яһаны:

- Әйҙә, иртәгә минең менән фәлән ауылға. Үҙ күҙең менән күрерһең...

Ул йәниҫәп (перепись) ваҡытында иҫәп алыусы булып йөрөй ине. Мин уға эйәрҙем. "Каланан килгән хәбәрсе. Һорауҙарына яуап бирегеҙ, тартынып тормағыҙ, бөтәһе лә аноним. Фән өсөн кәрәк", - тип таныштырҙы минең менән Ф.

Ауыл халҡы элекке кеүек оялсан, баҙнатһыҙ түгел хәҙер. Бер кем дә ыҡ-мыҡ итеп торманы, һәүетемсә һөйләштеләр, сәйгә саҡырҙылар, бәхәсләшеп, тиргәшеп киткәндәр ҙә осраны. Быларға аптыраманым - заман башҡа, кешеләр ҙә бүтән. Ә иҫеректәрҙең күп булыуы, ысынлап та, аптыратты.

Был бәләкәй генә ауылда утыҙға яҡын өй. Яңғыҙ ғына әбей йә бабай көн иткән йорт юҡ: барыһында ла йә парлы, йә яңғыҙ өлкән кеше бала-сағалары, ейән-ейәнсәрҙәре менән йәшәй. Шулар араһында бер генә эсмәгән кеше лә юҡ икән. "Эсмәй" тигәндәре лә ҡунаҡ-фәләндә бер-ике рюмка тотоп ҡуя, ти.

Өй беренсә күҙ һалайыҡ, булмаһа. Ауыл осонда күркәм генә йорт: ике балаһы менән 35-40 йәштәрҙәге ғаилә йәшәй. Ҡатын кеше әҙ-мәҙ генә тотҡолай икән, ә ир кеше, үҙе әйтмәксе, егерме йыл туҡтамай эскән, балалары нисек үҫкәнен дә күрмәгән. Шунан бер айныға́п киткәнендә ғүмеренең бушҡа үтеп барыуын, тормошоноң бер маҡсатһыҙ, күңелһеҙ булыуын аңлап, эсеүҙе ташларға ҡарар иткән. Ысынлап та, ташлай алған бит! "Бына биш-алты йыл эсмәйем, йәшәүе ҡыҙыҡ, нисек тә булһа аҡса эшләп, тәмле-томло ашап йәшәй башланыҡ", - тине ул ипле генә ғорурлыҡ менән. Мин дә ғорурландым: бына бит - теләгән кеше ҡотола ала ла баһа был һаҙлыҡтан!

Был матур ғына ир менән ҡатын янынан киткәндә Ф.-ға үҙемдең шатлығымды, улар тураһында гәзиткә яҙып, өлгө итеп ҡуйырға кәрәклеген әйттем. Әммә Ф. минең һөйөнсөмдө бер һүҙ менән генә һүндерҙе - әйтерһең, дөрләп янған утҡа һыу һипте: "Эйе, эсеүен ташланы! Зату бөтөн ауылды технический спирт менән ағыулап ята! "Нисек тә булһа аҡса эшләп" тигән була бит әле! Рәхәт кенә эшләй аҡсаны - ҡумартәләп 20 литрлыҡ кәнистр менән спирт алып ҡайта ла, һыу өҫтәп, шешәгә, "полтарашка"ға йәки беҙҙенсә, "ваучер"ға тултырып һатып, байып ята. Үҙе генә эсһә яҡшыраҡ булыр, бер үҙе ағыуланыр ине, хәҙер бар халыҡты ағыулай!" Әйтер һүҙ тапманым...

Икенсе өйҙә бабай менән әбей һәүетемсә генә йәшәгән кеүектәр. Оялсан ғына яуап ҡайтаралар. Әммә икеһе лә төшөрөүҙән баш тартмай булып сыҡты. "Беҙ ни, аллаһыҙ-муллаһыҙ заманда үҫтек бит, ғүмер эш менән үтте. Совхоздың ҡара эшендә эсмәйенсә йәшәрлек түгел ине. Өйрәнелгән, күнегелгән, хәҙер беҙҙе - бөкөрөнө ҡәбер генә төҙәтер инде", - тигән һүҙҙәр ни өсөндәр йәнде әрнетеп үтте. Йәл дә кеүек ине үҙҙәре. Ҡалған ғына ғүмерҙәрен эскелекһеҙ үткәрһәләр, күпкә матурыраҡ, мәғәнәлерәк булыуын үҙебеҙсә аңлатып маташтыҡ та... "Белмәйем, улайтып йәшәп ҡарамағас... Беҙҙең ни шатлыҡта ла, ҡайғыла ла шул берике рүмкә инде, артыҡламайбыҙ былай..." Артыҡламайҙар, "мәҙәниәтле" генә эсәләр булып сыҡты инде...

Өсөнсө өйҙә йәшәгән йәш ғаиләлә дүрт бала үҫә. Йорттары матур, таҙа, ҡараулы. Әммә ата-әсә икеһе лә лайыҡыл иҫерек ине. Ир кеше хатта беҙҙең һорауға аңлайышлы һүҙ ҙә әйтә алманы. Ҡатыны иһә сытырлап тора: эт еймәҫ һүҙҙәр менән әрләп сығарҙы. Ауылда эш юҡлыҡтан, сельсоветтың йәштәрҙе ҡарамауҙарынан, социобестың күп балалы ғаиләләргә пособие бирмәүенән башлап, Хәбировка, Путинға тиклем барып етте. "Буштан-буш аҡса туҙҙырып, перепись эшләп йөрөгән" беҙ гәйепле икән бөтәһенә лә!

Дүртенсеһендә ағалы-ҡустылы ике ир йәшәй: береһе хаҡлы ялда, икенсеһе лә 50-не үткән. Тапҡан-таянғандары эсеүҙән ары үтмәй. Пенсия аҡсаһы килһә, он, кәнфит-шәкәр кеүек әйбер алып ҡалалар ҙа, ҡалғаны төпһөҙ шөмәнгә китеп тик ултыра. Асыға башлаһалар, шабашкаға сығалар: кемгә утын яралар, кемдең тиреҫен түгәләр, яҙҙан көҙгә тиклем арауыҡта кемгәлер көтөү көтөргә яллаһалар...

Бар ауыл шулай... Эскелек менән "күңелле генә" йәшәп тик яталар...

## Яҙылмаған мәҡәлә

Был инәйҙе ситтән генә ҡарап, гел һоҡлана инем. Бөтөн байрамдың уртаһында: күмәк бейеүҙәр, йырҙарҙа ҡатнаша, райондағы мәҙәни сараларҙың ҡап уртаһында йөрөй. Бер нисә тапҡыр һөйләшеп торорға ла тура килде, "Һеҙҙең турала гәзиткә яҙырға ине!" - тигән теләгемде лә еткерҙем. Инәй шатланып китте, ауылын, урамын, өй һанын әйтеп, ҡунаҡҡа саҡырҙы. Гәзит эше шулай: конвейер шикелле, көн дә яңы һан янып бара, береһен эшләп, шатланырға ла өлгөрмәйһең, икенсе номерға материал тип йәнә сабып сығып китәһең. Ул арала районға баш ҡаланан берәй министр килә, артынан ҡалмай йөрөп, репортаж эшләйһең, икенсе ерҙә конкурс бара, өсөнсөһөндә спорт ярышы...

Был инәй тураһында онотоп ебәргәнмен. Бер нисә тапҡыр ауылдаштары ла, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре лә иҫкә төшөрҙө, үҙен дә төрлө сараларҙа тағы тап иттем. Һаман барып сыҡмауым өсөн ғәфү үтенеп, нисек булһа ла ваҡыт табып килергә һүҙ бирҙем. Ниһайәт, бер ял көнөмдә барырға булдым инәй янына. Шылтыратып әйттем, өйҙә булыу-булмауын белештем, сөнки ул әүҙем кеше йә берәй яры сығып киткәндер. Өйҙә икән, ҡыуанысы тауышынан беленде.

Алыҫ ер булһа ла, киттем көҙгө бысраҡты йырып. Асфальт юл түгел, шоссе ла юҡ, бары ябай юл. Йәй көнө бик матур тәбиғәтле юл көҙгө бысраҡта бер ҙә илаһи тойолманы. Сәғәттән ашыу барырға икән...

Йәтеш кенә йорт, эсе лә, тышы ла хужабикәһе кеүек йылдар занына күмелгән, иҫкергән. Ишек алды таҙа, аунап ятҡа әйбер юҡ, һәр нәмә үҙ урынында. Өйҙөң эсе лә, иҫке генә булыуға ҡарамаҫтан, йыйнаҡ, таҙа, ялт итеп тора. Тик нимәлер етмәгән төҫлө тойолдо миңә. Нимә икән? Заманса зауыҡлы йыһаз-фәләнме? Юҡтыр... Инәй кешегә улар килешмәҫ тә кеүек...

Йылы өй, ҡунаҡсыл хужабикә, тәмле аш еҫе танауҙы ҡытыҡлай. Инәйҙең тура өҫтәл артына ҡыҫтауына ҡарамаҫтан, минең өсөн бындай ҡара көҙҙә, ҡараңғы урман төпкөлөнә килтергән йомошом иң мөһиме: эш бөткәс, уйнарға ярай. Өҫтәлгә блокнотым, ручкам сығып ята, диктофон тоҡандырыла. Алдан уйлап, күҙаллап килгән һорауҙар, инәйҙең моңло ғына тауыш менән уларға яуаптары, һуғыш осорона тура килгән бала сағы, етемлек, аслыҡ, өс класс ҡына уҡыу, ғаиләһе тураһында һөйләүҙәре... Бабайының вафатына ла ун йылдан ашҡан икән.

- Яңғыҙ йәшәүе ауыр түгелме? Мал көтмәйһегеҙҙер? - тигән һорауға инәй алсаҡланып китә:

- Юҡ, балам, малды күптән бөтөрҙөк. Ҡайҙа уны ҡарау! 85 йәш бит инде миңә! Бабай бар саҡта уҡ, етмешкә яҡынлағанда эре малды бөтөрҙөк, унан һарыҡтарҙы. Хәҙер ана тауыҡтарымдан башҡа йән әйәһе юҡ, - ипле генә кеткелдәп көлөп ала. - Үтә яңғыҙ ҙа түгелмен мин, кинйә улым менән бергә торам бит.

Баҡтиһәң, инәйҙең ике улы, ике ҡыҙы булып, өсәүһе төрлө ҡалаға таралышҡан, кинйә улы атай нигеҙендә йәшәй икән.

- Өйләнгәндер? Бала-сағаһы бармы? - тип төпсөшөүҙе дауам итәм. Сөнки өйҙә бала-сағаның кейемфәләне лә, уйынсыҡ, китап-дәфтәр кеүек әйбер ҙә күҙгә салынманы.

- Өйләнгәйне лә, бер балалары булғайны. Килен нимәнәлер мөрхәтһенмәй, балаһын алып ҡайтып китте. Бынаһы уның артынан берике барып ҡараны ла, юҡ, ыңғайлата алманы, - тип көрһөндө әңгәмәсем.

- Үҙегеҙ араларын яйлап ҡарамаһығыҙмы? Сәбәбен асыҡлап, ярҙам итеп ебәрһәгеҙсе... - тигән кеүегерәк кәңәш тә биреп маташтым.

- Сәбәбе ни ... билдәле инде - эскелек. Ныҡ эсә шул улым... Башҡалары ла эсмәй тип әйтеп булмай, ҡунаҡ-мунаҡта, байрам-фәләндә эсештерәләр. Тик нурмаһын беләләр. Ә төпсөгөм бер башлаһа, ҡуя белмәй. Әйткәндә лә аңламай, әрләгәндә лә, туҡмағанды ла. Хатта бер мәл туҡмап та ҡараным... Әлек әле ул, бабайым бар саҡта... Намаҙ уҡыған һайын Аллаһы Тәғәләнән һорап, доғалар ҡылам, буш булған һайын тәсбих тартып һорайым... Юҡ, ҡуйҙырып булмай... Әллә ҡайҙан килеп сыҡты шул афәт өйөмә, балаларыма... Кеше ҡайғыһын кеше белмәй, үҙ башына төшмәһә, тигән кеүек, был ҡайғыны кемгә һөйләргә лә, кемдән яҡлау табырға? - тигән һүҙҙәренә үҙҙәренә йәш тәйөлдө...

Эскелектең эҙемтәләре, нимәгә килтереүе, былай ҙа аҙ һанлы халҡыбыҙҙың шул заман сиренән ҡырылыуы тураһында байтаҡ ҡына әсенешеп һөйләшеп ултырҙыҡ. Инәйҙең мәктәптәге, йәшлектәге, эштәге, ғаиләһендәге күмәкләп тә, берешәрләп-икешәрләп тә төшкән фотоһүрәттәрен дә онотоп, эскелек хаҡында оҙон-оҙаҡ яп-яҫы әңгәмә сурыттыҡ. Ваҡыт та һиҙелмәне, кис етеүен дә аңғармағанбыҙ. Ҡалайтып ҡына баш тартһам да, инәй көсләп, өҫтәл артына ултыртты. Күптән һыуынған ашын йылытты. Тәмле тауыҡ ите менән һалманы маҡтай-маҡтай ашап ултырам. Инәй ҡапыл ниҙер иҫенә төшөрөп, түрбашҡа, мейес артына инеп китте.

- Алйот! Үәт дүрәк тимә инде шул кешене! Онотҡанмын! Ҡунаҡ һыйлай берәү! - Ул шалт иттереп өҫтәлгә бер ярты араҡы ултыртты. Мин аҫҡан ауыҙымды яба алмай ҡаттым. - Араҡығыҙ ҡунаҡ буламы ни ул? Әйҙә, аш алдынан берәрҙе! - Ул боронғо ҡырлы рюмкаға тултырып араҡы һалды. Мин ни ҙә булһа өндәшкәнсе, инәй ялт итеп бер генә йотоп та ҡуйҙы. Бөтөргәнсе...

Минең аптырап, иҫем китеп ултырыуыма ла иғтибар итмәй, көсләшеүен дауам итте:

- Бер рюмканы ни, врачтар ҙа эсергә ҡуша! Ана теге артист, кем әле исеме, хәтерендә... эсеүен ташлап ҡына, әрәм булып үлеп ҡуйҙы бит!.. Рулдәмен тип ҡурҡма. Был яҡта гаишниктар йөрөмәй ул! Кем һине тотһон! Туҡратһа ла, бисә-сәсәне еҫкәтеп, өрҙөрөп тормайҙар инде!

Мин ауыҙыма ҡапҡан ашты йота алмай бер булдым. Тәме лә, таты ла ҡалмағайны инде. Шым ғына тороп, мейес артындағы ҡулйыуғысҡа барып, ауыҙымдағын сығарып, сүп биҙрәһенә төшөрҙөм дә, ауыҙ-ҡулымды сайып, сығырға йүнәлдем. Өйгә нимәлер етмәгәнен ингән саҡта уҡ тойғайным бит! Ҡот етмәгән икән уға, ҡот!

- Инәй, эскелектең башын ситтән эҙләмәгеҙ! Ул бит үҙегеҙҙә! - тинем сығып барышлай. Инәйем аптырап тороп ҡалды. Аңланымы минең ни әйтеүемде - юҡмы... Йөҙгә сибәр, йәмәғәт эшенә әүҙем, эшкә маһир был инәй тураһында шулай ҙа мәҡәлә яҙа алманым. Ҡулым да, күңелем дә тартманы...

**Сафия ХӘСӘНОВА.**
**Йылайыр районы.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Менталь кимәлдәге эш ҡағиҙәләре

**3. Уйлап эш итеү.** Уйлау - ике яҡ хәрәкәтле урам. Тәү сиратта, әңгәмәсегеҙҙең ҡарашында нигеҙ эҙләгеҙ. Был - уның ҡарашы, һеҙҙеке түгел. Һуңынан уйығыҙҙа ғына үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы баһалағыҙ. Һәр позицияла үҙенең "эйе" һәм "юҡ"тары йәки ыңғай һәм кире яҡтары булыуын табырығыҙ. Уларҙы сағыштырығыҙ, үҙегеҙҙең һәм әңгәмәсегеҙҙең дәлилдәренең ыңғай һәм кире яҡтарын үлсәгеҙ. Фекер алышҡан темаға айыҡ аҡыл менән ҡарағыҙ.

**4. Ихтыяж.** Үҙегеҙҙең ихтыяжығыҙҙы баһалағанда шундай күҙлектән ҡарағыҙ: әгәр уны ҡәнәғәтләндерһәм, күпме проблема хәл ителәсәк? Башҡа ауырлыҡтар менән нимә буласаҡ? Бер проблема хәл ителһә, ҡайһы берҙә уның артынса уҡ башҡалары ла юҡҡа сыға. Үҙегеҙҙең ихтыяжығыҙҙы ҡәнәғәтләндергәс, тоясаҡ "бәхет сылбырын" оҙонораҡ итеп тәҙөргә тырышығыҙ, уға мөмкин булған тиклем күберәк кешене йәләп итегеҙ.

**5. Килешеү.** Үҙегеҙҙә әңгәмәсегеҙгә ҡарата ыңғай фекер тыуҙырығыҙ. Әйҙә, ул да ҡаршы тороу һәм дошманлыҡ тойғоларын ҡыуып сығарһын, һеҙ икегеҙ ҙә проблеманы хәл итеү юлын эҙләйһегеҙ.

Хәҙер һеҙ уйығыҙҙа ғына икенсе кешенең "эсенә инеп", уның кәйефен, тойғоларын үҙегеҙ теләгән яҡҡа борорға һәләтле. Был күнекмәне эшләр алдынан инструкцияны яҡшылап иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

**Нисек итеп икенсе кешенең тойғоларын үҙгәртергә?**

• Ҡулығыҙға был кешенең фотоһүрәтен алып, тәнегеҙҙе көсөргәнештән арындырығыҙ. Аныҡ һүрәт булмағанда, уйҙағы образды файҙаланығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ.

• Биш ҡағиҙәне теүәл үтәгеҙ: был кешене яратығыҙ, уны аңлағыҙ, уның аңлатмаларына үтеп инегеҙ, уртаҡ ихтыяждарығыҙҙы баһалағыҙ, уның менән бәйләнеш тойоғоҙ.

• Уйығыҙҙа ғына был кешенең менталь кимәлдә үҙегеҙ менән килешеүен үтенегеҙ. Уға мөрәжәғәт иткәндә яғымлы булығыҙ, бойороҡтар бирмәгеҙ.

• Көсөргәнештән арынған халәттән сыҡмайынса, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ, фотоһүрәтҡә ҡарағыҙ. Был кеше һеҙҙең менән ризалаша тип күҙ алдына килтерегеҙ. Күҙҙәрегеҙҙе ҡабат йомоғоҙ.

• Биш ҡағиҙәгә: һөйөү, аңлау, уйлап эш итеү, ихтыяж һәм раппорт теүәл үтәлеүенә инанығыҙ.

• Көсөргәнештән арыныуҙы туҡтатып аңлашмаусанлыҡтар юҡҡа сыҡҡанына ныҡлы ышанып, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Башҡаларҙың тормошон яҡшыртырға ярҙам иткән һайын үҙ тормошоғоҙ яҡшыра бара. Бындай халәт һеҙгә автоматик рәүештә күҙгә күренмәҫ терәк килтерә.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

## КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# ИММУНИТЕТТЫ...

## нисек нығытырға?



**Көҙ тамамланып килгән миҙгелдә һаулыҡҡа яйырыуса иғтибарлы булыу кәрәк. Һауа температураһы көндән-көн түбәнәйә, тәүлектең яҡты өлөшө лә ҡыҫҡара. Тышта йә ямғыр яуа, йә көслө ел иҫә - бындай саҡта иртән йылы юрған аҫтынан сыҡҡығыҙ ҙа килмәйҙер. Етмәһә, тап ошо ваҡытта һалҡын миҙгелдәр өсөн хас булған вируслы сирҙәр әүҙемләшә. Организмға быларҙың барыһы менән көрәшергә нисек ярҙам итергә һуң?**

• Йыш арыу, даими рәүештә көсөргәнештә булыу иммунитетты түбәнәйтә. Әлбиттә, тормошта күңелһеҙ осраҡтар ҙа йыш осрай, тик шулай ҙа көн һайын насар кәйефтә йөрөү яҡшы түгел. Бәлки, һеҙгә тормошоғоҙҙа нимәнәлер үҙгәртергә ваҡыт еткәндер? Шулай уҡ йылы ванна, иртәрәк ятып йоҡлау ҙа арыуҙы еңергә ярҙам итә.

• Табиптар белдереүенсә, иммун системаһы аҡһымды күп ҡуллана. Иммунитет һәр сиргә лайыҡлы яуап бирә алһын өсөн организм бер нисә миллиард яңы күҙәнәк һәм аҡһым эшләп сығарып тора. Беҙ ни тиклем дөрөҫ туҡланабыҙ, ризыҡыбыҙ витаминдарға бай була - шул тиклем организмға иммунитетты һаҡлауы еңелерәк. Ҡыҫҡаһы, өҫтәлегеҙҙә аҡһымға бай аҙыҡтар - ит, һөт ризыҡтары һәм емеш-еләк, йәшелсә күберәк булһын.

• Һарымһаҡ, һуған, йәшел тәмләткестәр, брокколи кәбестәһе, кишер, сәй, имбирь - быларҙың барыһы ла иммунитетты нығытырға мөмкинлек бирә. Етмәһә, һарымһаҡ, һуған һәм имбирь тәбиғи антисептик иҫәпләнә.

• Әгәр ҙә фатирығыҙҙағы һауа таҙараҡ булһын тиһәгеҙ, ароматерапияға мөрәжәғәт итегеҙ. Сәй, бөтнөк, эвкалипт, кипарис майҙары һауалағы вирустарҙы бөтөрә.

• Һыуыҡта, гәҙәттә, өйҙә генә ултырғы килә. Ә был миҙгелдә, киреһенсә, йышыраҡ хәрәкәт итеү кәрәк. Йүгереү, бассейн, фитнес, спорт секциялары иммунитетты нығытыусы саралар.

• Тәнде сыныҡтырыу ҙа беҙҙе сәләмәт итә. Һыу менән ҡойоноу миҙгел сирҙәренә ҡаршы торорға булышлыҡ итә.

• Кәйеф гел күтәренке булырға тейеш, шул саҡта бер сир ҙә йоҡмаясаҡ. Шуға ла, сәләмәт булам, тиһәгеҙ, яҡшы кәйефтә булығыҙ.



## 14 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Баренцево море". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 14.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 6.00 "Это моя профессия". [12+]**
**12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 19.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.55 Хоккей. "Толпар" (Уфа) - "Локо-76" (Ярославль). МХЛ.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Счастливый час. [12+]**
**1.45 Спектакль "Прости меня". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

## 15 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Баренцево море". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Ете егет. [12+]**
**10.45 Специальный репортаж. [12+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**17.00 "Дорога к храму". [0+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 "Елкән". Первый телевизионный конкурс юных музыкантов. [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Сочи" (Сочи). КХЛ.**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**23.30 История одного села. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Счастливый час. [12+]**
**1.45 Спектакль "Перед свадьбой". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

## 16 НОЯБРЯ СРЕДА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Баренцево море". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 18.00, 23.00 Автограф. [12+]**
**10.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00 Тормош. [12+]**
**17.00 "Это моя профессия". [12+]**
**17.45 "Орнамент". [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Счастливый час. [12+]**
**1.45 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 17 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.30 Вести. Местное время.
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Баренцево море". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**23.00 Д/ф "Женщина, излучающая свет". [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Счастливый час. [12+]**
**1.45 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Дорога к храму". [0+]**

## 18 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Дуэты. [12+]
23.45 Улыбка на ночь. [16+]
0.50 Х/ф "Держи меня за руку". [16+]
4.06 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 История одного села. [12+]**
**12.15, 15.45 Патриот РФ. [12+]**
**12.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**15.00 "Городок АЮЯ". [6+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**16.00, 6.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00, 4.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**19.00 "Честно говоря". [12+]**
**19.45, 20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.15 История признания. [12+]**
**22.00 "Бай". [12+]**
**23.00, 3.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Колесо времени. [12+]**
**1.15 Спектакль "Голубушки мои". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## 19 НОЯБРЯ СУББОТА

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Под одной крышей". [12+]
0.45 Х/ф "Сердечные раны". [12+]
4.00 Х/ф "Любовь по расписанию". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 19.00 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 "Это моя профессия". [12+]**
**9.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**9.30 "Гора новостей". [6+]**
**9.45 "Елкән". Финал и Гала-концерт Открытого телевизионного конкурса юных исполнителей башкирской классической музыки. [6+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск). КХЛ.**
**19.30, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 0.00 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.45 "Башҡорт йыры-2021". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**1.30 Спектакль "Галиябану". [12+]**
**3.15 Финликбез. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Тормош. [12+]**

## 20 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### РОССИЯ 1

5.30, 2.30 Х/ф "Осторожно! Вход разрешён". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.00 Вести.
12.00 Х/ф "Кузница счастья". [12+]
17.00, 19.00 Песни от всей души. [12+]
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.17 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [0+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз).**
**9.30 "Бай". [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.00, 4.15 "Честно говоря". [12+]**
**16.45 "Дорога к храму". [0+]**
**17.15, 2.30 Историческая среда. [12+]**
**17.45 "Ашҡаҙар моңдары". Заключительный этап I Республиканского конкурса среди самодеятельных исполнителей башкирских народных песен. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**20.30 Патриот РФ. [12+]**
**20.45 Дознание. [16+]**
**21.00, 22.30, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 2.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Спектакль "Великий обольститель". [12+]**
**2.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## *СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**17 ноябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина инсц.). 12+
**18 ноябрь "Әсмә"** (Р. Фәхретдин, Ш. Шәкүрова инсц.), драма. 12+
**19 ноябрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова), мелодрама. 18.00 16+
**20 ноябрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16 ноябрь "Арба"** (Зөһрә һәм Таңсулпан Бураҡаевалар), әкиәт. 11.00 6+
**18 ноябрь "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**19-20 ноябрь Премьера! "Золушка"** (В. Щербакова). 12.00, 15.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**15 ноябрь "Владимирская Русь"** бейеү концерты. 6+
**18 ноябрь "Уралтау моңдары"** концерт. 6+
**19 ноябрь "Музыку слушаем вместе"**. 11.00 0+
**20 ноябрь "Йыр көсө"** концерт. 18.00 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**19 ноябрь "Тормош - ҡуласа"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+
**20 ноябрь Премьера! "Сын земли"** бейеү театры. 12.00 0+
**"Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**14 ноябрь Премьера! "Һәбәт ҡыҙыҡай Лида"** (А. Ивашкин), трагикомедия. 13.00, 15.00, 19.00 12+
**15 ноябрь "Абау, димсе килә!"** (С. Сурина), музыкаль комедия. 16+
**16-17 ноябрь "В стародавние времена"** (М. Багаев), музыкаль-юмористик әкиәт. 10.00 0+
**18 ноябрь Премьера! "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов, Г. Саламатова инсц.), шиғри драма. 12+
**19 ноябрь "Дюймовочка"** (Г.Х. Андерсен), әкиәт. 13.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Ноябрь (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (19) дүшәмбе | 7:16 | 8:46 | 13:30 | 15:25 | 17:13 | 18:43 |
| 15 (20) шишәмбе | 7:18 | 8:48 | 13:30 | 15:23 | 17:11 | 18:41 |
| 16 (21) шаршамбы | 7:20 | 8:50 | 13:30 | 15:22 | 17:10 | 18:40 |
| 17 (22) кесе йома | 7:22 | 8:52 | 13:30 | 15:21 | 17:08 | 18:38 |
| 18 (23) йома | 7:24 | 8:54 | 13:30 | 15:19 | 17:07 | 18:37 |
| 19 (24) шәмбе | 7:26 | 8:56 | 13:30 | 15:18 | 17:05 | 18:35 |
| 20 (25) йәкшәмбе | 7:28 | 8:58 | 13:30 | 15:17 | 17:04 | 18:34 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҺЕҘ ЯРАТҠАН РУБРИКАЛАР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**43-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Келәт. Айғолаҡ. Ғамзатов. Пушкин. Айсыҡ. Аҡыҡ. Помада. Отто. Маршрут. Каса. Трюк. Ҡорт. Осраҡ. Оҫта. Архив. Әмер. Март. Химик. Әрйә. Йүкә.

**Вертикаль буйынса:** Айтматов. Ғәскәр. Ут. Ҡайраҡ. Абыз. Мәктәп. Атай. Еҙғорт. Тарих. Оят. Инәй. Ваҡыт. Хром. Тракт. Илек. Подполковник. Кәрим. Кама. Назарат. Ат.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# МӘҘӘНИ АКЦИЯ...

## "Шағир көндәлеге"нә арнала

**Өфөлә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 90 йыл тулыуға бағышланған мәҙәни акция дауам итә. Баш ҡаланың төрлө урындарында "Шағир көндәлеге" кинокартинаһының ижади төркөмө һәм актерҙары менән осрашыуҙар ойошторола, нәфис фильм күрһәтелә, тип хәбәр итә Өфөнөң Мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәте.**

**18 ноябрҙә** ошондай саралар Өфөнөң Дим районында - "Орион" ижад һарайында (Таллин урамы, 17) үткәрелә. Көндөҙгө сәғәт 12-лә һәм 4-се яртыла башлана. **15 ноябрҙә** фильмды Ҡала мәҙәниәт һарайында (Октябрь проспекты, 137) көндөҙгө сәғәт 12-лә һәм 3-тә ҡарарға мөмкин. **18, 21, 22 һәм 23 ноябрҙә** Черниковкала Рәми Ғариповҡа арналған марафон башлана. Был көндәрҙә Мәҙәниәт һәм халыҡ ижады үҙәгендә (Тыныслыҡ урамы, 12) көндөҙгө сәғәт 12-лә "Шағир көндәлеге" фильмы күрһәтелә һәм картина авторҙары менән ижади осрашыу була.

Өфөнөң мәҙәни-ял үҙәге (Беренсе Май урамы, 47) - **23 ноябрҙә,** "Моторҙар эшләүселәр" мәҙәниәт һарайы (Машина эшләүселәр урамы, 10) **25 ноябрҙә** саралар уҙғара. Сеанстар көндөҙгө сәғәт 12-лә һәм 3-тә башлана. Сипайлово биҫтәһендә йәшәүселәрҙе **21 ноябрҙә** Йәш тамашасы театрына (Ю. Гагарин урамы, 16/2) саҡыралар. Саралар көндөҙгө сәғәт 12-лә һәм 3-тә башлана. Өфө балалар филармонияһы (Октябрь проспекты, 33) **22 ноябрҙә** көндөҙгө сәғәт 12-лә һәм 3-тә осрашыуҙар ойоштора, кино күрһәтә.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, марафон 1 ноябрҙә Затон биҫтәһендә старт алғайны, артабан фильм "Сәнғәт төнө"ндә В.И.Ленин исемендәге йорт-музейға килеүселәргә күрһәтелде. Өфө ҡалаһы тарихы музейында (Ленин урамы, 72) саралар 2023 йылдың февраленә тиклем шишәмбе-йома көндәрендә уҙғарыла. Фильмды "Пушкин картаһы" йәки ҡулаҡса менән түләп ҡарарға мөмкин.

"Шағир көндәлеге" фильмы Башҡортостан Башлығы, Мәҙәниәт министрлығы һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ярҙамында төшөрөлгән **(12+)**.

ҺОРАУ - ЯУАП

# БАЛАЛАР ЯҠЛАУЛЫ

**➔ Баланы балалар баҡсаһына сиратһыҙ урынлаштырыу буйынса ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

- Был мәсьәлә менән Башҡортостан Мәғариф министрлығы шөғөлләнәсәк. Әйткәндәй, был ведомствоға ярҙам сараларының ҙур блогы беркетелгән. Унда балалар баҡсаһына сиратһыҙ урынлашыу, түләүһеҙ йөрөү, оҙайтылған төркөмдәргә сиратһыҙ һәм бушлай йөрөтөү, өҫтәмә белем биреү учреждениеларында түләүһеҙ шөғөлләнеү һәм башҡалар инә.

**➔ Атай мобилизацияға ирекмән булып китһә, уның ҡарамағындағы бала менән ни эшләргә?**

- Атай балаһына опекун (попечитель) һайларға тейеш түгел, сөнки ҡануниәткә ярашлы, ата-әсәнең хоҡуҡтары һәм бурыстары бер тигеҙ. Шулай итеп, атаһы мобилизацияланған осраҡта бала әсәһенә тапшырыла.

Әгәр был мөмкин булмаһа һәм атай кеше йә туғандары уның менән бәйләнешкә инә алмаһа, был хаҡта балалар йәшәгән урын буйынса опека һәм попечителлек органына хәбәр итергә кәрәк.

Опека һәм попечителлек органы әсәнең һуңғы йәшәү урынын билдәләйәсәк һәм:

- йә балаларҙы әсәһенә тапшырыу мәсьәләһен хәл итә,

- йә (әсәнең йәшәү рәүеше насар булған һәм уға балаларҙы тапшырыу мөмкин булмаған осраҡта) уны ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм итеү йәки сикләү тураһында дәғүә ғаризаһы менән судҡа мөрәжәғәт итәсәк. Был осраҡта опека һәм попечителлек органы балаларҙы алып ҡалған туғанына (йәки башҡа кешегә) алдан опека (попечителлек) рәсмиләштерергә хоҡуҡлы.

**➔ Балаға атаһының йәки яҡын кешеһенең махсус хәрби операцияға китеүен нисек әйтергә?**

- Был осраҡта психологтар ярҙамға килә. Ул балаға атаһы менән бәйләнеш тоторға ярҙам итә. Бәйләнеш булғанда айырылышыу һағышы еңелерәк кисерелә.Психологтан өҫтәмә консультацияны 8-800-2000-122 дөйөм Рәсәй балалар ышаныс телефонына шылтыратып алырға була (тәүлек әйләнәһенә, бушлай).

**➔ Көтөлмәгән хәл була ҡалһа, ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

- Әгәр ҙә ғаиләлә көтөлмәгән хәл булған осраҡта һәр ваҡытта ла 8927311-23-55 телефоны буйынса #БЕҘБЕРГӘ төбәк штабының ҡыҙыу линияһына йәки 8 (800-20) 1-89-03 һанына М.Шайморатов исемендәге ирекмәндәр штабына шылтыратырға мөмкин. Ирекмәндәр төрлө һорауға яуап бирә, йорт, хужалыҡ буйынса ярҙам итә, баланы дәрескә алып бара, аҙыҡ-түлек, дарыу алып килә, әйткәндәй, уның өсөн түләргә кәрәк. Шулай уҡ төрлө мәсьәләне хәл итеү өсөн һәр районда оператив штаб эшләй.

**➔ Социаль түләүҙәр, балалар менән йәшәүҙе яйға һалыу өсөн документтар эшләү буйынса ҡайҙа ярҙам һорап мөрәжәғәт итә алам?**

- Был осраҡта йәшәгән урындағы ғаилә хеҙмәтенә мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. Социаль ярҙам алыу өсөн хеҙмәткә саҡырылған тормош иптәшенең килеме тураһында мәғлүмәт кәрәк булһа, хәрбиҙең шәхси аккаунтын Рәсәй Федерацияһы Оборона министрлығы сайтында ҡулланырға кәрәк. "Башҡортостан Республикаһы" өлкәһен һайлағыҙ, кәрәкле белешмәне "Справки по форме 2 НДФЛ (ғариза өлгөһөн сығарып алығыҙ)" йәки "Справки о доходах и иного характера" һәм хәрби хеҙмәткәр исеменән өлгө буйынса ғариза яҙаһығыҙ. Хеҙмәт түләүһеҙ. Балалы ғаиләләргә льготалар һәм түләүҙәр тураһында дөйөм мәғлүмәт менән бында танышырға мөмкин.

ТАМАШАСЫ ФЕКЕРЕ

# БАШҠОРТ ТЕАТРЫ ИКӘН... башҡортса һөйләһен!

**Ауылыбыҙҙа Сибай театр-концерт берекмәһенең "Сулпан" балалар театры А.П.Чеховтың "Каштанка" хикәйәһе буйынса сәхнәләштерелгән спектакль менән сығыш яһаны. Иҫке Монасип ауыл биләмәһенә ҡараған өс ауылдың уҡыусылары менән зал шығырым тулды. Хатта балалар баҡсаһынан 2 генә йәшлектәренән алып берәһе лә ҡалмай йыйырлашып килеп тамаша ҡылдылар.**

Сибай актерҙары, һәр ваҡыттағыса, беҙҙе һоҡландырып, осҡа уйнанылар, балаларҙың йотлоғошоп ҡарауы ла быға дәлил ине. Әҫәр үҙе лә тәрбиәүи яҡтан бик фәһемле булды. Тамаша бер тынала ҡаралды. Шулай ҙа...

Күңелдә ялған өмөт китеге ҡалды. Был тәнҡит тә түгел һәм әлеге спектаклгә лә ҡағылышы юҡ. Сибайҙар килә, тигәс, нинәләр, актерҙар тарафынан матур яңғыраған саф башҡортса сығыш көткәйнек. Бөгөнгө көндә балаларыбыҙ интернет йоғонтоһо менән русса аралашыуға көсөп барғанда, башҡортса йәнһүрәт, кинофильмдарҙың аҙ булыуын, ауылдарҙа балалар өсөн спектакль-концерттарҙың һирәк күрһәтелеүен иҫәпкә алғанда, һуңғы 10 йылда тәүгә килгән театрҙың башҡортса сығыш яһауы бик ваҡытлы, кәрәкле һәм мөһим сара булыр ине лә бит. Юҡ, башҡорт театры башҡорт ауылына килеп, рус телендә сығыш яһаны...

Балалар өсөн эшләгән театрҙар, йыр, бейеү ансамблдәре, һеҙгә мөрәжәғәт итәбеҙ: килегеҙ беҙгә, беҙ һеҙҙе әлегеләй зал тултырып ҡаршыларбыҙ. Тик шуны онотмағыҙ: балаларыбыҙҙы башҡорт рухында тәрбиәләү, уларҙың кескәй йөрәгендә халҡыбыҙҙың мәҙәниәтенә, сәнғәтенә оло һөйөү уятыу, башҡорт телендә матур итеп аралашыуҙың мөһимлеген аңлатыу өсөн һеҙҙең сығыштарығыҙ беҙгә ҙур ярҙам булыр ине.

**Динара ҠОТЛОБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**



# "ЭСЕҢ БОШҺА, ҺЫПЫРТ ЭСТӘРЛЕГӘ"

**Эйе, юҡҡа ғына шулай тип әйтмәгән шул Рәми Ғарипов заманында. Бына әле лә көҙгө йонсоу кистә Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрының өр-яңы премьераһын - Мирхәйҙәр Фәйзиҙең "Аҡ ҡалфаҡ" драмаһын ҡарарға килеп, күңелдәрҙә ҡояш балҡытып ҡайттыҡ.**

Ә ҡуйыусы режиссеры кем бит әле! Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Йыһаншин үҙе! Был исемдә атау ғына ла спектаклдең ниндәй юғары кимәлдә үтеүе тураһында һөйләйҙер. Актерҙар составы ла көслө, хәҙер талантлы йәштәр урта быуындың үксәһенә баҫып килә. Сәхнәлә мәңгелек тема - мөхәббәт темаһы күтәрелеп, был илаһи тойғо алдында бер ниндәй көстөң дә кәртә була алмауы йәнә бер иҫбат ителә. Мөхәббәт "өс мөйөшөн" Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Резеда Әмәкәсова, сағыу актерҙарҙың береһе Марат Зөбәйеров һәм йәштәрҙән Илнур Атйетәров бик оҫта кәүҙәләндерҙе. Төп героиняның ата-әсәһе ролен актерҙар Илгиз Әкимбәтов менән Гөлнара Йәрмиева һоҡланғыс итеп уйнаны. Икенсе пландағы актерҙарға ла "Афарин!" тип әйтер һәр кем. Эйе, классик әҫәр "йәҙәп" уйнар өсөн киң мөмкинлектәр бирҙе һәм актерҙар шул мөмкинлектән рәхәтләнеп файҙаланды. Һәр бер образ ҡабатланмаҫ тойғо ҡалдырҙы күңелдә.

Театр атрибуттары ла бик ентекле уйланылған: балетмейстерҙың, декораторҙың, рәссамдың тырыш хеҙмәте ярылып ята. Ә музыкаль биҙәлеш - үҙе бер ҡаҙаныш! Юлай Үҙәнбаевтың заман йырҙары менән халыҡ йырҙарын бергә яңғыратыуы тамашаны тағы ла сағыуырак итте. Спектаклдең тағы бер үҙенсәлеге - геройҙар телмәренең кинәйәлә булыуында. Бер кем дә үҙ фекерен туп-тура әйтеп һалмай, ә мәкәлдәр, әйтемдәр, тормош күренештәре аша уратып аңлата. Ирекһеҙҙән уларҙың һәр бер һүҙенә, һәр бер репликаһына ҡолаҡ һалып, ниндәйҙер көсөргәнештә ултыраһың. Был да авторҙың уникаллеген, әҫәр телмәренең байлығын, фекерҙәр тәрәнлеген күрһәтә. Юғиһә, хәҙерге тамашасы асыҡ-ярыҡ һөйләшеүгә, еңел-елпе аңлашыуға күнегеп китте бит.

Ҡыҫҡаһы, ике өләштән торған драма аҙағынан башына ҡәҙәре йыр-бейеү менән байытылып, тамашасыға оҙаҡҡа етерлек рухи аҙыҡ бирҙе. Уйландырҙы, һиҫкәндерҙе, тетрәндерҙе, күңелдәге иң нескә ҡылдарҙы ҡуҙғатты. Эйе, Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры йыл да үҙенсәлекле әҫәрҙәр тәҡдим итеп, республикабыҙҙың театр тормошон байытыуға ҙур өлөш индерә. Уның был өр-яңы ижад эше лә һис шикһеҙ лайыҡлы баһа аласаҡ.

**Гөлнур ДӘҮЛӘТЙӘРОВА.**
**Ишембай районы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠЫЛЫС БЕРҘЕ ҮЛТЕРГӘН, тел меңде үлтергән

Атанан ул тыуһа, ата юлын ҡыуһа ине, биленә ҡаҙаҡ быуһа ине, битенә килер оятты үҙе белеп йыуһа ине.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ғаиләбәхетенә һуҡыр ҡатын менән һаңғырау ир генә өлгәшә ала, тип әйткән кеше бик аҡыллы булғандыр.

**(М. Монтень).**

Һин эҙләгән бәхет һинең менән килгән күләгәгә оҡшаш: артынан сапһаң - тоттормай, ҡасһаң - артыңдан ҡыуа төшә.

**(Ғәрәп халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ҡарт вафаты алдынан улын саҡырып алған да былай тигән: "Улым, мин һинең бәхетле булыуыңды теләйем. Бәхетле булыу өсөн ил гиҙ, хыялыңды нисек тормошҡа ашырырға икәнен әйтерҙәр" ,- тигән. Атаһы үлгәс, улы донъя гиҙеп сығып киткән. Бына ул бер йылғаға етә һәм яр буйында ябыҡ, ас, ҡарт ҡына бер ат йөрөгәнен күрә. "Һин ҡайҙа китеп бараһың, егет кеше?" - тип һорай ат. "Бәхет эҙләп китеп барам, - ти егет. - Бәлки, һин уның ҡайҙалығын беләһеңдер?" "Йәш сағымда мине барыһы ла иркәләне, ашатты, эсерҙе, эшләтмәне, башҡалар хаҡында уйлап та бирмәнем, - ти ат. - Бына хәҙер ҡартайҙым, башҡаларҙың миндә бер эше лә юҡ. Шуға ла һиңә кәңәшем шул: йәшлегеңде һаҡла. Бөтә эште лә эшлә. Башҡаларҙың шатлығы менән шатлан. Хәстәрлектәрҙән ҡурҡма. Шул саҡта бар бәхет тик һинең эргәңдә булыр".**

**Егет артабан китә һәм юл буйында бер йыланды күрә. "Ҡайҙа киттең, егет?" - тип һорай йылан. "Бәхет эҙләп китеп барам". "Бына мин дә үҙемдең ағыуым менән ғүмер буйы ғорурландым, - ти йылан. - Минән барыһы ла ҡурҡа, тип уйланым. Юҡ, ҡурҡмайҙар, ә күрә алмайҙар. Һәр береһе мине үлтерергә теләй. Шуға ла мин хәҙер барыһынан да ҡасам. Һиндә лә бар ундай ағыу - ул һинең телең. Ҡара, телең берәүҙе лә сәбәпһеҙгә саҡмаһын. Ул саҡта һиңә берәүҙән дә ҡасырға тура килмәҫ һәм һин бәхетле булырһың..."**

**Егет артабан китә һәм ҙур ҡошҡа тап була. Ҡош уның ҡайҙа китеп барыуы менән ҡыҙыҡһына. Егеттең яуабына ҡаршы ул ҡош шулай ти: "Һин күптән ил гиҙәһеңдер. Йөҙөңдә саң баҫҡан, кейемдәрең һәләмәгә әйләнгән. Кешеләр һинән йөҙ бора. Бәхет тә һинең эргәңдә туҡтап торорға теләмәҫ. Шуның өсөн һинең тирәңдә бар нәмәнең матур булыуына өлгәш. Ул саҡта бәхетеңде лә күрерһең".**

**Шул һөйләшеүҙән һуң егет кеше өйөнә әйләнеп ҡайтҡан. Хәҙер инде ул бәхет эҙләп ҡайҙалыр ситтә йөрөргә түгел икәнен ныҡлап аңлай".**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ

# ҠУРАЙЫБЫҘ ҘА ҺЫР БИРМӘНЕ

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһының Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры солистары Бөтә Рәсәй милли уйын ҡоралдары йәштәр оркестры составында Санкт-Петербург филармонияһы сәхнәһендә сығыш яһаны. Был проектта республикабыҙҙан ҡурайсы Арыҫлан Оморҙаҡов, ҡыл ҡумыҙсылар Руфина Аллабирҙина, Алиса Яҡшыдәүләтова һәм Любовь Гоглачева менән БР Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестрының баш дирижеры Линар Дәүләтбаев ҡатнашты.**

Үҙенсәлекле музыкаль командаға ағзаларҙы бөтә ил буйлап һайлап алғандар һәм оркестрға Рәсәйҙең 25 төбәге, Беларусь һәм Монголиянан 17-27 йәшлек 80 музыкант ингән. Йәш булыуҙарына ҡарамаҫтан, улар барыһы ла үҙ эшенең оҫтаһы, танылған шәхестәр. Яңы коллектив төҙөү идеяһы Санкт-Петербургтың Мәҙәниәт буйынса комитеты, "Орнамент" фонды һәм "Петербург-концерт" ойошмаларыныҡы, ә етәкселек эше "Терема" Милли уйын ҡоралдары оркестрының художество етәксеһе һәм баш дирижер Андрей Долговка йөкмәтелгән.

Башҡортостан дирижеры Линар Дәүләтбаев был сарала тағы ике билдәле коллегаһы - Белгород дәүләт филармонияһының урыҫ халыҡ инструменттары оркестры баш дирижеры Евгений Алешников һәм Калининград өлкәһе урыҫ халыҡ инструменттары оркестры баш дирижеры Антон Жуков менән бергә ҡатнашты. Кисәнең махсус ҡунағы - РФ-ның атҡаҙанған артисы Андрей Мерзликин булды. Яңы төҙөлгән йәш ансамбль Санкт-Петербург филармонияһында думбыра, балалайка, баян, орган, башҡорт ҡурайы һәм ҡыл ҡумыҙ, карелдарҙың кантеле, белорустарҙың цимбалы, осетиндарҙың гармоника, монголдарҙың мөрн хуур мондарын яңғыратты. Тамашасылар М. Равель, П. Чайковский, С. Слонимский, Г. Шендерев, А. Чайковский, Е. Петров, А. Цыганков, А. Танонов, А. Гольский, К. Караев, С. Әхмәтов, Б. Энхбаяр музыкаһын тыңланы.

- Бында төрлө ҡалаларҙан йыйылған музыканттар осрашты, проекттың әһәмиәте лә тәжрибә уртаҡлашыу, башҡа дирижерҙар менән эшләп ҡарау мөмкинлеген биреүҙә. Бер нисә көн әҙерләндек, оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнаштыҡ, филармония залында репетициялар үткәрҙек. Был әҫәрҙәрҙең ҡурай менән нисек яңғырауы бигерәк тә ҡыҙыҡһындырғайны беҙҙе, - тине Алиса Яҡшыдәүләтова.

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22045

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Ғәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ"
нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
11 ноябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1426